*Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы тамамланыуға бер аҙна ғына ваҡыт ҡалды. Киләсәктә лә "Киске Өфө" гәзитенең тоғро уҡыусылары икәнегеҙҙе раҫлап, беҙгә дуҫ, теләктәш, таяныс булып ҡалыуығыҙҙы бик-бик теләйбеҙ. Әлеге миҙгел - баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана икәнде йөрәгегеҙ менән аңлаһағыҙ ине, тибеҙ.*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

21 - 27 ИЮНЬ (ҺӨТАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№25 (599)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Башҡортто кем бөтөрә? Үҙебеҙ! 3



Рәми Ғарипов рухы… капитандар тәрбиәләй 5-6



Салауаттың нәҫел тамырҙары… аҡтамырҙай ҡалҡты ҡабаттан 8-9



Үҙ һөнәреңә бирелгәнлек - хаҡ яҙғаның шул була 10



14 ТВ-программа

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## 73 йыл элек күпкән донъялағы иң ҡанлы ғәрәсәт тә һабаҡ бирмәй кешелеккә: Ер йөҙө һаман булһа һуғыш һөрөмөнән сәсәй. Ни етмәй һуғыш суҡмарҙарына? Тыныслыҡ өсөн ни кәрәк?

***Нурмөхәмәт хәҙрәт НИҒМӘТУЛЛИН, мөфтөй, Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты рәйесе:*** Бисмилләһир-рәхмәнир-рахим! Донъялағы иң ҡанлы һуғыштарҙың береһе булып, тиҫтәләрсә миллионлап кеше ғүмерҙәрен ҡыйған Бөйөк Ватан һуғышы башланыуға 73 йыл дәүер үтеп китһә лә, унын эҙемтәһе бөгөнгө көндә лә кемеһенендер ғәзиз улы, ире, йә булмаһа картатаһы, кемеһенендер олатаһы рухында һәр ғаиләнен уңалмаҫлыҡ күңел яраһы булып хәтергә уйылған. Ошо һуғышта уларҙың күбеһе ҡаты алышта башын һалған, ҡайһылары хәбәрһеҙ юғалған, ҡайһылары ауыр яранан госпиталдәрҙә вафат булған; әсир төшөп, концлагерҙа ҡырылған йә сит илдәргә барып сығып, мәңгелеккә шунда ятып ҡалған. Ҡайһыларынын ҡәберҙәре лә юҡ. Күпме кеше ошо һуғыш арҡаһында Аллаһы Тәғәлә биргән ғүмерен тулы итеп йәшәй алманы: күпме егет - өйләнә алмай, күпме ҡыҙ кейәүгә сыҡмай ҡалды, күпме сабый яҡты донъяға тыуманы... Һуғыш эҙе быуатҡа яҡын дауам итә хәҙер, ләкин был яҡты эҙ түгел, ҡара эҙ. Ошондай ҡайғы һәм иҫкә алыу көндәре булмаһын башҡаса тарихыбыҙҙа.

Һуғыштың ниндәйе генә булмаһын, унда кеше үлтерелә, ҡан ҡойола. Ҡөрьән-Кәримдә, әгәр бер генә кеше үлтерелһә лә, бының - күп кеше үлтерелеүгә, ә инде бер генә кешене тере ҡалдырыуҙың да кешелекте тере ҡалдырыуға тиң булыуы хаҡында әйтелә. Шуныһы үкенес: бөгөн, цивилизация ғасыры тип танылған XXI быуатта ла хатта әле бында, әле тегендә һуғыш уттары тоҡанып тора. Украинаны ғына алып ҡарағыҙ: бер үк халыҡ үҙ халҡына ҡаршы һуғыша, тыныс ҡасаба-ҡалаларҙы, торлаҡтарҙы, хатта больницаларҙы утҡа тота. Ә ҡасаҡтарҙың хәле әлеге 73 йыл элек булған күренештәрҙе күҙ алдына килтереп баҫтыра. Илебеҙ етәкселегенең Украина менән мөнәсәбәттәрҙе көйләүгә, ундағы мәғәнәһеҙ ҡан ҡойошҡа сик ҡуйыуҙа фәҡәт тыныс килешеүҙәр аша, аҡыл менән эш итеүенә өмөтөм ҙур, башҡаса булыуы мөмкин дә түгел. Хәтер һәм ҡайғы уртаҡлашыу көнө алдынан бөтөн донъя халыҡтарына шулай тип мөрәжәғәт иткем килә: бер-беребеҙгә изгелекле, күркәм мөнәсәбәттә булып, Аллаһы Тәғәлә биргән ғүмеребеҙҙе илебеҙ ҡеүәтен үҫтереүгә арнап, матур итеп ғаилә ҡороп, эшебеҙҙе, изге ниәттәребеҙҙе, милләтебеҙҙе, телебеҙҙе дауам итерлек балалар үҫтереп йәшәйек! Ҡоралланыуҙы туҡтатайыҡ! Ер шарында төрлө милләт вәкилдәренә һыйышып йәшәү мөмкинлеге бирелгән икән, уны һаҡлайыҡ, тыныслыҡ булдырайыҡ - беҙҙең башҡа планетабыҙ юҡ. Әссәләмү-ғәләйкүм үә рәхмәтул-лаһи үә бәрәкәтүһ! Амин.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!*

# ХАЛЫҠСАНЛЫҒЫ МЕНӘН АЛДЫРА

**"Киске Өфө" гәзитен беҙҙең Башҡорт дәүләт университеты тарих факультеты уҡытыусылары һәм студенттары ла яратып уҡый, үҙҙәре лә унда әленән-әле сығыш яһап тора. Мин үҙем иһә гәзитте сыға башлаған мәленән бирле, даими алдырам. Ул ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ысын мәғәнәһендә халыҡ гәзитенә әйләнеп өлгөрҙө. Темаларҙы асыуы, халыҡсанлығы менән уҡыусылар күңеленә хуш килде.**

Әлбиттә, әүҙем уҡыусы булараҡ, гәзит мөхәрририәтенә тәҡдимдәрем дә бар, уларҙы мин яңғыратып та торам. Ҡайһы бер мәсьәләләрҙә ҡыйыуыраҡ булырға, тәнҡиткә күберәк урын бирергә кәрәк, тимен. Был фекерҙе үҙебеҙҙең башҡа баҫмаларға ҡарата ла әйтә киләм.

Дөйөм алғанда, "Киске Өфө" яҡшы тойғолар ғына ҡалдыра. Башҡортостан халҡын уға дәррәү яҙылырға өндәйем. Бөгөнгө көндә был үтә лә мөһим, кәрәкле эш, тип әйтер инем. Ни өсөн тигәндә, хәҙер дәүләт тарафынан баҫмаларға бүленгән субсидия күләме кәмене, шул арҡала гәзит-журналдар ауыр хәлдә ҡалды. Уларҙы бөлгөнлөктән халыҡтың дәррәү яҙылыуы ғына ҡотҡара аласаҡ. Милли баҫмаларыбыҙҙы иһә бары үҙ халҡыбыҙ ғына, үҙенең күрһәткән әүҙемлеге менән һаҡлап ҡала ала.

**Марат ҠОЛШӘРИПОВ,**
**тарих фәндәре докторы,**
**профессор.**




**(БДУ-ның тарих факультеты уҡытыусылары).**

✓ *Олатайым кеүек бик күптәр уның азатлығы өсөн ғүмерҙәрен биргән Украина үткәндәрҙе бик тиҙ оноторға уйлай, яңы ҡорбандар көҫәй, үҙ халҡына ҡаршы көбәк тоҫҡай ғына түгел, шартлата, емерә, яндыра, үлтерә үҙ туған халҡын.*



ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# СИФАТЛЫ ХЕҘМӘТ... түләнергә тейеш



**Һөнәрем буйынса медицина хеҙмәткәремен. 20 йылдан ашыу баш ҡала дауаханаларының береһендә шәфҡәт туташы булып эшләйем. Эшем ауыр һәм яуаплы булыуға ҡарамаҫтан, үҙемә оҡшай, шуға күрә уны алыштырыу хаҡында ошо йылдар эсендә бер тапҡыр ҙа уйламаным. Улай ғына ла түгел, эш сәғәттәремдән тыш та таныштарға, күрше-тирәгә, туғандарға һәм дуҫтарға медицина ярҙамын йыш күрһәттем. Һәм, тәбиғи, быларҙың барыһы ла "рәхмәт"кә эшләнде. Ләкин "Киске Өфө"ләге ошо рубрика менән донъя күреүсе мәҡәләләрҙе уҡығас, эшем өсөн күпмелер хаҡ алырға ҡарар иттем.**

Зарланырға күнекмәгәнмен, шулай уҡ бурысҡа аҡса алып тороуҙы ла үҙһенмәйем, ләкин ваҡыты-ваҡыты менән донъя мәшәҡәттәренән сығып, был ҡағиҙәләрҙе үҙгәртергә тура килә. Улым түләүле юғары белем ала, мәктәптә уҡыусы ҡыҙыма ла теге йәки был әйберҙәр йыш кәрәк була. Ирем менән икебеҙҙең эш хаҡы, тәү ҡарашҡа, етерлек кеүек, тик барыһын да һатып алғас, һәр тин һанаулы. Шуға ла үҙем күрһәткән хеҙмәттәрҙе түләүле итергә ҡарар ҡылдым да инде.

Ә хеҙмәттәргә килгәндә, улар етерлек: ауырыуҙарҙың өйҙәренә барып рецепт буйынса укол эшләйем, тамыҙғыс (капельница) ҡуям, ҡан баҫымын үлсәп, дарыу бирәм, шулай уҡ аптеканан тейешле дарыуҙар ҙа һатып алам. Быларҙың барыһына ла ваҡыт бүлергә кәрәк, шулай уҡ юлға ла байтаҡ ҡына аҡса түгергә тура килә. Ә хәҙерге заманда ваҡыт та ҡиммәт. Ошоларҙың барыһын да уйлап һәм үлсәп, иремә әйткәс, ул минең ниәтемде хупланы. Хеҙмәттәрем менән ҡулланыусылар ҙа, ғәжәпкә, минең ҡарарға аптыраманы һәм ситкә боролманы.

Түләүле медицина хеҙмәттәре күрһәтә башлауыма өс ай ваҡыт үтте һәм уның һөҙөмтәләрен тик яҡшы яҡтан ғына билдәләргә мөмкин. Ғаилә бюджетыбыҙҙы хәҙер минең өҫтәмә килемем дә арыу уҡ тулыландыра. Яҡшы миҫалды күреп, ирем дә, балалар ҙа аҡса эшләү юлдарын эҙләй башланы һәм һәр кем гәзиттә баҫылған тәҡдимдәр араһынан үҙҙәренә ҡулайлыһын тапты. Мин иһә, үҙ сиратымда, коллегаларыма, шулай уҡ башҡа өлкәлә төрлө хеҙмәттәр күрһәтеүселәргә, эшегеҙ өсөн аҡса алырға оялмағыҙ, тип әйткем килә. Аҡыл йәки физик көс түгеп сифатлы башҡарылған хеҙмәт, минеңсә, түләнергә тейеш.

**Асия СОЛТАНОВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *73 йыл элек үткән донъялағы иң ҡанлы ғәрәсәт тә һабаҡ бирмәй кешелеккә: Ер йөҙө һаман булһа һуғыш һөрөмөнән сәсәй. Ни етмәй һуғыш сукмарҙарына? Тыныслыҡ өсөн ни кәрәк?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Тимерйән РӘЖӘПОВ, БР Хәрби хәрәкәттәр ветерандары союзы рәйесе:*** Тарихтан белеүебеҙсә, 1941 йылғы һуғыш алдан иғлан ителмәйенсә, 22 июнь таңында - ял иртәһе - ил халҡы иҙерәп йоҡлаған мәлдә башланып китә. Гитлерҙың мәкере тап ана шунда күренә лә: йоҡола саҡта кеше һаҡлауһыҙ-яҡлауһыҙ, ә фашист илбаҫарҙарына тап шул ғына кәрәк була ла: совет илен бер ҡармауҙа юҡ итеү, тубыҡландырыу, халҡын ҡырыу, ҡол итеү. Ләкин бөтә халыҡтың бер булып дошманға ҡаршы күтәрелеүе, аяуһыҙ ҡаршылыҡ күрһәтеүе - алғы һыҙыҡтамы, партизан отрядтарындамы, диверсион төркөмдәрҙәме, тылдамы - совет халҡының иҫ киткес ҡаһарманлығы, ныҡлығы, илһөйәрлеге иһә фашист өсөн көтөлмәгән хәл булып сыға. Мәкерҙе уны бары тик шундай берҙәмлек, фиҙаҡәрлек менән генә еңергә мөмкин. Ана шул изге юлда ҡорбан булғандарҙы оноторға хаҡыбыҙ юҡ, улар алдында башыбыҙҙы эйеп, бер минут тын ҡалып хөрмәтләйек, уларҙың рух ныҡлығын үҙебеҙгә мәңгелек өлгө итеп ҡуйайыҡ, йәш быуынға улар миҫалында тәрбиә бирәйек. Юғиһә, бөгөн йәштәр хаҡында төрлө фекерҙәр ишетергә тура килә. Ә ысынында ниндәй һуң улар? Бөгөн уларға ил яҙмышын ышанып тапшырырға буламы? Был хаҡта бәхәсләшергә яратыусылар күп ул, ләкин уларҙың һәр береһе үҙ бурысын да онотмаһын ине: ғаиләһендә кем балаһын нисек итеп тәрбиәләй бит. Шуға күрә лә мин бөтөн йәштәребеҙҙе лә бер һыҙыҡҡа теҙеп ҡарауҙан алыҫторам, төрлөһө бар уларҙың. Әйткәндәй, беҙҙең союз ветерандары ойоштороған патриотик сараларҙа ихлас ҡатнаша йәштәр һәм үҫмерҙәр. Әле бына 21 - 22 июндә Ҡырмыҫҡалы районы биләмәһендә урындағы хакимиәт менән берлектә Хәтер һәм ҡайғы уртаҡлашыу көнөнә бағышлап, хәрби-патриотик йыр буйынса бик ҙур халыҡ-ара фестиваль үткәрәбеҙ. Унда Афғанстанда, Чечняла һәм башҡа хәрби бәрелештәрҙә сынығыу үткән ветерандарыбыҙ гитараларын алып, бөтөн ғаиләләре, бала-сағалары менән йыйыласаҡ. Фестиваль Хәтер һәм ҡайғы уртаҡлашыу көнөнә бағышланған матәм митингыһы менән асылып китәсәк. Сараның төп бурысы - балаларҙы, йәштәрҙе хәрби-илһөйәрлек традицияларында тәрбиәләү эшенә үҙ өлөшөбөҙҙө индереү.

***Әнүзә СӘЙФУЛЛИНА, Баймаҡ районынан күп балалы әсә:*** Ғаиләбеҙҙә өс ир бала, бер ҡыҙ үҫтерәбеҙ. Бөйөк Ватан һуғышы башланған көн тураһында мәктәп йылдарында уҡыған тарих, әҙәбиәт дәрестәренән дә, кинофильмдарҙан да ҡарап беләбеҙ, ә шулай ҙа ҡартәсәйем һөйләгәндәр миңә ныҡыраҡ тәьҫир итә. Һуғыш башланып киткәндә уға 14 йәш була. Атаһы, фотоларынан ғына күрепбелгән минең оло ҡартатайым һәм бер туған ағаһы, олатайым, бер-бер артлы һуғышҡа алына, ләкин икеһенә лә иҫән-һау әйләнеп ҡайтыу бәхете теймәй. Оло ҡартатай Курск дуғаһы өсөн барған утлы ғәрәсәттә батырҙарса һәләк була (хеҙмәт иткән часынан шулай тип яҙылған "ҡара ҡағыҙ" килә), ә олатайым Украина ерен фашист илбаҫарҙарынан азат иткәндә үлемесле яраланып, ялан госпиталендә вафат була. Ҡартәсәйемә 83 йәш, ләкин ул атаһы менән ағаһы фронттан яҙған хаттарҙың йөкмәткеһен (хаттар, үкенескә күрә, һаҡланмаған) һүҙмә-һүҙ хәтерләп һөйләй, уны хатта беҙ ҙә ятлап бөткәнбеҙ. Был хаҡта нисә тапҡыр беҙгә һөйләһә лә, ҡартәсәйем ғүмерлек йөрәк яраһынан зар илай, тыныс ҡына һөйләй алмай ул дәһшәтле йылдар хаҡында. Үҙе ул саҡ тал сыбығындай нескә генә бала көйө урманда ҡуна ятып иптәштәре менән утын ҡырҡа, аҙаҡ торф сығарыуҙа ла эшләй. Тылдағылар ни күрһә, ни эшләһә, ул да шул эштәрҙе башлап йөрөгән.

Бөгөн дә донъялар тыныс түгел. Ғүмер буйы ҡулға-ҡул тотоношоп татыу йәшәгән ут күршебеҙ Украина милләтселәре, ана, ни ҡылана... Улдарымдың киләсәге өсөн хәүефләнеп, йөрәгем өшөп китә: тыныс ҡына торһон ине лә бит донъялар, юҡ, кемгәлер байлыҡ, власть, ер, һыу-һауа етмәй! Был донъяға мәңгелеккә килгән кеүек ҡыланалар. Олатайым кеүек бик күптәр уның азатлығы өсөн ғүмерҙәрен биргән Украина үткәндәрҙе бик тиҙ онотторға уйлай, яңы ҡорбандар көҫәй, үҙ халҡына ҡаршы көбәк тоҫҡай ғына түгел, ата, шартлата, емерә, яндыра, үлтерә үҙ туған халҡын. Юҡҡа ғынамы ни ундағы донъя болғатыусы бөгөнгө милләтселәрҙе үҙ халҡы уҡ телетапшырыуҙарҙа "фашистар" тип атай. Шуға күрә лә халыҡ-ара именлек ойошмаларының Украиналағы хәлдәргә ҡарата ҡәтғиерәк саралар күрмәүе аптырата. Фашизмға баш күтәрергә ирек ҡуйылмаһын ине берүк. Уны яралғы хәлендә уҡ юҡ итеү сараһы күрелмәй ниңә? Икенсе донъя һуғышын башлап ебәргән фашизм кеүек, уның да Ер йөҙөнә таралып китеүен көтәләрме әллә юғиһә?..

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

• Шулай итеп, 2014 йылдың икенсе яртыһына **50665** индекслы "Киске Өфө" гәзитенә **507 һум 72 тингә**, **50673** индекслыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) **537 һум 72 тингә** яҙылып була.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ.**

• Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **336 һумға** яҙылырға була.

• Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға **246 һум**.

• Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **246 һум**.

**Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу** мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы kiskeufa.ru сайтында **"Яҙылыу"** тигән төймәгә баҫып, **"Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу (534 һум 42 тин)"** һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.



• **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Июндә 2014 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ **"История башкирского народа"**, 10 уҡыусыбыҙ Гөлнур Яҡупованың **"Төш юрау китабы"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

• **Беҙҙең сайт:** *www.kiskeufa.ru.* Беҙҙең электрон почта: *info@kiskeufa.ru.* Беҙҙең блог: *blog.kiskeufa.ru.*

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты һайлауҙарының ҡасан үтәсәге шаршамбы, 18 июндә, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ултырышында иғлан ителде. Депутаттар 2014 йылдың 14 сентябрендә ваҡытынан алда Башҡортостан Республикаһы Президенты һайлауҙарын билдәләү тураһында ҡарарҙы хупланы. Шулай итеп, ваҡытынан алда төбәк башлығын һайлауҙар буйынса һайлау кампанияһына рәсми рәүештә старт бирелде. Һайлауҙарҙа ҡатнашыу теләге һәм республика башлығы вазифаһына дәғүә итеүе тураһында Рөстәм Хәмитов рәсми рәүештә белдерҙе.

✓"Берҙәм Рәсәй" 10 июндә республика башлығы вазифаһына артабан тәҡдим итеү өсөн кандидаттар праймеризын үткәрҙе. Һөҙөмтәлә партия өс кандидатты билдәләне: Башҡортостан Президенты вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Рөстәм Хәмитов, Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Рафаэль Мәрҙәншин һәм БР Адвокаттар палатаһы президенты Булат Йомаҙилов. "Берҙәм Рәсәй"ҙең һуңғы кандидатураһы төбәк бүлексәһе конференцияһында 21 июндә раҫланасаҡ. Коммунистарҙан кандидатура 22 июндәге конференцияла раҫланасаҡ. ЛДПР-ҙың төбәк бүлексәһендә ваҡытынан алда төбәк башлығы һайлауҙарында ҡатнашыуҙары тураһында мәғлүмәт әлегә юҡ.

✓Башҡортостан Президенты вазифаһына кандидат республиканың кәмендә 48 муниципаль районындағы һәм ҡала округындағы вәкиллекле органдар депутаттары тарафынан хупланырға тейеш. Тейешле ҡарар шаршамбы, 18 июндә, Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы ултырышында ҡабул ителде.Комиссия Башҡортостан Президенты вазифаһына кандидатты күрһәтеүҙе хуплап, муниципаль берәмектәрҙең вәкиллекле органдарынан 457 депутаттың ҡултамғаһы йыйылырға тейешлеген билдәләне. Шулай уҡ республика муниципаль райондарҙың һәм ҡала округтарының вәкиллекле органдарындағы 57 депутаттың ҡултамғаһы булырға тейеш.

✓Рәсәйҙең элемтә һәм киң коммуникациялар министры урынбаҫары Алексей Волин Өфөлә төбәк телекомпаниялары етәкселәре менән осрашты. Кәңәшмәлә цифрлы тапшырыуҙар селтәренә күсеү шарттарында төбәк телевидениеһының үҫешеүе менән бәйле мәсьәләләр тикшерелде.Билдәләнеүенсә, цифрлы телевидение төҙөү планы буйынса республиканың 60 процент халҡы йыл һуңына тәүге мультиплексты ҡабул итә аласаҡ. 2015 йылдың аҙағына цифрлы телевидениены 90% халҡы ҡабул итәсәк.

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# БАШҠОРТТО КЕМ БӨТӨРӘ? ҮҘЕБЕҘ!

*...Урыҫтарҙың сабый балалары ла*
*Русса белә, русса һөйләшә, -*
*Тиеп аптыраған беҙҙә берәү...*
*(Рәйес Түләк. "Яныу" поэмаһынан).*

**"Киске Өфө" гәзитендә лә, башҡа башҡорт баҫмаларында ла туған тел хаҡында әсенеп яҙылған мәҡәләләр бихисап. Үҙ теленә битараф булмаған авторҙар - минең фекерҙәштәрем. Бигерәк тә "Киске Өфө" һәр һаны һайын тиерлек ошо ғәйәт ҙур проблеманы әүҙем яҡтырта. "Ғәйәт ҙур проблема" тип атауым тиккә түгел, сөнки был - милләтебеҙҙең киләсәген хәл итер мәсьәлә. Бәғзеләр өсөн был, бәлки, үтә мөһим дә түгелдер... Эйе, эйе! Ҡайһы берәүҙәр уны хатта бөтөнләй кәрәкмәгән тема тип иҫәпләй.**



Күптән түгел, яҡын танышымдың ҡыҙын осраттым. Бынамын тигән ике бала үҫтерәләр. Өлкән ҡыҙҙары Рәмилә быйыл уҡырға барырға тейеш.

- Башҡорт мәктәбенә баралыр ул? - тип һорап ҡуйҙым.

Унан: "Әлбиттә!"- тигән яуап ишетеремә шикләнмәгәйнем дә. Сөнки Рәмиләнең саф башҡортса һөйләшеп йөрөгәнен беләм бит инде...

- Юҡ, - тип аптыратты Гөлдәр, - урыҫ синыфына бирергә булдыҡ...

- Яҡындағы мәктәптә башҡорт синыфы юҡмы әллә?

- Бар.

- Һуң?

-Башҡорт синыфы уҡытыусыһын "слабыйыраҡ", тип әйтәләр. Өҫтәүенә, балабыҙ урыҫ телендә беҙҙән матурыраҡ итеп һөйләшһен, тип тә уйланыҡ...

-Бына һин үҙең дә, хәләл ефетең дә башҡорт мәктәбен тамамлағанһығыҙ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, икегеҙ ҙә юғары белемле, яҡшы эштә эшләйһегеҙ...

- Урыҫса һөйләшкәндә беҙҙең акцент беленә бит барыбер... Етмәһә, оҙаҡламай Өфөгә лә күсеп китергә ниәт бар.

- Күсһәгеҙ ни, Өфөлә башҡорт мәктәбе бөткәнме ни?

Яҡынымды үҙемдең фекеремә күндерә алманым барыбер. Ахырҙа уға бына ошо һүҙҙәремде генә еткерә алдым:

- "Киләсәк быуынымда үҙ телендә һөйләшкән бер кеше лә булмаһын!" тигән берҙән-бер ниәт менән генә башҡорт балаһын урыҫ мәктәбенә уҡырға бирергә була...

- Рәмилә башҡортса яҡшы һөйләшә лә баһа... - бирешергә теләмәне Гөлдәр, - етмәһә, урыҫ синыфында ла башҡорт теленән дәрестәр индерелә.

- Бөгөн ул башҡортса һөйләшә, сөнки ул башҡортса уйлай, фекер итә, - тип үҙ һүҙемдән сигенмәй дауам итәм. - Ә иртәгә ул башҡа телдә уйлай башлаясаҡ. Башҡортса уҡыу һәм яҙыу уның өсөн ҡасандыр беҙ аҙнаға бер-ике тапҡыр уҡып, хәҙер бөтөнләйгә онотҡан нимес, йәиһә инглиз теле һымаҡ ҡына булып ҡаласаҡ. Ә инде уларҙың буласаҡ балалары, йәғни һеҙҙең тыуасаҡ ейәндәрегеҙҙең "папа, мама" тип теле асыласағына һәм артабан башҡортса бер һүҙ ҙә белмәйәсәгенә иманым камил. Һуңғы быуындарығыҙ хаҡында әйтеп тә тораһы түгел!..

Ҡәҙерле милләттәштәр, тирә-йүнегеҙҙе яҡшылап байҡағыҙ. Мин килтергән ошо миҫал һәр бер өйҙә, һәр бер ғаиләлә тиерлек! Барлыҡ туғандарығыҙға бағығыҙ. Айырыуса ҡала ерендә йәшәгәндәренә...

Быуаттар буйы башҡорттарҙы һәр ихтилалдарҙан һуң меңәрләп ҡырғандар, ҡыуып алып киткәндәр, граждандар һуғышы осоронда халҡыбыҙҙың яртыһы тигәндәй һуғыштан, аслыҡтан ҡырылып бөткән, тип тарихсылар яр һала. Тарихсылар, әлбиттә, халҡыбыҙҙың аяныслы хәле тураһында һөйләп, башҡаса быға юл ҡуймаҫҡа, тигәнде иҫкәртергә теләй.

Ә хәҙер беҙҙе кем "ҡыра"? Кем беҙгә үҙ телебеҙҙә һөйләшергә, үҙ илебеҙҙә башҡорт булып үрсергә юл ҡуймай? Ҡайһы ҡалала башҡорт мәктәбе юҡ? Башҡорт булыуыбыҙ өсөн кем беҙҙе кәмһетә? Ҡәҙерле милләттәштәр, объектив күҙлектән сығып, ысынбарлыҡҡа тура бағып, бөгөн һүҙҙе үҙебеҙҙе үҙебеҙ юҡ итеүгә йөҙ бороуыбыҙ хаҡында ғына алып барырға мөмкин. Эйе, эйе, үҙ иркебеҙ менән үҙебеҙҙе үҙебеҙ юҡ итеүгә йөҙ борғанбыҙ! Хатта ололар әйткәненә ҡолаҡ та һалмай, бәхәсләшә-бәхәсләшә, киләсәк быуындарыбыҙҙы үҙ теленән, башҡортлоҡтан мәхрүм итергә тырышыусыларҙың ифрат та күплеге хаҡында борсолоуым.

Гөлдәр һылыуға һәм шундай йөҙәрләгән (ә, бәлки, меңәрләгән!) яҡташтарыбыҙға мәрхүм шағир Рәйес Түләктең һүҙҙәре менән яуап бирге килә:

*...Бер һин генә булһаң икән дә бит,*
*Урыҫ һүҙҙәренә табынған.*
*Тик һинеңсә фекер йөрөтөүсе*
*Йөҙәр меңләп башҡорт табылған.*
*Әгәр ҙә һин тик утыҙ йыл әүәл*
*Урыҫ һөйләшенән көнләшһәң,*
*Башҡорттоң бит хәҙер ҡап яртыһы*
*Тик урыҫса ғына һөйләшә...*

Ҡәҙерле милләттәшем! Үҙ телен белмәгән башҡорттоң күбәйә барыуына ғәйеплене ситтән эҙләмә. Улар - һинең яҡын туғандарың, дуҫтарың, үҙең... Уйланайыҡ!

**Зәбих ҠЫУАНДЫҠОВ.**
**Сибай ҡалаһы.**

## БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

**Күптән түгел Мәскәү ҡалаһынан танышым шылтыратты. Хәлдәремде, тормош-көнкүрешемде лә һорашып тормаҫтан: "Илемде һағынам, һине һағынам, һаулығым хөрт, ҡыйын миңә... Адресымды яҙып ал, хат яҙ!" - тип иламһырап зарланырға тотондо. Телефон аша һөйләшеүҙең бик ҡиммәткә төшөүен иҫкәртеп кенә туҡтата алдым уны зарынан...**

# ҺАҒЫНЫУ ХИСЕ НИСЕК БУЛА?

Үәт, бәлә! Кем әйтмешләй, ауыртмаған башҡа тимер таяҡ... Ошо һөйләшеүҙән һуң байтаҡ ваҡыт тыныслана алмай уйланып йөрөнөм. Сәйер хәл бит был. 70 йәште үткәс, "илемде һағынам, һине һағынам, хат яҙ", имеш.

Маһинур менән бер мәктәптә, һуңынан Мәскәүҙә бер уҡыу йортонда белем алдыҡ. Бик сибәр, һәләттәре-таланттары төрлө булған һоҡланып туймаҫлыҡ ҡыҙ ине ул. Тик уҡыуҙы тамамлау алдынан, оҙаҡ та осрашып йөрөмәне, бер Мәскәү егетенә кейәүгә сыға һалды. Уның бар хыялы илебеҙҙең баш ҡалаһында йәшәү булған икән. Һәйбәт кенә йәшәп, ике ир бала үҫтерҙеләр, әле өс ейәнсәре бар. Барыһы ла яҡшы һымаҡ. Тик һағыныу хисе тынғы бирмәй икән уға. Хат яҙ, ти ҙә ул, нимә тип яҙаһың? Ул ғүмерен алыҫта, сит ҡалала үткәрҙе. Аралашыуыбыҙҙың "ҡыҙыл ебе" күптән өҙөлдө. Ҡартайғас ҡына һағыныу хисен тойоу нисек була икән ул?..

Беҙҙе, бер төркөм баланы, Бөрйәндән Өфөләге балалар йортона алып килгәс тә тойҙом мин ул хисте. Ул ваҡытта әле миңә биш йәш тә тулмағайны. Ауылымдың тыптын кистәрен, йондоҙло күген, түп-түңәрәк тулған айын онота алмай йонсоном. Һуңынан илемде, телемде, йырҙарыбыҙҙы, шиғриәтебеҙҙе һөйөү хисе ғүмер юлымды байытты, биҙәне. Ситтә йәшәүҙе күҙ алдыма ла килтерә алмайым. Һағыныу хисен бик һуң тойған, ғүмерҙәрен ситтә үткәргәндәрҙе йәлләйем. Ғүмерең буйы ҡайҙалыр "сит кеше" булып йәшәгәнсе, Тыуған ереңә бөтөн мөмкинлегеңде, һәләтеңде туплап, файҙа килтерергә тырышыуҙан да ҙурыраҡ бәхет юҡтыр...

**Айгөл АХУНОВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Виктор Пчелинцев Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Дәүләт төҙөлөшө, хоҡуҡ тәртибе һәм суд мәсьәләләре буйынса комитеты рәйесе итеп һайланды. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, ағымдағы саҡырылыштың башынан алып Комитетты етәкләгән Зөфәр Еникеев республиканың Конституция суды Рәйесе итеп тәғәйенләнде.

✓Башҡорт дәүләт университеты ғалимдарының ике проекты ғилми эшмәкәрлек өлкәһендә дәүләт заданиеһын тормошҡа ашырыу сиктәрендә РФ Мәғариф һәм фән министрлығы иғлан иткән конкурста еңеү яуланы. "Физика" йүнәлеше буйынса еңеүселәр иҫәбенә профессор Лиана Ковалева етәкселегендәге ғилми коллектив, "Химия" йүнәлеше буйынса грантҡа профессор Әхәт Мостафин етәкселегендәге ғилми коллектив эйә булды.

✓Башҡортостанда 4-5 июлдә "Урал аръяғы-2014" төбәк-ара форум үтәсәк. Форумдың маҡсаты - төбәк-ара иҡтисади бәйләнештәрҙе үҫтереү һәм Урал аръяғы иҡтисадына инвестициялар йәлеп итеү. Бындай тәүге форум республикала 2012 йылдың йәйе уҙҙы.

✓Ҡырымдың Белогорск районында ужым арпаһы сәсеүлектәренең тәүге мең гектарын Башҡортостан механизаторҙары урып йыйған. Ҡырымдарға ярҙамға Башҡортостан 15 "New Holland" комбайны, өс "КамАЗ", шулай уҡ ауыл хужалығы машиналарын техник хеҙмәтләндереү буйынса белгестәр ебәргән. Бынан тыш, белгестәр урындағы халыҡты импорт техникала эшләргә өйрәтә.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов Рәсәй Федерацияһының элемтә һәм киң коммуникациялар министры урынбаҫары Алексей Волин менән осрашты. Һөйләшеү барышында республикала телерадиотапшырыуҙарҙы һәм баҫма мәғлүмәт сараларын үҫтереү мөмкинлектәре, почта элемтәһе эшмәкәрлеге мәсьәләләре тикшерелде. Рөстәм Зәки улы урындағы, айырыуса милли телдәрҙә тапшырыуҙар әҙерләгән телеканалдарҙы һаҡлап ҡалыу кәрәклеген билдәләне.

✓Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә "Йәштәр тауышы" серияһы китаптары донъя күрҙе. Шиғри йыйынтыҡта биш йәш авторҙың ижады тәҡдим ителә. Ул Зимфира Абушахманова, Айгөл Айытҡолова, Гөлнур Ҡыуатова, Оксана Кузьмина, Альбина Хәлиуллина.

**"Башинформ"дан.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

**Өфө ҡала округы Советының сираттағы сессияһынан һуң, депутаттарыбыҙ халыҡ фекеренә ысынлап та ҡолаҡ һала, уларҙы тыңлай, тигән фекергә киленде әле. Ә беҙ берәй нәмә булһа, депутаттар эшләмәй, тип яу һалабыҙ.**

# БЕР АҘЫМ АЛҒА БАҪАМ ДА...

Мәҫәлән, былтыр декабрҙә улар "Башҡортостан Республикаһының Өфө ҡалаһы ҡала округы территорияһында алкоголь продукцияһын ваҡлап һатыу рөхсәт ителмәгән ойошмалар һәм (йәки) объекттарҙан яҡындағы сауҙа территорияһына тиклемгә араны иҫәпләү ысулын билдәләү тураһында" ҡарар ҡабул иткәйне. Уға ярашлы, белем биреү учреждениелары, медицина ойошмалары йәки башҡа объекттарҙан алкоголь һатыусы сауҙа предприятиелары 50 метр алыҫлыҡта булырға тейеш ине.

Был ҡарар йәмәғәтселектә ике төрлө ҡараш тыуҙыра. Берәүҙәр уны хуплаһа, икенселәр, бигерәк тә эшҡыуарлыҡ өлкәһендә эшләүселәр, ҡырҡа ҡаршы сыға. Улар хатта был ҡарарҙы саманан тыш ҡәтғи тип баһалай. Әлбиттә, сауҙа өлкәһендә эшләүселәрҙе лә аңларға була: нигеҙҙә, тауар әйләнеше алкоголь һәм тәмәке һатыуҙан барлыҡҡа килә. Ә инде быңдай тыйыуҙарҙан һуң, атап үтелгән объекттарға, ойошмаларға яҡында урынлашҡан сауҙа нөктәләрендә килем ҡырҡа кәмей. Килем булмаған, сауҙа нөктәһен тотоу ҙа уңайлы түгел. Был иһә ҡала Советы өсөн дә кире һөҙөмтә бирә: эшҡыуарҙар килем алмаған, уларҙың һаны кәмей һәм һалым килеме туҡтай. Бөгөн ҡаланың үҫеше бары тик эре йәки ваҡ инвесторҙар күҙенә ҡарап торғанда, быңдай боролош урынлы түгел дә кеүек.

Нисек уйлағандарҙыр, ниндәй һығымталар яһағандарҙыр - уныһы беҙгә ҡараңғы, әммә ҡала хакимиәте сикләү сараларын йомшартыу тураһында ҡарар проекты әҙерләй. Депутаттар корпусына сығарырҙан алда был документ прокуратурала тикшереү үтә. Хоҡуҡ органы тәҡдим ителгән үҙгәрештәрҙең тулыһынса ҡануниәтҡә тап килеүен таный. Һөҙөмтәлә хәҙер алкоголь һатҡан магазиндар һәм йәмәғәт туҡланыуы урындары кеше күп йөрөгән медицина ойошмалары, мәғариф учреждениелары, спорт объекттарынан, ваҡлап һәм күмәртәләп сауҙа итеү баҙарҙарынан, вокзалдарҙан, аэропорттан 25 метр алыҫлыҡта булырға тейеш.

Шунан һуң, депутаттар халыҡ фекеренә ҡолаҡ һалмай, тип әйтеп ҡара инде... Улар, шағир әйтмешләй, бер аҙым алға баҫа ла, артҡа әйләнеп, халыҡҡа күҙ һала. Ләкин халыҡ категорияһына был осраҡта ни өсөндөр эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүсе төркөм генә ингән һәм бары тик уларҙың ғына мәнфәғәте яҡланған кеүек...

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

*ҮӘТ БИТ ӘЙ!*

# ИНГЛИЗ ТЕЛЕН...

## лагерҙа йөрөп өйрәнәләр



**АҠШ-тың Мәскәү ҡалаһындағы илселегенең инглиз теле бүлеге, АҠШ-тың Екатеринбург ҡалаһындағы генераль консуллығы, БР Мәғариф министрлығы, Өфө ҡала округы хакимиәте һәм Совет районының мәғариф бүлеге ярҙамында Америка-башҡорт интерколледжы әҙерләгән "ACCESS/ДОСТУП" халыҡ-ара гуманитар белем биреү программаһы баш ҡалабыҙ Өфөлә сираттағы йәйге лагерын асты. Тантана мәлендә уҡыусыларҙы Америка Советтарының (АҠШ) Рәсәй Федерацияһындағы вәкиле Кори Глисон, Америка-башҡорт интерколледжы директоры Вячеслав Швайко сәләмләне. Сара һуңынан уҡыусылар төрлө тренингтарға таралғас, йәйге лагерь һәм Америка-башҡорт интерколледжы тураһында тулыраҡ мәғлүмәт алыу ниәтендә Вячеслав Дмитриевич Швайко менән әңгәмәләштек:**

- Америка-башҡорт интерколледжы дәүләт ойошмаһы түгел, шуға ла ул булдырған бөтә белем биреү программалары түләүле. Матди яҡтан мөмкинлектәре сикләнгән балаларға ла инглиз телен өйрәнергә юл асыу ниәтендә бағыусыларыбыҙға мөрәжәғәт итеп, "ACCESS/ДОСТУП" халыҡ-ара гуманитар белем биреү программаһы буйынса 10 йыл элек эш башлағайныҡ. Проект сиктәрендә мәктәп уҡыусылары махсус әҙерләнгән уҡытыу-белем биреү модулдәре нигеҙендә ике йыл дауамында инглиз телен бушлай өйрәнә, был телдә һөйләшкән халыҡтарҙың, илдәрҙең мәҙәниәте менән таныша, йәй осоронда халыҡ-ара профилле тел лагерында ял итә, - тип һөйләй башланы Вячеслав Дмитриевич. - Ул программа буйынса, тәү сиратта, матди яҡтан аҙ тәьмин ителгән ғаиләлә тәрбиәләнеүсе йәки етем балалар ҡабул ителә. Оло тормош юлына аяҡ баҫып та өлгөрмәстән шундай ауыр шарттарға яраҡлашырға, донъя ҡыйынлыҡтарын ҵаллы ярырға өйрәнергә мәжбүр булыусы 14-17 йәшлек үсмерҙәр, бәлки, киләсәктә инглиз теле ярҙамында үҙ юлдарын таба алыр. Аҙнаһына ике тапҡыр төрлө тренингтарға, йәйге лагерға йөрөп, уҡытыу курсын тулыһынса үтеүселәргә АҠШ-тың Мәскәү ҡалаһындағы Дәүләт департаменты илсеһе ҡултамғаһы ҡуйылған сертификат тапшырыла.

Быйыл лагерҙа Өфө ҡалаһының төрлө белем усаҡтарынан ҡырҡҡа яҡын үсмер шөғөлләнә. Улар дәрестәрҙән тыш, уйын, спорт, мәғлүмәт технологиялары-интернет, драма, йыр, бейеү түңәрәктәрендә үҙебеҙҙең һәм сит ил инструкторҙары, вожатыйҙары менән инглиз телендә аралашып, һөйләү телмәрен шымарта. Иң мөһиме - балалар ҡәҙимгә дәрестәге кеүек китаптан дәфтәргә төрлө күнегеүҙәрҙе күсереп эшләп кенә ултырмай, ә үҙенә ҡыҙыҡлы шөғөл менән булыша. Мәҫәлән, беҙҙең "ACCESS/ДОСТУП" халыҡ-ара гуманитар белем биреү программаһына йөрөүселәрҙең күбеһе индеецтарҙың "Төш тотоусы" тип аталған әйберен эшләргә ярата. "Төш тотоусы"ны эшләгән сакта ҡулланылған кәрәк-яраҡтар, бөтә эш барышы, инструкция инглиз телендә бирелә. Тимәк, үсмерҙәр инглиз телендә аралаша, яңы һөнәр үҙләштерә. Быйыл беҙҙә сәғәт иртәнге туғыҙҙан алып өскә тиклем "Йондоҙҙар фабрикаһы", "Брейк-данс, уйындар, спорт", "Лагерь кино-клубы", "Инглиз драмаһы", "Интернет һәм АЙ-ТИ технологиялар", "Ҡул эштәре һәм сәнғәт һөнәрҙәре" тип аталған тренингтар ойоштороласаҡ. Уның араһында иртәнге зарядка, лидерлыҡ мәктәбе дәрестәре, тематик көндәр үтәсәк. Әйтергә кәрәк, тәүге тапҡыр Башҡортостан Республикаһының Ф.Мостафина исемендәге 20-се башҡорт гимназияһы нигеҙендә һынау осорон үткән "ACCESS/ДОСТУП" халыҡ-ара гуманитар белем биреү программаһы бик уңышлы проект булып сыҡты, әлеге көндә был система буйынса Рәсәйҙең егермегә яҡын төбәгендә уҡытыу эштәре алып барыла. Ҡыҙғанысҡа күрә, программаның быңдай билдәлелек яулауы бағыусыларҙың эшен ауырлаштыра. Уларға проект тормошҡа ашырылған һәр төбәктә уҡыу әсбаптары, бигерәк тә Американан инструкторҙар менән тәьмин итеүе ҡыйынлаша. Шуға күрә, үҙ сиратыбыҙҙа беҙгә лә программа сиктәрендә уҡырға теләүсе уҡыусылар һанын сикләргә тура килә. Мәҫәлән, тәүге йылдарҙа йөҙҙән ашыу үсмер уҡый алһа, хәҙер ҡатнашыусылар һанын ҡырҡтан арттырмаҫҡа тырышабыҙ. Әммә шуныһы ҡыуаныслы, донъя кимәлендә ниндәй генә сәйәси ваҡиғалар күҙәтелеүгә ҡарамаҫтан, АҠШ менән бәйләнеш нығынғандан-нығына бара. Быйыл Башҡортостан Республикаһының Салауат ҡалаһында ла Америка-башҡорт интерколледжы нигеҙендә ошондай "ACCESS/ДОСТУП" халыҡ-ара гуманитар белем биреү программаһы үҙ эшен башланы. Тимәк, республиканың тағы бер төбәгендәге һәләтле балалар үҙ мөмкинлектәрен ҡуллана, иле һәм халҡы өсөн кәрәкле белгестәр булып үҫеп етә аласаҡ, тигән һүҙ был.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Сит телде тәрәндән өйрәнеү өсөн мәктәп программаһында ҡаралған ваҡыт, әлбиттә, етмәй. Хәллерәктәр балаларының белемен уҡытыусы яллап, өҫтәмә дәрестәр алып, аҡса түләп камиллаштырта. Төрлө сәбәптәр арҡаһында ундай мөмкинлектәре булмаған үсмерҙәр өсөн ошондай дәүләт программаһы эшләүенең әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. "ACCESS/ДОСТУП" халыҡ-ара гуманитар белем биреү программаһы юғары кимәлдәге белгестәр әҙерләүҙең тәүге баҫҡысы булараҡ, сит илдәге коллегалары менән тәжрибә уртаҡлашыу, фекер алышыу, уҡыусыларға иң алдынғы уҡытыу алымдары ярҙамында белем биреү йәһәтенән уҡытыусыларға ла ҙур ярҙам күрһәтә.**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Рәсәй Федерацияһының элемтә һәм киң коммуникациялар министры урынбаҫары Алексей Волин менән осрашыуҙа Р. З. Хәмитов ауыл ерендә бөтә почта бүлексәләрен һаҡлап ҡалыу зарурлығын да билдәләне. Бөгөн ауыл халҡы өсөн йәмәғәт тормошонон үҙәге булып торған почта бүлексәләренең иҫәбен кәметеүгә юл ҡуймаҫҡа кәрәк, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды ул. Алексей Волин билдәләүенсә, Башҡортостанда почта бүлексәләренең һаны ҡыҫҡармаясаҡ, улар эштәрен дауам итәсәк. Әле Рәсәй Почтаһы хеҙмәткәрҙәренең, оҙаҡ ваҡыт бик түбән булған эш хаҡын әкренләп арттырыу тураһында ҡарар ҡабул ителде. Хәҙер Рәсәй Почтаһы хеҙмәткәрҙәренә яҡынса 20-30 процентҡа эш хаҡын күтәргәндәр.

✓2014 йылдың 1 июленән алып 2015 йылдың 30 июненә тиклем газға яңы хаҡтар билдәләнә. Счетчик булған осраҡта газ плитәләрендә бешереү һәм һыу йылытыу өсөн тотонолған газдың бер кубометры 4 һум 72 тин тораsаҡ, иҫәпләү ҡоролмаһыҙ - 6 һум 71 тин. Йылытыуға, бер үк ваҡытта газды башҡа маҡсаттарға ҡулланыу өсөн газға счетчиктар булған осраҡта 4 һум 72 тин, иҫәпләү ҡоролмаһы булмағанда 3 һум 40 тин түләргә кәрәк буласаҡ.

✓21 июндә Мәскәүҙең "Коломенское" дәүләт музей-курсаулығында дөйөм ҡала һабантуйы уҙасаҡ. Рәсәй баш ҡалаһының был хозур тәбиғәтле урынында байрам дүртенсе тапҡыр уҙасаҡ. Байрамда Өфөнән Башҡорт дәүләт филармонияһы директоры Фәүзи Сафин етәкселегендәге ижади төркөм, шулай уҡ Стәрлетамаҡ театр-концерт берекмәһенең билдәле Бейеү театры ҡатнаша. Башҡортостандан һабан байрамын Әбйәлил районы тирмәләре, милли йыһаздары менән башҡорт ихатаһы биҙәйәсәк.

✓Башҡортостанда математика буйынса йөҙәр балды тик ике сығарылыш уҡыусыһы ғына йыйған. Икенсе мотлаҡ предмет буйынса 22532 кешенең 1191-е (5,3 проценты) тесты насар яҙған. Былтыр ундайҙар 5,8 процент ине. 285 кеше 80 һәм унан да күберәк балл йыйған. Быйыл да иң түбәнге сик 20 балға тиклем кәметелгән.

✓Ленин майҙанында циферблат рәүешендәге фонтан 2015 йылдың ғинуарында төҙөләсәк. Генераль төҙөүсене билдәләүгә конкурс документтары дәүләт һатып алыуҙары сайтында баҫылған. Төҙөлөш майҙаны яҡынса - 338 м². Башҡарыусылар фонтандың биш йыл дауамында эшләүен гарантияларға тейеш. Аукцион 2014 йылдың 14 июлендә үтәсәк, эштәрҙе 2015 йылдың 31 ғинуарына тиклем тамамларға планлаштыралар.

БАЛАЛАР ҠОРО

**Диңгеҙҙәрҙә дөрөҫ курс алған караптар ҙа, ары һуғылып, бире һуғылып йөрөүсе кәмәләр ҙә, яр ситенән ҡуҙғалып китә алмай тороп ҡалған фрегаттар ҙа бар. Төрлө кешеләрҙең яҙмышы бәйләнгән уларға. Тормош диңгеҙендә лә үҙ урынын тапкан бәхетлеләр алған курстары буйлап туп-тура елдерә, ваҡытында нишләргә белмәй тороп ҡалғандар һаман да тулҡындар араһында аҙашып йөрөй, ә ҡыйыуһыҙҙар, ниндәй генә яҡшы карап эйәләре булһалар ҙа, яр ситендә сайкала. Ошо көндәрҙә мәктәпкә әйҙәүсе ҡыңғырау сыңы менән хушлашыусы сығарылыш уҡыусыларының өр-яңы караптарға ултырып, сикһеҙ тормош диңгеҙе киңлектәренә үҙаллы сығып китерҙәренән алда, капитанлыҡ курстары үткәргән уҡыу йорттары тураһында тулыраҡ мәғлүмәт алыу ниәтендә Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусылары Аяҙ Мәхмүтов, Илиза Йомашева, Алина Ғәлиева, Искәндәр Миңлейәров, Лилиә Ишмуллина менән әңгәмәләштек.**

# РӘМИ ҒАРИПОВ РУХЫ...

## капитандар тәрбиәләй



**➔ Республиканың иң абруйлы белем усағында уҡыуығыҙ менән үҙегеҙҙе ифрат ғорур, бәхетле тояһығыҙҙыр?**

**Алина:** Р.Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына уҡырға инә алыуыма һаман да ышанып етмәйем. Сөнки бында белем алыу минең бала саҡ хыялым ине. Тәүге уҡыу көнөндә үҙемде сәйерерәк тойҙом. Бөтәһе лә бер-береһен таный, иҫәнләшә, мин генә ситтә аптырап ҡарап торам кеүек. Танышып алғас, минең кеүек гимназияға яңы ғына килгән Лилиә менән бер-беребеҙҙән айырылмаҫҡа тип һүҙ ҙә ҡуйышҡайныҡ хатта. Ысынында, дуҫтар табыуы, бындағы шарттарға яраҡлашыуы бер ҙә ҡыйын булманы.

**Лилиә:** Баймаҡта уҡығанда бер нисә синыфташым ошо гимназияға уҡырға күскәйне. Каникулға ҡайтҡандарында һорашһаң, иртәнсәк иртә менән тороп, күмәкләп физик күнекмәләр эшләйбеҙ, көнө буйы уҡыйбыҙ, дәрестәр әҙерләйбеҙ, талап бик юғары, тип һөйләй инеләр. Ата-әсәйем, ҡурҡыуымды еңеп, уҡырға барырға күндерҙе. Ысынлап та, ҡурҡыуым бушҡа булған, синыфташтар менән тиҙ генә танышып, яҡындан аралашып киттек.

**Аяҙ:** Мин гимназияла һигеҙенсе синыфтан алып уҡыйым. Белем алыуы ауыр, тиһәләр ҙә, юғары талаптарға яуап бирергә өйрәнергә мөмкин. Етмәһә, бында беҙгә ваҡытты дөрөҫ бүлергә өйрәтәләр, уҡыусылар, һәләттәренә ҡарап, төрлө йүнәлештә үҙҙәрен үҫтерә ала.

**Илиза:** Гимназиябыҙ бер дәүләт кеүек. Үҙебеҙҙең президентыбыҙ, министрҙарыбыҙ бар. Әйткәндәй, Аяҙ быйылға тиклем президент, Алина мәҙәниәт министры булды.

**➔ Кешене мөхит тәрбиәләй, тиҙәр. Һеҙгә гимназия-интернат тормошо йоғонто яһанымы?**

**Алина:** Эйе, беҙ үҙебеҙ ҙә бәләкәй булһаҡ та, балалар менән эшләргә өйрәндек. Президент булғас, Аяҙ етдиләнде, бөтөн нәмәгә яуаплы ҡарай башланы. Хатта ниндәйҙер мәсьәләне хәл иткәндә ҡаты ғына итеп: "Шулай эшләйбеҙ", - тип ҡырт киҫеп тә ҡуя ул хәҙер.

**Искәндәр:** Әлбиттә, мөхит тәрбиәләй. Мин туғыҙынсы синыфҡа тиклем рус мәктәбендә уҡығас, башҡортса белмәй инем. Ике йыл эсендә туған телемде бөтә нескәлектәрен өйрәндем. Уҡытыусыларыбыҙ беҙҙең күңелдәргә рух орлоҡтары сәсергә тырыша, уларҙың шытым биреүен дә үҙ күҙәтеүе аҫтында тота. Бында һәр уҡыусының күңелендә халыҡ шағиры Рәми Ғарипов рухы, аңында "Туған тел" шиғыры яңғырай.

**Илиза:** Беҙ Башҡортостандың төрлө төбәктәренән йыйылғанбыҙ, баштараҡ төрлө диалект һөйләштәренә аптырап, иптәштәремдең нимә һөйләгәнен аңламайыраҡ та ултырған саҡтар булды. Бер ҡыҙҙың "әләс" тиеүе ихтирамһыҙлыҡ булып тойолдо. "Әтәс" тип әйткән кеүек яңғырай бит, тип уйлағайным. Хәҙер үҙем дә "нәнәй" тиер урынға "әләс" тип ысҡындырам.

**Лилиә:** Ауыл мәктәбендә кем матур итеп шиғыр һөйләй, кем телгә оҫта - шул балаларҙы ғына төрлө сараларҙа ҡатнаштырырға тырышалар. Бында, киреһенсә, кем оялсан, үҙ-үҙенә ышанып етмәй, сәхнәгә сығырға тартына - шуларҙы йәлеп итәләр. "Таңсулпан" драма түңәрәгенә, "Аҡйондоҙ" бейеү ансамбленә, спорт һәм башҡа түңәрәктәргә ихлас йөрөйбөҙ, "Интернатым - пар ҡанатым" гәзитенә әүҙем яҙышабыҙ. Һәләттәрендә үҫтереү менән бергә, ҡыйыулыҡ, үҙ-үҙенә ышаныс, үҙаллылыҡ сифаттары ла тәрбиәләнә был гимназияла.

**Илиза:** Мин Бишбүләк районынанмын. Ауылда уҡығанда, бәләкәй булғанғамы икән, туған ил, туған тел, илһөйәрлек, башҡортлоҡ тураһында уйланғаным булмаған. Гимназияла уҡый башлағас, милләттәштәренә ҡарата һөйөү, ихтирам, иленден киләсәгенә хеҙмәт итеү, файҙа килтереү тигән төшөнсәләр барлығын белдем. Өлгәшкән уңыштарыбыҙ өсөн быйыл Алина менән икебеҙгә Рәми Ғарипов исемендәге премия бирелде. Ул инебеҙгә тағы ла күберәк яуаплылыҡ һалды, тип уйлайым.

**➔ Һеҙ сығарылыш синыф уҡыусылары бит инде, БДИ тураһында һорау бирмәй мөмкин түгел. Ҡатмарлашҡан шарттарға ҡарашығыҙ ниндәй?**

**Аяҙ:** Мин БДИ һынауҙары шулай етди, ҡаты формала үтергә тейеш булыуы менән килешәм. Сөнки бынан алдағы йылдарҙа сосораҡ уҡыусыларҙың төрлө юлын табып, имтихандарҙы юғары балға тапшырыуға өлгәшеүе тураһында ишетеп беләбеҙ. Быйыл иһә шарттар ҡаты: ишек төбөнән үк тикшереп индерәләр, бүлмәлә видеокамера ҡуйылған, күҙәтеүселәр йөрөй. Тимәк, уҡыусылар алған белемдәренә генә таянып һынау тотасаҡ.

(Дауамы 6-сы биттә).

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ҺӘЛӘТТӘРЕҢ БАРМЫ?

## Өҫтәмә балл!

**2015 йылдан алып уҡыусылар мәктәпте тамамлап сығыуға үҙҙәренең портфолиоһын әҙерләргә тейеш буласаҡ. Ә нимәне аңлата һуң был төшөнсә?**

Портфолио - ул уҡыусының шәхси ҡаҙаныштарын теркәү, туплау һәм баһалау ысулы. Унда, мәҫәлән, баланың уҡыу ваҡытынан тыш, сараларҙа яулаған һәм уның һәләттәрен раҫлаусы дипломдары, маҡтау ҡағыҙҙары, сертификаттары һәм башҡа шундай документтары туплана. Атап әйткәндә, уҡыусының спорттағы, ижад өлкәһендәге, социаль һәм аралашыу һәләттәре иҫәпкә алынасаҡ. РФ Мәғариф министрлығында "Уҡыуҙағы ҙур уңыштары өсөн" миҙалы һәм ГТО билдәләре мәғлүмәттәрен дә портфолиоға индереү мәсьәләһе ҡарала.

Мәктәпте тамамлаусы үҙенең ҡаҙаныштарына ярашлы балдар туплай һәм ул БДИ һөҙөмтәләренә өҫтәлә. Дөрөҫ, әлегә портфолио өсөн нормативтар һәм уларҙы иҫәпләү тәртибе эшләнмәгән, улар, әйтелеүенсә, 2015 йылдан һуң ғына индереләсәк.

# МАТУР КЕЙЕНЕҮГӘ...

## тыйыу юҡ

**РФ Президенты Владимир Путин "Мәғариф тураһында" федераль законға үҙгәрештәр индереүсе законға ҡул ҡуйҙы. Уның буйынса, хәҙер уҡыусылар өсөн форма мәсьәләһе - һәр мәктәптең үҙ ҡарамағында.**

Дөрөҫөрәге, балаларҙың мәктәпкә нисек кейенеп килергә тейешлеген уҡыусылар үҙҙәре, уларҙың ата-әсәләре һәм уҡытыусылар хәл итәсәк. Ләкин был һис тә йыртыҡ джинсыларҙа йәки яулыҡ ябынып килергә мөмкин тигәнде аңлатмай, әлбиттә. Закон буйынса, уҡыусыларҙың кейеме зауыҡлы һәм унайлы булырға тейеш. Ә инде балаларҙың тышҡы ҡиәфәтенә тағы ла аныҡыраҡ талаптарҙы төбәк властары хәл итер. Әйткәндәй, күп балалы ғаиләләргә һәм ташламалар менән файҙаланыусы башҡа уҡыусыларға мәктәп кейеме бушлай, урындағы бюджет иҫәбенә биреләсәк.

Әлеге закон мәктәптәр менән балалар кейеме етештереүселәр араһындағы күптәнге низағҡа нөктә ҡуясаҡ. Һуңғыларына, әлбиттә, бер иш кейем тегеп ултырыу отошлораҡ ине лә... Хәҙер фабрикаларға эштәрен уҡыусылар һәм уларҙың ата-әсәләре заңғына яраҡлаштырып ҡорорға тура киләсәк.

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ревматизм

❖ Арыҫлан ҡойроғо үләне, ҡайын япрағы, туғай яраны (герань луговая), каштан сәскәһе (конский каштан), татлы тамыр (солодка), гөлйемеш емеше, аҡ тал ҡайырыһы, һары мәтрүшкә, мәтрүшкә - тигеҙ өлөштә. 8 грамм үләнгә 300 мл һалҡын һыу ҡойорға, 4 сәғәт төнәткәндән һуң ҡайнау хәленә еткерергә, 1 сәғәт йыйы урында төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1/4-1/3 стакан эсергә.

❖ Ынйы сәскәһе, ҡыр кесерткәне, йүкә сәскәһе, аир үләне тамыры, арса (вереск) үләне, һары мәтрүшкә, ҡарағай бөрөһө, ҡыҙыл көртмәле япрағы, шайтан таяғы (татарник) сәскәһе, эт дегәнәге үләне, рауза сәскәһе таждары, ҡырҡбыуын - тигеҙ өлөштә. 6 грамм үләнгә 250 мл ҡайнар һыу ҡойорға, термоста 4 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1/4 стакан эсергә. Ауырыуҙың киҫкен мәле үтеп киткәс, кәмерәк составлы төнәтмәләргә күсергә.

❖ Арыҫлан ҡойроғо үләне, ҡыр кесерткәне, аҡ сәскә, эт дегәнәге - тигеҙ өлөштә. 6 грамм үләнгә 250 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 4 сәғәт термоста төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1/4 стакан эсергә.

❖ Энәлек емеше, еркәүек (лабазник), һары мәтрүшкә, мәтрүшкә - тигеҙ өлөштә. 8 грамм үләнгә 250 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 3 минут ҡайнатырға, термоста 2 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр ашар алдынан 1/4-1/3 стакан эсергә.

❖ Ҡыр кесерткәне, вахта үләне япрағы, айыу ҡурайы, гөлйемеш емеше - тигеҙ өлөштә. 8 грамм үләнгә 300 мл һыуыҡ һыу ҡойоп, 4 сәғәт төнәтергә, ҡайнау хәленә еткерергә, 1 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1/4-1/3 стакан эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ ҡурай еләге емешенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм йоҡлар алдынан эҫе килеш эсергә. 2 ҡалаҡ ваҡланған ҡара ҡарағат япрағына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1-2 сәғәт төнәтеп, көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсеү ҙә файҙалы.

Айбикә ЯҠУПОВА.

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ҠУНАҠСЫЛЛЫҠ

**Ҡайһы бер осраҡтарҙа ир-ат табынына ҡатын-ҡыҙҙар ҙа ултырған. Ул оло йәштәге аҡыллы ил инәһе йәки үҙенең ҡыйыулығы менән дан алған батыр ҡыҙ булған. Шулай уҡ саҡырып, көтөп алған ҡунаҡтарҙың абруйы ҙур булған. Ҡунаҡтар күстәнәс менән килгән, ғөмүмән, башҡорттарҙа күстәнәс алышыу үҙе бер матур йола иҫәпләнгән, ул сәләмәтлек килтерә, тип иҫәпләгәндәр.**

Ҡунаҡ ҡабул итеү йолаһы күп кенә фольклор әҫәрҙәрҙә сағылыш тапҡан. Мәҫәлән, "Ҡара юрға" эпосында шулай тип әйтелә:

*Ҡушлаҡ батыр сәләм бирер,*
*Ҡунағына урын бирер,*
*Алдына һый-хөрмәт ҡуйыр,*
*Табаҡ-табаҡ ҡурҙаҡ ҡуйыр,*
*Күнәк-күнәк айран бирер,*
*Ҡунаҡ итер, хөрмәт итер,*
*Ҡунаҡтың йомошон көтөр...*

Башҡорттар алкоголле эсемлектәр ҡулланмаған, табындарҙа буҙа һәм ҡымыҙ эскәндәр. Ҙурыраҡ байрамдарҙа ҡымыҙҙы ағас һауыттарға көрәгәсе ҡойоп торған, уның ярҙамсыһы - аяҡсы ҡунаҡтарҙы һыйлаған. "Тамсы булып һибелһен, үгеҙ булып һимерһен!" - тип, һауыттың төбөндә ҡалған бер нисә тамсы ҡымыҙҙы ергә һипкәндәр һәм хужаның йортона именлек теләгәндәр.

Ит, бишбармаҡ ашағандан һуң табын ахырында ҡунаҡтарға сәй бирелгән. Ҡайһы бер көньяҡ-көнбайыш һәм үҙәк райондарҙа ҡунаҡтарға иң тәүҙә итле бәлеш тәҡдим иткәндәр. Көньяҡ, көньяҡ-көнсығыш район халҡындағы кеүек, итте өлөштәргә бүлеү йолаһы булған. Һуңғараҡ ит менән бергә картуф, һуған, кишер, кәбеҫтә бирә башлағандар. Ит бешкән һурпаға һалма һалғандар. Һалма ни тиклем нәҙегерәк ҡырҡылһа, хужабикә шул тиклем уңған иҫәпләнгән.

Ҡунаҡ күрһәтеү йолаһы ла киң таралған. Үҙенә килгән ҡунағын ауылдаштарына, туғандарына күрһәтеү өсөн махсус табын йыйылған, унан һуң ҡунаҡты башҡалар ҙа саҡырып алған. XIX быуатта - XX быуат башында ҡунаҡсыллыҡ йолаһының мотлаҡ элементы булып мунса торған.

Ҡунаҡтың күңелен өс көн буйына күргәндәр. "Ҡунаҡ ҡәҙере өс көн, дүртенсеһе - үҙ башына", "Ҡунаҡ өс көн ҡунаҡ, дүртенсеһенә - муйнаҡ" тип шаяртҡандар. Ҡунаҡты оҙатырға йорт эсендәге бар кеше лә сыҡҡан. "Иҫәнлектә-һаулыҡта осрашайыҡ!", "Юлғыҙ уңышлы булһын!" тигән теләктәр теләнгән. Ҡунаҡтарға күстәнәс һалғандар, ҡунаҡтан ҡалған һый менән бала-сağа һыйланған. Башҡорт көнкүрешен өйрәнеүсе Д. П. Никольский билдәләүенсә: "Хужа кеше үҙе бер нәмәһеҙ ҡалһа-ҡала, әммә ҡунағын буш ҡул менән оҙатмай". Айырыуса ҡәҙерле ҡунаҡты ауылды йәки йәйләү урынынан сыҡҡансы оҙатып барғандар. Ҡунаҡ ашы - ҡара-ҡаршы, тип, ҡунаҡтар хужаларҙы үҙҙәренә саҡырып ҡайтҡан.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА

# ТӘНӘЙҘӘРГӘ ТӘҒӘЙЕН ТӘРБИӘ

## Ун һигеҙенсе һабаҡ: "Туғанлыҡ тойғоһо"



**Ғаиләлә балалар берәүҙән күберәк булһа, улар араһында туғанлыҡ тойғоһо тәрбиәләү, был изге тойғоно юғалттыртмау хәстәрлеге килеп тыуа. Ә был тойғоно баланың зиһененә сабый саҡта уҡ һала башлау мотлаҡ. Сөнки бер үк ғаиләлә, бер үк тәрбиә алған балалар ҙа үҫә килә төрлө холҡло булып китә.**

"Урал батыр" эпосында әйтелгәнсә, кешенең холҡо ҡанына һалына һәм уны тота килеп кенә үҙгәртеп ебәреп булмай, ә зиһененә тейешле фекер һалынып ҡуйыла икән, ул барыбер ҡалҡып сыға һәм кеше үҙтәрбиә йәшенә еткәс, файҙаланыла. Уйланған саҡта: "Әсәйемме, атайыммы, йәки олатай-өләсәйме, башҡа өлкән кешеме, шулай тип әйткәйне бит!" - тип, ҡасандыр әйтелгән аҡыллы, әммә әллә ни иғтибар ителмәгән һүҙҙәр ҡапыл зиһенен яҡтыртып ебәрә. Шуның өсөн балаң иғтибарһыҙ тыңлаймы, битарафмы - ҡиммәтле, һиммәтле, аҡыллы фекерҙәренде әйтә барыу хәйерле.

Ә бала үҙ төҫө-ҡиәфәте менән генә түгел, үҙ холҡо менән дә тыуа. Уның булмышын ҡырҡа үҙгәртеп булмай, фәҡәт үҙ ҡалыбында ғына төҙәтмәләр индереп ебәрергә мөмкин. Шуның өсөн ғаиләләге балаларҙың да үҙ-ара мөнәсәбәттәре төрлө була.

Халыҡтың тәрбиә ҡанундарында бының барыһы ла иҫәпкә алынған һәм ижадында, бигерәк тә мәҡәлдәрҙә һаҡлана.

Йән тартмаһа, ҡан тарта. Һин туғаның менән уртаҡ телле, уртаҡ ҡарашлы түгелһең икән, һөйләшер һүҙең, уртаҡлашыр уй-хыялдарың юҡ икән, әлбиттә, йәнең тартылып тормаҫ. Әммә барыбер иң ауыр саҡтарҙа туғаныңдың булыуы яҡшы. Башҡаларға ситен тойолған ҡайғы-хәсрәтеңде фәҡәт үҙ туғаның менән генә уртаҡлаша аласаҡһың. Шуға ла араларҙы бер ваҡытта ла һыуытмаҫҡа, араға һалҡынлыҡ индермәҫкә кәрәк. Уның өсөн атай-әсәй, бигерәк тә әсәй бала бәләкәй ваҡытта уҡ аҡыллы фекерҙәрен бала зиһененә һала бара. Улар тубығына ултыртып, ҡуйынына алып яратҡан саҡта уҡ боронғоларҙан ҡалған матур-матур сағыштырыуҙар менән иркәләргә тейеш балаларын. "Биш бармағым кеүек бит һеҙ, ҡулдарымдағы бармаҡтарым кеүек бит һеҙ". "Өс таған кеүек өсөгөҙ бер-берегеҙгә терәк кенә булып үҫегеҙ". "Бер тамырҙан шытып сыҡҡан үҫентеләр кеүек бит һеҙ". "Бейә еленендәге имсәктәй ике генә бөртөк бит һеҙ". "Үҫкән саҡта бер тамырҙан шытҡан гөл кеүекһегеҙ ҙә, үҫеп еткәс, ҡош балалары кеүек таралышып китерһегеҙ. Шул саҡта, аҙаҡ аҡыл ултырғас, иҫегеҙгә төшөп, Саҡ менән Суҡ кеүек бер-берегеҙҙе күргегеҙ килһә лә яҡыная алмай зарығышып йөрөрлөк булмаһын", тип риүәйәт тә һөйләп, балаларҙың үҙ-ара татыулығын юғалтмау сараһын күрергә кәрәк. "Аҙаҡ иҫегеҙгә төшөр, һуң булыр, шуның өсөн баштан уҡ үҙ-ара мөнәсәбәттәрегеҙҙе көйләй барығыҙ. Олоно - оло, кесене - кесе итә белегеҙ. Берегеҙ ҡыҙыу булһа, икенсегеҙ аҡыл һаҡлағыҙ. Утты ут менән һүндермәйҙәр, һыу һибәләр". "Ағай-эне талаша, атҡа менһә, яраша".

Ошондай ысулдар, һабаҡтар менән тәрбиәләгән беҙҙең атай-әсәйҙәр. Был бик мөһим, сөнки беҙҙе милләт итеп берләштереүсе лә, тотоп тороусы ла ер, тел һәм туғанлыҡ - үҙ-ара татыулыҡ. Бер туған балалар өсөн дә туғанлыҡ ҡиммәт тойғо, сөнки улар бер-береһенең таяу-таянысын тойоп йәшәйәсәк.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

БАЛАЛАР ҠОРО

# РӘМИ ҒАРИПОВ РУХЫ...

## капитандар тәрбиәләй

**(Башы 5-се биттә).**

**Алина:** Шулай ҙа был шарттар уҡыусыларға ла, ата-әсәләренә лә психик яҡтан ҙур баҫым яһай. Мин үҙем, мәҫәлән, шул тиклем тулҡынланам. Хатта белгәнемде лә онотоп бөтөрмөн кеүек. Атай-әсәйем өйҙә йөрәген ҡулына тотоп ултыра.

**Илиза:** Ғәҙеллеккә юл ярыуы һәр ваҡыт ауыр, тиҙәр. БДИ-ның ошо тиклем ҡатмарланыуын да мин юлда торған кәртәләрҙе еңеү өсөн эшләнелгән саралыр, тип ҡарайым. Иң мөһиме, имтиханды кәрәкле һөҙөмтәгә тапшыра алмауҙан ҡурҡмаҫҡа кәрәк.

**➔ Гимназияла үҙаллылыҡҡа ла өйрәтәләр, тигәйнегеҙ. Киләсәк һөнәрегеҙҙе үҙегеҙ һайланығыҙмы?**

**Лилиә:** Гимназияла гуманитар йүнәлештә белем алғас, журналист йә уҡытыусы һөнәрен һайлармын, тип уйлайым. Уҡытыусы эше еңел булмаһа ла, бик ҡыҙыҡлы. Мәҫәлән, балаларҙан инша яҙҙырып, уҡып, уҡытыусы һәр баланың күңелендә нимә булыуын, эске донъяһын белә, тәрбиәләй ала. Минеңсә, балаларҙа туған телгә, илгә, халҡына ҡарата һөйөү уятыуҙан, рухи байлыҡ өләшеүҙән дә юғары билдәләнеш юҡ.

**Аяз:** Ҡыҙҙар шулай рухи байлыҡты ҡайғыртһа, ысын ир-егет матди яҡҡа иғтибар бирергә тейеш. Шуға күрә, минең өсөн иң ҡулай һөнәр - төҙөүсе. Әле баш ҡалабыҙ Өфө миҫалында ғына ҡарағанда ла төҙөлөш эше бер ҡасан да бөтөп, юғалып, туҡтап ҡалмаҫына инанырға мөмкин, шулай бит? Мин үҙем кирбес һалмаһам да, кирбесте үҙем теләгәнсә һалдырыр өсөн юғары белем алырға уйлайым.

**Илиза:** Ҡыҙҙар һәр саҡ әҙәбиәт, сәнғәт, ижадҡа ынтылыусан. Мин үҙем шиғырҙар яҙам. Ә шулай ҙа ҡатын-ҡыҙҙың төп маҡсаты - балаларына башҡорт телен өйрәтеү. Шуға күрә әле башҡорт теле буйынса БДИ тапшырам, тел белгесе буласаҡмын. Һөнәремде үҙаллы һайлайым, сөнки ике өләсәйем дә уҡытыусы булыуға ҡарамаҫтан, уларҙың юлын дауам итеү теләге бик юҡ.

**➔ Гимназияла уҡығандағы хәтерегеҙҙә ҡаласаҡ иң сағыу иҫтәлегегеҙ менән бүлешегеҙ әле.**

**Алина:** Иҫтә ҡалырлыҡ ваҡиғалар бик күп. Ә шулай ҙа әле яңы ғына булған иң ҡыҙыҡлы мәл - ул һуңғы ҡыңғырау алдынан гимназия биләмәһен таҙартыу булды. Аяз менән репетициянан сыҡтыҡ та, урамдағы балалар төркөмөнә ҡушылдыҡ. Улар араһында эш кейемендәге, ҡулына һепертке тотоп, ихлас эшләп йөрөгән директорыбыҙ Әлфир Сулпан улын күреү бер аҙ сәйерерәк тойолдо. Ошоға тиклем бер мәктәп директорының да балалар менән бергә туҙан һепереп, сүп-сар йыйып йөрөгәнен күргәнем юҡ ине. Был күренеш бик оҙаҡ күҙ алдында торор, ахыры.

**Аяз:** Гимназияла алған һәр һабаҡ иҫемдә уйылып ҡаласаҡ. Унда тапҡан дуҫтар ҙа ғүмерлеккә, тип уйлайым. Тормошта ниндәй генә хәлдәр булғанда ла, бер-беребеҙгә ышаныслы терәк-таяныс буласаҡбыҙ.

**Илиза:** "Интернатым - пар ҡанатым" гәзитенең гимназияның етмеш йыллығына арналған һанына ошо белем усағын тамамлаусы күренекле шәхестәрҙән интервью алғайныҡ. Улар араһында Ғайса Хөсәйенов, Мирас Иҙелбаев, Рәшиҙә Мәһәҙиева, Гөлсирә Ғиззәтуллина, Артур Кәбиров, Миңһылыу Усманова, Ләлә Биишева, Сәлиә Мырҙабаевалар бар ине. Миңә Ғайса Хөсәйенов менән яҡындан аралашыу бәхете тәтене. Ошо мәлде йылы итеп иҫемә аласаҡмын.

**Искәндәр:** Гимназия-интернаттағы һәр көн төрлө ваҡиғаларға, ҡыҙыҡлы хәлдәргә бай булды. Улар йылдар үткәс, синыфташтар менән осрашыуҙарҙа, ҡабаттан был белем усағы ишектәрен асып ингәс, яҡты хәтирәләр булып иҫкә төшәсәк әле.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты быйыл 70-се сығарылыш уҡыусыларына - 156 балаға төплө, нигеҙле белем биреп, үҙаллы тормош юлына оҙата. Һигеҙ төрлө йүнәлеш буйынса уҡыған үҫмерҙәрҙең барыһы ла республикабыҙ мәнфәғәттәрен ҡайғыртып, халҡы, иле, теле өсөн йәшәрҙәй илһөйәрҙәр буласаҡ, тигән ышаныс бар. Улар араһында тормош диңгеҙендә бөтә караптарҙы үҙ артынан эйәртә аласаҡ башҡорт капитаны ла булһын!**

**Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

**Революцияның Башҡортостанға, башҡорт халҡына йоғонтоһо, милли хәрәкәттең барлыҡҡа килеүе һәм халыҡтың үҙаңы күтәрелеүгә сәбәп булған тарихи осор менән тарих фәндәре кандидаты Нурислам Мирхәйҙәр улы ҠАЛМАНТАЕВ таныштыра.**



# ХАЛЫҠТЫҢ ҮҘАҢЫ КҮТӘРЕЛЕҮГӘ...

## революция осоро ла сәбәпсе

### Башҡорт милли хәрәкәтенең үҙенсәлеге

Шаһайҙар Сыртланов: "Башҡорттар Рәсәй подданствоһын ала, был яулап алынған халыҡ түгел. Подданство ҡабул иткәндә уларҙың ерҙәренә, мөлкәттәренә, диндәренә, йолаларына, көнкүрешенә ҡул һуҙылмаясағы вәғәҙә ителә. Ваҡыт үткәс, башҡорттар казактар сословиеһына индерелә. Ватан өсөн күп һуғыштарҙа ҡатнашалар... Уларҙың хеҙмәте менән Ырымбур ҡәлғәһе төҙөлә... Уларҙы үҙ ағастарын Һаҡмар менән Урал йылғалары буйлап ағыҙырға һәм меңәр саҡрымдар аттарҙа йә дөйәләрҙә ҡаҙнаға ташырға мәжбүр итәләр... Әммә быларҙың барыһына ла, башҡорт ерҙәрен көсләп талау башланғанға ҡәҙәр түҙергә була ине... Ыҙанлау башҡорттарҙың ихтыярынан тыш, дәүләт органдарының шәхси мәнфәғәттәрендә атҡарылды... Һуңында башҡорттарҙың үтенесен еткермәксе инем. Дәүләт думаһы ойошторолғас, улар үҙҙәренең ерҙәренең ҡайтарыласағына өмөт итәләр. Әммә өсөнсө, дүртенсе ҡулдарға күскән ерҙәрҙе ҡайтарып булмай. Улар өсөн ҡаҙнаға киткән аҡса булһа ла ҡайтарылырға тейеш, тиҙәр", - тип сығыш яһай. Сыртланов шул тиклем ныҡышмалы рәүештә башҡорттарҙың ергә хоҡуҡ мәсьәләһен яҡлай, хатта үҙенең коллега-депутаттарҙан "башҡорт ерҙәре" тигән ҡушамат та ала.

Шулай уҡ башҡорттарҙың ер мәсьәләһендә башҡорт һәм татар эшселәре төркөмө етәксеһе Кәлимулла Хәсәновтың да ныҡлы үҙ позицияһы була. Ул да үҙенең сығыштарында башҡорттарҙың аҙ ерле һәм ярлы булыуҙарына баҫым яһай. Ә быңдай мөшкөл хәлгә төшөүҙең сәбәбен һуңғы 10 йыл эсендә уларҙан 2 миллион дисәтинә ер талап алыныуында күрә. Ул да был ерҙәрҙе башҡорттарға ҡайтарыу яҡлы була. "Хөкүмәт тартып алған ерҙәр кире ҡайтарылмаһа, беҙ уларҙы ҡайтарыу өсөн бар сараларҙы күрәсәкбеҙ", ти ул.

Ырымбур губернаһы депутаты Шаһбал Сәйфитдинов 2-се Думаның аграр комиссияһына башҡорттар исеменән ғариза индерә. Унда ул башҡорт халҡының аҫабалыҡ тарихына һәм ул замандағы ер мәсьәләһенә туҡталып китә. Башҡорт ерҙәрен асыҡтан-асыҡ талауға килтергән XIX быуат аҙағындағы ыҙанлау тураһындағы законды ғәмәлдән сығарырға кәрәк, тип сығыш яһай. Ул ошо турала 7 пункттан торған ғаризанамә яҙа. Ғаризала башҡорт халҡының мәнфәғәттәренә ҡаршы килгән йәки уларҙы иҫәпкә алмаған законды ғәмәлдән сығарырға кәрәк, тип әйтеүе менән бергә, "урындағы власть ҡыҫымы менән оҙайлы ваҡытҡа осһоҙ хаҡҡа, башҡорттарҙың мәнфәғәттәрен иҫәпкә алмайынса ҡуртымға бирелгән ерҙәрҙе аҫаба халыҡҡа ҡайтарырға" саҡыра.

1905 йылда Плансон исемле статский советник Өфө губернаторына: "Если теперь разгорится пожар восстания, то причиною его будет не только специально аграрный вопрос, но, с точки зрения башкир, это будет справедливый "суд Линча" над правительственными агентами и их пособниками, поселившимися на чужих землях. А потому, если здесь поднимается народ, то, кроме малоземелия, он будет иметь к этому и другие причины, нежели в остальной России, где правительство не отнимало земли... а потому и сила восстания будет другая", - тип яҙа.

Башҡорт аграр хәрәкәте "тартып алынған ерҙәрҙе ҡайтарырға" тигән лозунг аҫтында бара. Мәҫәлән, Бөрө өйәҙе башҡорттары ҡаҙна һәм шәхси ер-урмандарҙы башҡорттарға биреүҙе талап итә. 1905 йылда ер менән бәйле тәртипһеҙлектәр өйәҙҙең башҡа улыстарында ла бара. Стәрлетамаҡ өйәҙендә башҡорттар тартып алынған ерҙәрен үҙ ҡулдары менән ҡайтарырға тырышҡанда алпауыт һаҡсылары менән бәрелешкә инәләр. Быңдай осраҡтар Өфө һәм Ырымбур губерналарында күп күҙәтелә. Мәсьәлә дәүләт ярҙамы менән хәл ителмәйәсәгенә өмөтөн юғалтҡан халыҡ үҙ белдеге менән урмандарҙы ҡырҡа башлай.

Беренсе революция еңелеүгә осрағандан һуң, батша хөкүмәтенең бар ҡаршылыҡтарҙы аяуһыҙ баҫтырыуына ҡарамаҫтан, башҡорттар үҙҙәренең урман өсөн көрәшен дауам итә. Халыҡ йорттары янындағы урмандарҙы ҡуллана алмауы менән килешергә теләмәй.

### Башҡорт зыялылары

Был осорҙа башҡорт зыялылары әүҙемләшә. Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың тарихи очерктарында, Сафуан Яҡшығоловтың шиғырҙарында, Ғәбдрәшит Ғүмәри, Һаҙый Мөнир, Мөхәмәтша Буранғоловтың тарихи-публицистик әҫәрҙәрендә халыҡты уятыуға йүнәлтелгән саҡырыуҙар яңғырай. Һаҙый Мөнир "Башҡорт тарихы" әҫәрендә башҡорт тарихын, батшалыҡтың милләтте иҙеүенә ҡаршы туҡтауһыҙ ихтилалдар тарихы, тип аса һәм халыҡтың милли территория өсөн хоҡуғы бар, тип билдәләй.

Ғәбдрәшит Ғүмәри үҙенең "Башҡорттар бөтәме?" әҫәрендә ошо һорауға яуап эҙләй. Ул, башҡорттар бөтмәй, киреһенсә, арта, үҙҙәренең киләсәге хаҡында уйлана, үҙ аҡсаларына мәктәптәр аса, тип яҙа. Ул халыҡты милли мәҙәниәтте күтәреү өсөн көрәшкә, ерҙәрҙе тегеләй-былай таратып бөтөүҙе туҡтатыуға саҡыра.

Дауыт Юлтый менән Шәйехзада Бабичты халыҡтың ҡот осҡос хәле шулай уҡ ныҡ борсой. Үҙҙәренең шиғырҙарында улар башҡорттарҙың милли ғорурлығын күтәрергә, яҡты киләсәк өсөн көрәшергә саҡыралар. Быуат башында башҡорт зыялылары эпосҡа, тарихи йырҙарға, рухи ҡомартҡыларға ныҡлы иғтибар итә, уларҙы өйрәнә башлай. Мөхәмәтша Буранғолов, Фазыл Туйкиндар милли йырҙар йыйынтыҡтарын әҙерләп сығара. Өфөлә һәм башҡа ҡалаларҙа әҙәбиәт кисәләре үткәрелә башлай.

### Революция биргән һабаҡтар

Революцияның башында күҙәтелгән демократлаштырыу бик аҙға ғына етә. Тап ошо ваҡытта күпләп гәзит-журналдар сыға башлай, сәйәси фирҡәләр барлыҡҡа килә. "Мосолман иттифағы" - шуларҙың береһе. Уның төҙөлөүендә башҡорттарҙың да өлөшө тос була. Революция тамамланғас, батшалыҡ режимы күп хоҡуҡтарҙы киренән тартып ала. Реакция осоро башлана. Депуттарҙың һаны кәмей. Ҡаҙағстандан, Үзбәкстандан улар бөтөнләй һайланмай (был халыҡтарҙың уяныуына властың яуабы шул була). Мосолмандарға килгәндә, батшалыҡ уларға ул тиклем үк насар мөнәсәбәттә булмай. Власть ислам дине вәкилдәренең режимға лояль ҡалыуын билдәләй. Ысынлап та, Рәсәй мосолмандары, беҙ Рәсәйҙә йәшәйбеҙ, Рәсәйгә ҡаршы баш күтәрмәйбеҙ, әммә дәүләт мосолмандарға һәм православие динлеләргә тиң ҡараштa булырға тейеш, тип бара. Мосолмандар менән хөкүмәт яҡшы килешеүҙәр генә лә төҙөй ала ине, быны эшләй алырҙай кешеләр ҙә була. Әммә дәүләт улар менән диалогҡа инергә ашығып бармай. Килешергә кәрәк урында үҙенә кәрәкле юлдарҙы эҙләй. Халыҡ мәнфәғәтен яҡлауға йүнәлтелгән "Мосолман иттифағы"ның уставын раҫламайынса, мосолмандар араһында бөтөнләй абруйы булмаған Баязитов тигән кеше аша фирҡә төҙөй. Ул фирҡә халыҡ мәнфәғәтен яҡлауға түгел, киреһенсә, батшалыҡтың хаталарын аҡлауға йүнәлтелә.

Был осорҙа дин әһелдәренең абруйҙары көслө була. Зәйнулла Рәсүлев мәңдәрсә кешене үҙ янында туплай, ябай дин әһелдәре лә халыҡ мәнфәғәтен яҡлап сығыш яһай (мөфтиәттең үҙендә ундайҙар әҙ була). Ә мулла Сәғит Мерәсов 1917 йылда Аллабирҙе Ғафаров менән бергә ҡоролтай йыйып, милли хәрәкәтте башлап ебәрә. Вәлиди һуңынан ошо хәрәкәткә килеп ҡушыла һәм уны етәкләй. Тимәк, милли хәрәкәтте булдырыуҙа дини кешеләрҙең өлөшө ҙур була.

Башҡорттар ерҙәрен күпләп һатҡан. Ни өсөн тигәндә, капитализм осорона инеү улар өсөн бик ауырға тура килә. Бөгөнгө көндә лә хәлдәр шулайыраҡ тора. Беҙҙең байҙарыбыҙ күп түгел, үҙ эштәрен асыусылар ҙа һирәк. Ләкин ошо йүнәлештә әүҙемерәк булырға ине. Сөнки бер быуат элек булған тарихи ваҡиғалар беҙгә һабаҡ булырға тейеш, беҙгә аҡыллыраҡ уйлап эш итергә кәрәк. Республикабыҙ бар, ерҙәребеҙ, урмандарыбыҙ әле лә күп. Башҡа мөмкинлектәр ҙә юҡ түгел. Баҙар иҡтисадына инеп китергә, замандың да һулышын тойоп, бар яҡлап үҫешергә кәрәк, уға яраҡлашырға һуң түгел.

Дөйөм алғанда, XX быуат башы мосолман халыҡтарының, башҡорттарҙың уяныуы, уларҙың сәйәси әүҙемлеге артыуы менән билдәләнә. 1905 йылға тиклем уның милли үҙаңы түшөнкө хәлдә ҡала. Буржуаз-демократик революция барышы халыҡтың милли-азатлыҡ хәрәкәте өсөн һынылыш осоро була. Революция башҡорттарҙы ғына түгел, башҡа халыҡтарҙы ла уята. Яңыса уҡытыу мәҙрәсәләре һәм мәктәптәре танылыу ала. Думалағы депутаттарҙың эшмәкәрлеге, уларҙың халыҡ менән осрашып тороуы күп йәштәргә ыңғай тәьҫир итә. 1917 йылдағы милли хәрәкәттең лидерҙары формалашыуына улар шулай уҡ ҙур йоғонто яһай. 1917 йылда башҡорттарҙың үҙбилдәләнеш өсөн башҡа халыҡтарға ҡарағанда иртәрәк көрәш башлауы нигеҙендә ошо уяныу ята ла инде.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 22-24-се һандарҙа).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

## БАШҠОРТТАР

### Торлаҡ һәм ҡаралтылар

Атап үтелгән торлаҡ менән бер рәттән башҡорттарҙа һәр урында ныҡлы итеп һалынған йорттар ҙа осрай. Быңдай өйҙәр нигеҙле итеп күтәрелә. Нигеҙ дүрт мөйөшкә һалынған ҙур таштарҙан йәки ергә ҡаҙып ултыртылған бағаналарҙан тора. Таштар йәки бағаналар араһындағы бушлыҡ таш менән тултырыла. Бик йыш быңдай нигеҙ тыштан балсыҡ менән һылана йәки тупраҡ менән күмелә. Бүрәнәләр еңелсә сутлана һәм бер-береһенә ныҡлы итеп ултыртыла (**һүрәт**). Беренсе ниргәгә иҙән өрлөгө һалына, һуңынан иҙән түшәлә. Ике һуңғы ниргә араһында йәки иң өҫкө ниргәгә өрлөк һалына, ул түбә таҡтаһын тотоп тора. Бурала ишек һәм тәҙрә өсөн яҡтар ҡуйыла. Эстән ғәҙәттәгесә урындыҡ эшләнә, мейес сығарыла.



Бай йәки етеш йәшәгән башҡорттарҙың урамында икешәр өй тора (һүрәт). Уларҙың береһе ҡунаҡ өйө (**а**), унда хужа йәшәй; икенсеһе аш өйө тип иҫәпләнән (**в**), унда башҡа ғаилә ағзалары тора. Был ике йорт бер-береһенән айырым йәки бер ҡыйыҡ аҫтында, солан (**б**) менән тоташа. Был осраҡта йортҡа солан аша инәләр. Бик һирәк ике айырым бура биш стеналы бура менән алмаштырыла. Бүлмәләҙең береһе һәр саҡ ҡунаҡ өйө ролен үтәй, икенсеһе - аш өйө. Уларҙың беренсеһендә бик йыш йылытыу өсөн мейес кенә сығарла, икенсеһендә инде ҡаҙан ҡуйылған усаҡлыҡ була. Башҡорт торлағының ҡоролошонда иҙәндең ерҙән ниндәй бейеклектә булыуы үҙенсәлекле. Ул йорттоң ниндәй типҡа ҡарауына бәйле.



Башҡорт торлағының баҙ өлөшө, миңә мәғлүм булыуынса, бер ваҡытта ла иҙән аҫты итеп тә, мөгәрәп итеп тә файҙаланылмай. Бары тик умартасылыҡ киң таралған урындарҙа иҙән аҫтында умарталарҙы һаҡлау өсөн баҙ эшләнә. Уларға тыштан инеп йөрөйҙәр. Ул өйҙөң аҫҡы ағас өлөшөндә лә, таш нигеҙ эсендә лә эшләнә (**һүрәт**). Уға ҡайһы ваҡытта тәҙрә уйыла.



Ҡайһы бер типтағы торлаҡтың ҡыйыҡһыҙ булыуы тураһында әйтеп үтелгәйне инде. Дөрөҫ, ауылдарҙа быңдай йорттар бер нисәү генә, бик ярлы йәшәүселәрҙә була, әммә улар һәр ерҙә осрай. Дөйөм ҡағиҙә булараҡ, ҡыйыҡһыҙ йорттар урманға бай булған төньяҡ-көнбайыш территорияла бик һирәк. Урман һыҙатында һәм тауҙарҙа - һирәгерәк, ә инде ялан ерҙәрендә йышыраҡ күҙгә ташлана. Урал арьяғында урыны менән 30 процент ҡыйыҡһыҙ йорт осраны.

Бигерәк тә ябай һәм сағыштырмаса һирәк ҡыйыҡ тибы булып бер яҡлы ҡыйыҡ иҫәпләнә. Ул һәр саҡ тәпәш, бер генә кәртәле, бураның буй стенаһының бер яғынан өҫтәрәк күтәртелеп, ике бағана менән терәтелеп ҡуйыла.

# САЛАУАТТЫҢ НӘҪЕЛ

## аҡтамырҙай ҡалкты

**Үҙенең башҡорт халҡына яҙған хушлашыу хатында Әхмәтзәки Вәлиди милләтте аҡтамыр киҫәгенә тиңләп, бер тамыры ғына ҡалғанда ла уның ҡабат ишәйеүен күҙаллай. Ысынбарлыҡта, сүп үләне һаналған аҡтамырҙа йәшәү көсө иҫ китмәле ҙур! Ә инде уның орлоҡтары көтмәгәндә күҙгә сүп булып ҡаҙалырға ла мөмкин. Башҡорт халҡының ғына түгел, күп милләтле Башҡортостандың ҡаһарманы, азатлыҡ символы булған Салауат Юлаев та ҡасандыр Рәсәй батшалығы күҙенә төшкән сүп булып, уның хаҡында иҫкә алыуҙы, һүҙ һөйләүҙе махсус указ менән тыйһалар ҙа, халыҡ хәтере уның хаҡындағы иҫтәлектәрҙе беҙҙең көндәргәсә алып килеп еткерҙе, ул ғына ла түгел, тоҡомдары ишәйҙе. Бөгөнгө әңгәмәселәребеҙ - "Салауат Юлаев вариҫтары" төбәк йәмәғәт ойошмаһы ағзалары, техник фәндәр кандидаттары Виктор ХӘКИМОВ, "Салауаттың шәжәрәһе" китабы авторы Радик ВАХИТОВ менән Салауаттың аҡтамырҙай таралған тамырҙарын барларға ниәт иттек.**

**▸ Үҙегеҙҙең милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың вариҫы икәнлегегеҙҙе нисек асыҡланығыҙ һәм тамырҙарығыҙҙы юллау эшенә ҡасан тотондоғоҙ?**

**Виктор Хәкимов:** Уҙған быуаттың 90-сы йылдары булғандыр, "Башҡорт халыҡ ижады" китабының бер томында Хәйрулла Ҡолмөхәмәтовтың шәжәрәһенең бер өлөшөн күреп ҡалдым. Унда Кинйәбикә, Гөлсафия, Хәлимә, Сәлим (уҡытыусы) һәм Ғәбделхаҡ тигән исемдәр бар ине. Ошо шәжәрәлә атайымдың да исеме булғас, унан Салауат Юлаев менән нисек нәҫелдәш булыуыбыҙ тураһында һораным, әммә ул аныҡ ғына белмәй ине. Артабан был хаҡта крайҙы өйрәнеүсе Вельмир Сафин менән һөйләштем. Ул да шәжәрәбеҙҙең Салауатҡа барып тоташыуын раҫланы, ләкин шәжәрә ағасын аныҡ ҡына белмәй булып сыҡты. Ҡыҙыҡ булып китте: барыһы ла нәҫел ебенең Салауатҡа барып тоташҡанын белә, әммә аныҡ ҡына аңлата ла алмайҙар. Радик Вахитовтың "Салауаттың шәжәрәһе" китабы сыҡҡас ҡына барлыҡ һорауҙарыма яуап алдым. Унда Кинйәбикә Салауаттың улы Сөләймәндең ҡыҙы тип күрһәтелгән. Гөлсафия - уның тыуасары (праправнучка) булып сыға. Вельмир Иштимер улы менән ҡабат осрашып һөйләшкәс, ул Ҡаратаулыла Гөлсафияның ейәнсәрҙәре йәшәүен әйтте. Шулай итеп, Динә апайға, Вәғиз Байрамғолов ағайға инеп, мәғлүмәттәр йыйҙым. Вәғиз атаһының Баязит булыуын раҫланы (Баязит - Гөлсафияның беренсе улы). Артабан башҡалар менән осраштым. Үҙем төҙөгән шәжәрәгә ингән кешеләрҙең күбеһен күреп йөрөй инем быға тиклем дә, әммә уларҙың ниндәй дәрәжәлә нәҫелдәш икәнлектәре хаҡында уйланғаным булманы.

Гөлсафия өләсәйҙең балалары күп булған, уларҙы күреп белә инем, әммә өләсәйҙең үҙен күрмәнем. Мин Шағанайҙа үҫтем, бәләкәй саҡта атайым менән үткән-һүткәндә генә Яңы Ҡаратаулыға Байгилде ағайға (Баязиттың туғаны) инеп сыға торғайныҡ. Бер саҡ әсәйем, Салауат Юлаевтың тоҡомонан булған Гөлсафия - атайыңдың өләсәһе бит, тип әйтеп ҡуйҙы. Гөлсафия өләсәйендә ниндәйҙер ҡағыҙҙар булған, барыһын да яндырған, тине. Әммә Динә апай Әсмәндиәрова быны раҫламаны, ундағы ниндәйҙер ҡағыҙҙарҙы алып киттеләр, кемдәр икәнлеген белмәйем, тине. Ул ваҡыттарҙа этнографик, фольклор экспедициялары йыш ойошторолған булған. Силәбелә ул экспедицияларҙың эҙен юллап ҡараным, унда, Ленинград университетына мөрәжәғәт итеп ҡарағыҙ, улар шундай материалдар йыйып йөрөнө, тип кәңәш бирҙеләр. Әммә әлегәсә улар менән бәйләнешкә инә алғаным юҡ.

**Радик Вахитов:** Бәләкәй сағымдан өләсәйемдән тыуған яғымдың Салауатҡа бәйле урындарының атамаһына ҡағылышлы легенда-риүәйәттәр ишетеп үҫтем. Әммә совет заманында милли батырыбыҙҙың вариҫтары ҡалмаған, документтарҙа иҫкә алынған ҡатындары һәм балалары, йәнәһе, эҙһеҙ юғалған, тигән ҡараш йәшәне. Дөрөҫөн әйткәндә, уларҙы эҙләүсе лә булманы. Ләкин был яуап мине ҡәнәғәтләндермәй ине һәм уның нәҫел ептәрен эҙләү теләге бер ваҡытта ла тынғы бирмәне. Уҙған быуаттың 90-сы йылдары уртаһына, бер нисә йыл архивтарҙа эҙләнгәндән һуң, Салауат Юлаевтың шәжәрәһен төҙөнөм. Ҡайһы бер тармаҡтарҙа ул бөгөн йәшәгән замандаштарыбыҙға барып тоташты. Шуға ла исемдәре шәжәрәгә ингән замандаштарыбыҙға ошо хаҡта белдерергә теләп, иң элек ул ваҡыттағы Һалым полицияһы департаменты етәксеһе, генерал-майор Энгельс Ҡолмөхәмәтовҡа барҙым. Ул бер аҙ шикләнеберәк тә, кеше нимә уйлар, тиеберәк тә ултырҙы ла, Ҡыйғылағы Хәйрулла Ҡолмөхәмәтов тигән бабайының Салауат темаһы менән ҡыҙыҡһыныуын, ҡыҙы Әминәлә атаһының ҡулъяҙмалары ҡалыуын һөйләне. Шулай итеп, эҙләнеүҙәрем мине Ҡыйғыға алып килде. Хәйрулла Ҡолмөхәмәтовтың эш дәфтәрендә ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр күрше ауылдарҙа йәшәүселәрҙең шәжәрәһе менән аралаштырып алып барыла ине. Үҙемдең шәжәрәмдә, унда атайым Шакирйәнде, бабайым Ҡазыханды, башҡа туғандарымды күргәс, аптырауымдың сиге булманы. Ул был шәжәрәне Гөлсафия Исламованан яҙып алған. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: шәжәрәләге яҙмалар архив документтары менән тап килә.



**▸ Бөгөнгә һеҙ Салауат Юлаевтың вариҫтары тип күҙалланған дүрт сылбырҙы беләһегеҙ. Тота һалып ҡына, һин Салауат тоҡомо, тип әйтеп булмай бит инде. Был сылбырҙарҙың береһе менән бәйләнешен нисек асыҡланығыҙ?**

**Виктор Хәкимов:** 2011 йылда "Салауат Юлаев вариҫтары" тип аталған төбәк йәмәғәт ойошмаһы булдырҙыҡ. Уның төп маҡсаттарының береһе - хәҙерге фәнни ысулдарҙы ҡулланып һәм архив материалдарына нигеҙләнеп, батырҙың вариҫтары исемлеген киңәйтеү маҡсатында генеалогик тикшеренеүҙәр үткәреү ине. Шундай ниәт менән янып йөрөгәндә Радик Шакир улы генетик анализдар эшләргә ярҙам итә алған Пермдәге бер эшҡыуар егеттең телефонын бирҙе. Уның менән бәйләнешкә инеп, биоматериал өсөн тәғәйенләнгән махсус комплект алып, Американың Хьюстон ҡалаһына ебәреп, генетик анализ эшләттек. Шағанайҙа йәшәүсе, Салауаттың тоҡомо, тип күҙалланыусы Револют Исмәғилев генетик анализды саҡ ҡына алдараҡ эшләткән булған икән. Минең биоматериалдарҙы тикшергәндән һуң, уның менән икебеҙҙең туған булыуыбыҙ тураһында белдереп, генетик карта ебәрҙеләр. Ундағы төп факторҙар тура килә. Йәғни беҙ Сөләймәндең (Салауаттың улы Рәхмәтулланың улы) тыуалары булып сығабыҙ. Рәхмәтулланың икенсе улы Ғабдрахман яғынан Салауат районының Урмансы ауылында тыуып, уҡытыусы булып эшләгән, әле 90 йәшлек Мәрфуға Ғиззәтова ла туған килеп сыға. Уның менән беренсе тапҡыр осрашҡанда, "Мин үҙемдең Салауат тоҡомо икәнемде 14 йәшемдә белдем", тине.

**Радик Вахитов:** Башҡортостан Республикаһының Үҙәк архивы хеҙмәткәрҙәре 90 йәшкә етеп барған Мәрфуға исемле әбейҙең нәҫеле Салауат Юлаевҡа барып тоташҡан шәжәрәһен законлаштырыуҙы һорап мөрәжәғәт итеүе хаҡында әйткәс, уны табып, "Салауаттар" яҡташтар ойошмаһының сираттағы йыйылышына саҡырҙыҡ. Атайым Шакирйән һәм олатайым Йомаҙил хаҡында һүҙ башлап, ул атайым менән бер мәктәптә уҡыуы тураһында белдерҙе. Мин уның шәжәрәһен уҡып шаҡ ҡаттым. Был шәжәрә "Салауаттың шәжәрәһе" китабына инмәгән, сөнки ул китап донъя күргәндән һуң төҙөлгән.

Мәрфуға әбей 8-се синыфта Ҡаратаулы мәктәбендә уҡый һәм фатирҙа йәшәй. Атайым Шакирйән дә ошо мәктәптә 7-се класта уҡый. Улар бик йыш мәктәптән бергә ҡайталар. Юл ҡарт олатайымдың өйө эргәһендә Шәрҙәле йылғаһы аша һалынған күпер аша үтә. Бер ваҡыт олатайым уларҙы ҡапҡа алдында ҡаршы ала ла, уҡыуҙары тураһында һораша. Һуңынан ҡайһы ауылдан булыуы менән ҡыҙыҡһына башлай.

- Урмансынан, - тип яуаплай Мәрфуға.

- Кем ҡыҙыһың? - тип һорай олатайым.

- Хәбибулланың ҡыҙы, - тип яуаплай ҡыҙыҡай.

- Ҡайһы Хәбибулланың? Урмансыла улар икәү.

- "Партизан"дыҡы, - тип Мәрфуға атаһының ҡушаматын әйтә.

- "Партизан"дыҡы! Ә һин, ҡыҙым, Салауат Юлаевтың тоҡомо икәненде беләһеңме?

Һуңынан Йомаҙил олатайым уларға "партизан" Хәбибулланан Салауаттың улы Рәхмәтуллаға тиклемге уның бөтөн шәжәрәһен һөйләп: "Балалар, онотмағыҙ, һеҙ - Салауат тоҡомдары! Ғорурланығыҙ!" - тип һүҙен йомғаҡлай. Мәрфуға әбей шул саҡта олатайыма аҡыллы һорау биргән: "Ә һеҙ быларҙы ҡайҙан беләһегеҙ?" Йомаҙил олатайым уға үҙенең ҡатыны Фатиманың, йәғни минең өләсәйемдең дә Салауат Юлаев тоҡомонан булыуын һөйләгән. Үкенескә күрә, атайым Шакирйән был һөйләшеүҙе хәтерендә ҡалдырмай, Мәрфуға, киреһенсә, һөйләшеүҙе онотмай, атаһынан ҡабат-ҡабат һорашып, шәжәрәһен ғүмергә иҫендә һаҡлай. Ул шулай уҡ Урмансыла Салауат Юлаевтың бик оло йәштәге бүләһе Аллаяр йәшәүен дә иҫләй. Ул йыш ҡына эргәһенә бала-сағаны йыйып, уларҙың арҡаларынан ҡағып:

- Бына былар Салауат тоҡомдары! Батырыбыҙҙы онотмағыҙ! - тиер булған.

Минең өсөн былар көтөлмәгән мәғлүмәттәр ине. Әммә Аллаярҙың шәжәрәһенең дауамына күҙ һалыу менән Мәрфуға әбейҙең һүҙҙәре ысынбарлыҡҡа әүерелә барҙы. Эш шунда: Аллаярҙың Хәбибулла тигән бүләһе булған һәм Урмансыла йәшәгән. Күрәһең, ул тап минең ҡарт олатайым Йомаҙил 1939 йылда Мәрфуға менән һөйләшкәндә иҫкә алған Хәбибулла булғандыр. Аллаяр 1839 йылда Шағанайҙа тыуа һәм Мәрфуғаның бала сағында уға 90 йәш самаһы була. Ул ваҡытта 100 йәшкә етеү ғәҙәти хәл булған бит.

Мәрфуға Ғиззәтова үҙенең атаһы аша Салауат Юлаевтың улы Рәхмәтулла менән туған булыуын раҫлай. Был беҙҙең замандаштың Салауат Юлаевтың улының исемен, уның тоҡомон ғаилә риүәйәттәре аша белгән бер осраҡ.

**Виктор Хәкимов:** Мәрфуға апайҙың улы Айраттың да биоматериалдарын генетик экспертизаға ебәрҙек. Күптән түгел генә килгән һығымта уның да сығышы беҙҙең менән бер тамырҙан булғанлығын күрһәтә. Малаяҙҙа йәшәүсе Рузит (Розет) Баһаутдиновтың биоматериалының экспертиза һөҙөмтәләре әле килмәгән.

Бында шуны ла әйтеп китергә кәрәк: Минйәрҙә лә легенда буйынса үҙҙәрен Салауаттың вариҫтары тип йөрөтөүселәр булған икән. Уларға барып таныштым. Әммә былтыр генетик экспертиза эшләттерергә ниәтләһәм, әбейе лә, бабайы ла ҡапыл ғына вафат булғандар. Өлкән улдары ата-әсәһенән алда баҡыйлыҡҡа күскән. Кесе улдары Сергейҙың (Коряков) Пермдә хәрби училище тамамлап, Алыҫ Көнсығышта хеҙмәт итеүен генә беләм. Ауылдаштары, таныштары

***Совет заманында милли батырыбыҙҙың вариҫтары ҡалмаған, документтарҙа иҫкә алынған ҡатындары һәм балалары, йәнәһе, эҙһеҙ юғалған, тигән ҡараш йәшәне. Дөрөҫөн әйткәндә, уларҙы эҙләүсе лә булманы. Ләкин был яуап мине ҡәнәғәтләндермәй ине һәм уның нәҫел ептәрен эҙләү теләге бер ваҡытта ла тынғы бирмәне. Уҙған быуаттың 90-сы йылдары уртаһына, бер нисә йыл архивтарҙа эҙләнгәндән һуң, Салауат Юлаевтың шәжәрәһен төҙөнөм. Ҡайһы бер тармаҡтарҙа ул бөгөн йәшәгән замандаштарыбыҙға барып тоташты.***

**✓ Эстонияның Палдиски ҡалаһында каторжандарҙыҡы булған ике ҡәбер урыны билдәле, тиҙәр. Унда ла тикшеренеү эштәре алып барғанда, молекуляр-генетик мәғлүмәт аша, бәлки, Салауаттың ҡәбере лә табылыр.**



# ТАМЫРҘАРЫ...

## ҡабаттан

аша уны табып, мәсьәләне аңлатҡас, ул генетик анализ өсөн биоматериал бирергә ризалашты. Әммә һығымта уның беҙҙең менән бер ниндәй ҙә генетик бәйләнеше булмауын асыҡланы.

**▶ Салауаттың варисҭары араһынан республикаға билдәле замандаштарыбыҙҙың бер нисәһенән атап китмәһәк, хилаф булыр кеүек...**

**Радик Вахитов:** Атайым Вахитов Шакир Ҡазыхан улы 1941-1945 йылғы Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша, РСФСР-ҙың атҡаҙанған юрисы, юридик фәндәр кандидаты, 27 йыл БАССР Юғары суды рәйесе була. Бабайым - Вахитов Ҡәнзәфәр Йомаҙил улы оҙаҡ йылдар партия һәм совет органдарында эшләй, БАССР Дәүләт именлеге комитеты рәйесе була, полковник. Уның ағаһы Вахитов Заһирйән Йомаҙил улы Салауат районында Лағыр башланғыс мәктәбенең беренсе директоры була, Мәскәүҙә КПСС Үҙәк комитеты ҡарамағындағы Юғары партия мәктәбен тамамлай, "Совет Башҡортостаны", "Ҡыҙыл таң" гәзиттәренең баш мөхәррир урынбаҫары булып эшләй.

Салауат районы халҡының күптәрәнә Йомаҙилов Фәрит Мырҙағаян улы билдәлеләр. Ул урындағы халыҡты ашығыс операцияларға санавиация менән Өфөгә алып килгән. Оҙаҡ йылдар баш ҡаланың 6-сы дауаханаһының баш табибының хирургия буйынса урынбаҫары булып эшләгән.

Дыуан районының Арый ауылында тыуған һәләтле бейеүсе, билдәле "Перовский" бейеүенең заманса варианты авторы, оҙаҡ йылдар Өфө авиация институтында уҡытҡан Әнүәр Әхмәҙиев Палдиски ҡалаһында Салауат Юлаевҡа һәйкәл ҡуйыу инициаторҙарының береһе булды һәм маҡсатына өлгәште. Әлбиттә, һанай китһәң, күп улар Салауат варисҭары.

**▶ Виктор Сәлим улы, һеҙгә исемде Салауаттың Франциялағы варисы, Гөлсафияның өлкән улы Баязиттың улы хөрмәтенә ҡушҡандар. Үҙегеҙҙең аҙашығыҙ, уның атаһы хаҡында ла мәғлүмәт биреп китһәгеҙ, яҡшы булыр ине.**

**Виктор Хәкимов:** Ул 1896 йылда Ҡаратаулы ауылында Гөлсафия менән Байрамғол Исламовтар ғаиләһендә донъяға килә. 1915 йылда батша армияһына, 6-сы Гренадер Таврический полкына 8-се рота һалдаты итеп алына. Бер йылдан инде Рәсәй экспедиция корпусына алалар һәм 30 мең һалдат һәм офицерҙан торған корпус батша Хөкүмәте тарафынан ҡоралланыуға алмаштырылып, пароходтар менән Францияға, Марсель ҡалаһына килтерелә. Йәғни Николай Икенсе үҙ граждандарын Германияға ҡаршы һуғышыр өсөн пушкаларға һәм снарядтарға алмаштыра.

Шул уҡ йылдың сентябрендә Грецияның Солоники ҡалаһы эргәһендә Рәсәй һалдаттары Германия ғәскәрҙәре менән алышта ҡатнаша. Баязит яраланып, Грецияла дауалана һәм Италия аша кире Францияға ҡайта.

Рәсәйҙәге Бөйөк Октябрь революцияһынан һәм Беренсе донъя һуғышы тамамланғандан һуң, Франциялағы Рәсәй һалдаттарын төрлө маҡсатта файҙаланалар. 1920 йылда демобилизациялайҙар. Улар ирекле йөшәй башлай, әммә тыуған илдәренә ҡайтармайҙар. Баязит Безансон ҡалаһында төпләнә. Водолаз эштәрендә йөрөй, һуңынан электрик һөнәрен үҙләштерә. Рәсәйгә легаль рәүештә сығырға тырышып ҡарай, эшкә сығыуҙан баш тарта, тыуған иленә ҡайтыуға рөхсәт талап итә. Әммә үҙ талаптары өсөн бер ай төрмәгә ябыла. Швейцария аша ҡасып ҡарай, ләкин Дулей ҡалаһында тотола һәм өс айға төрмәгә ябыла. 1927-1935 йылдарҙа Париж ситендә йәшәй һәм электрик булып эшләй, электр линиялары төҙәй. Уға Франция гражданлығын алырға тәҡдим итәләр, әммә ул баш тарта. Һөҙөмтәлә уны эшенән сығаралар һәм ул француз эшһеҙҙәре сафын тулыландыра. 1932-1933 йылдарҙа яҙмыш уны француз коммунисы Травер Морис менән осраштыра. Баязит коммунистарҙың йәшерен йыйылыштарында ҡатнаша, Травер Мористың ғаиләһе менән яҡындан таныша. Уның ҡыҙына өйләнә (беҙҙең уйлау буйынса) һәм тиҙҙән уларҙың улы һәм ҡыҙы тыуа. Коммунистарҙың йәшерен йыйылыштарында ҡатнашҡаны өсөн 1935 йылда полиция күҙенә эләгә. Совет шымсыһы, тип ҡулға алыу хәүефе килеп тыуа һәм ул майҙа Совет консуллығына тыуған иленә сығыуға рөхсәт һорап мөрәжәғәт итә. Ҡатынын да үҙе менән барырға өгөтләй. Июндә улар совет пароходында СССР-ға сығырға документ ала һәм 20-һендә Марселгә килә. Әммә ҡатыны һуңғы мәлдә генә СССР-ға сығыуҙан баш тарта. Шулай итеп, уның балалары - Виктор менән Нелли Францияла тороп ҡала.

**Радик Вахитов:** Салауаттың улдары кеүек үк, ул да оҙаҡ йылдарға тыуған иленән айырыла, алыҫта, Көнбайыш Европала йәшәй, әммә барыбер Йүрүҙән ярҙарына, ата-әсәһенә, ағай-һеңлеләренә, ата-олатайҙар ҡәберенә юл табып, тыуған яғына ҡайта. Өйләнә, тағы бер уланға ғүмер бирә. Туғандары менән осрашҡанда Франциялағы тормошо тураһында һөйләй, ҡатынының һәм балаларының фотоларын күрһәтә, балаларын Виктор һәм Нелли тип исемдәре менән атай. Әммә ҡатыны Фатима көнләшеп, был фотоларҙы утҡа яға. Бары тик Баязиттың дуҫтары араһында төшкән бер генә фотоһын ҡалдыра. Ләкин был тоҡомда Франциялағы туғандары хаҡында онотмайҙар һәм Баязиттың туғаны Сәлим улар хөрмәтенә балаларына Виктор һәм Нелли тип исем ҡуша.

Әммә 20 йыл сит илдә йәшәгән Баязит Байрамғоловтоң яҙмышы ғәҙәти генә дауам итә алмай. Бойондороҡһоҙ, Салауат характерына эйә ир иртәме-һуңмы барыбер каратель органдарының ҡулына эләгергә тейеш була. Һәм 1941-1945 йылғы Бөйөк Ватан һуғышы башланыуы быға этәргес бирә лә инде. Фронтка эшләй алырлыҡ ирҙәрҙең барыһы ла оҙатыла. Баязитты хәрәкәттәге армияға алмайҙар, тылда ла ҡалдыра алмайҙар. Ундайҙарға бер генә юл ҡала: РСФСР-ҙың Енәйәт кодексының 58-се статьяһы буйынса сәйәси яза - һуңынан йә лагерҙарҙа каторга хеҙмәте, йә штраф батальоны составында фронтка оҙатыу. Уны



*Ҡайһы бер ваҡыт Салауат Юлаевтың исеме республика өсөн шаршау, уның исеме артына ышыҡланыу өсөн генә кәрәк кеүек күренә башлай һәм шундай тойғо ҡалдыра. Ирекһеҙҙән, "Салауат Татарстанда тыуған булһа, улар нимә эшләр ине икән?", тигән фекер тыуа. Моғайын да, мөнәсәбәт бөтөнләй икенсе төрлө булыр һәм улар был исемде доға урынына ҡабатлап, уның тыуған төйәген икенсе Мәккәгә әйләндерер ине.*

1941 йылдың көҙөндә ҡулға алалар. "Юҡҡа ғына Франциянан ҡайттым, СССР халыҡтар өсөн төрмә", "Элекке йылдарҙа яҡшыраҡ ине, ә 1940 йылда бигерәк тә хөртәйҙе, бер нәмә юҡ, шәкәр юҡ, конфит, хатта тоҙ ҙа юҡ. Йылдан-йыл насарырыҡ, колхозда хатта икмәк тә ала алмайбыҙ, малдарҙы, кейемдәрҙе һатып бөттөк. Әгәр Финляндия менән һуғыш дауам итһә, СССР-ға хана булыр ине", - тигән һүҙҙәрен дә иҫенә төшөрәләр. Ул үҙенең ғәйебен танымай һәм был уға бик ҡиммәткә төшә.

Уны 7 йылға лагерға ебәреүгә хөкөм итәләр, әммә 1941 йылдың һуңында ул Бәләбәй төрмәһендә вафат була, күрәһең, ғәйебен таныуын талап итеп туҡмап, эске ағзаларын иҙәндәрҙәр. Салауат Юлаевтың француз тармағындағы варисҭарының яҙмышы, үкенескә күрә, билдәһеҙ.

**▶ Шағанайҙа боронғо ҡәбер бар, уның кемдеке булыуы һаман асыҡланмаған. Шулай ҙа ике версия йәшәй: Салауаттың ағаһы Раҡайҙыҡы һәм улы Рәхмәтулланыҡы. Һеҙгә ҡайһы фараз яҡыныраҡ?**

**Виктор Хәкимов:** Уҙған быуаттың 50-се йылдары тирәһендә олатайым, ул уҡытыусы ине, ошо ҡәберҙе күрһәтеп, бында Салауаттың ағаһы ята, тине. Уның ике ағаһы булған: Сөләймән менән Раҡай. Ул ваҡытта был хәбәргә бик иғтибар итмәнем, ләкин иҫемдә ҡалдырҙым. Әле ул, таш менән бураланған булһа ла, ныҡ ултырған, ергә һеңеп бөтөп бара. Бынан тиҫтә йылдар самаһы элек, әйҙәгеҙ, ошо ҡәберҙе ҡаҙып ҡарайыҡ, тип, Вельмир Сафин менән Нияз Мәжитовҡа ла мөрәжәғәт иткәйнек. Әммә эш ни сәбәпле алып барылмағандыр - уныһы билдәһеҙ. Ләкин бөгөн мәғлүм булыуынса, боронғо ҡәберҙәр республиканың мәҙәни мираҫы булып тора һәм был эш менән шөғөлләнеүҙе Башҡортостан Республикаһының Күсемһеҙ мәҙәни милек объекттары һаҡлау һәм ҡулланыу буйынса ғилми-производство үҙәге үҙ өҫтөнә алған һәм унда эш алып барыла. Әгәр шулай була ҡалһа, тимәк, ҡәберҙән алынған һөйәктәрҙе тикшереп, уларға молекуляр экспертиза үткәреп, ҡалдыҡтарҙың кемдеке булыуын асыҡлай алабыҙ. Йәғни молекуляр-генетика тикшеренеүҙәр һөйәктәрҙәге мәғлүмәтте "уҡып", ерләнеүсенең ниндәй осорҙа, ниндәй йылдарҙа йәшәүен асыҡлай, уның тарихын тергеҙә ала. Антропологтар иһә баш һөйәге буйынса уның йөҙөн "эшләй" аласаҡ. Был осраҡта инде Салауат Юлаевтың яҡынса йөҙ һыҙаттарын да төҫмөрләргә мөмкин буласаҡ. Шулай уҡ бөгөн милли батырыбыҙҙың һуңғы төйәге булған Эстонияның Палдиски ҡалаһында каторжандарҙыҡы булған ике ҡәбер урыны билдәле, тиҙәр. Унда ла тикшеренеү эштәре алып барғанда, молекуляр-генетик мәғлүмәт аша, бәлки, Салауаттың ҡәбере лә табылыр.

**▶ Бөгөн күп милләтле Башҡортостан халҡы өсөн Салауат Юлаевтың исеме азатлыҡ символы ғына түгел, ә йәшәү рәүеше булырға тейеш һымаҡ. Сөнки батыр образы тормошобоҙҙоң төрлө өлкәләрендә лә сағылыш таба. Шул уҡ ваҡытта республика буйынса күпме кеше Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, күпмеһе Салауат Юлаев ордены кавалеры. Әммә, ысынбарлыҡта, бөгөн улар ҡасандыр республиканы шаулатҡан "Салауат йыйыны"ның район кимәлендә генә ҡалдырылыуын да, Салауат районының социаль-иктисади хәленең насарланыуын да күрмәй ҙә, белмәй ҙә, өндәшмәй ҙә. Халыҡ әйтмешләй, батырмын тип кем әйтмәҫ, яу килгәндә өнө юҡ...**

**Виктор Хәкимов:** Ҡайһы бер ваҡыт Салауат Юлаевтың исеме республика өсөн шаршау, уның исеме артына ышыҡланыу өсөн генә кәрәк кеүек күренә башлай һәм шундай тойғо ҡалдыра. Ирекһеҙҙән, "Салауат Татарстанда тыуған булһа, улар нимә эшләр ине икән?", тигән фекер тыуа. Моғайын да, мөнәсәбәт бөтөнләй икенсе төрлө булыр һәм улар был исемде доға урынына ҡабатлап, уның тыуған төйәген икенсе Мәккәгә әйләндерер ине.

**Радик Вахитов:** "Салауат йыйыны" уҙғарыла башлаған йылдарҙа Салауат һәм уның арҡаҙаштарына бағышлап, ҡорбан салына торғайны. Һуңынан был йола онотолдо, әммә "Салауат Юлаев варисҭары" ассоциацияһы, "Салауаттар" Салауат районынан сыҡҡан яҡташтар ойошмаһы ҡатнашлығында йыл һайын район һабантуйынан һуң Салауат Юлаевтың тыуған ерҙәренә барыу, уның тыуған ауылы Тәкәйҙә дини йолаларҙы үтәү буйынса яҡшы традиция барлыҡҡа килде. Шулай итеп, Салауаттың һәм уның атаһы Юлайҙың үлеменән һуң 200 йыл үткәс, беҙ, уның варисҭары, уларға бағышлап ҡорбан салдыҡ.

Былтыр Виктор Сәлим улы ҡарт әләсәһе, үҙенең тоҡомдарына Салауат Юлаевҡа барып тоташҡан шәжәрәне еткереүсе Гөлсафия Исламованың ҡәберенә һәйкәл (авторы - Гөлсафияның икенсе бүләһе, Салауаттың варисы, рәссам Камил Буҙыҡаев) ултыртыуҙы ойоштороҙо һәм финансланы.

Ләкин, дөрөҫөн әйткәндә, милли батырыбыҙға, уның тыуған районына ҡарата республика етәкселеге яғынан иғтибар юҡ кимәләндә, тиер инем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Милләтен аҡтамырға тиңләп, ни тиклем хаҡлы булған Әхмәтзәки Вәлиди! Бөгөн арабыҙҙа Байыҡтарҙың, Салауаттарҙың, Вәлидиҙәрҙең, Бабичтарҙың, Рәмиҙәрҙең һ.б. тоҡомо дауам итә, уларҙың рухы, моно, һүҙе алға әйҙәй, исемдәре йондоҙ булып балҡып юл яҡтырта икән, батыры бар илдең бер нисек тә бахыр булырға хаҡы юҡ!**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

***✓ Рухтин ауыл Советы (Дыуан районы) Ҡәҙер ауылының башҡорт балаларына тик үҙ исемдәрен яҙып ҡына метрика бирҙе. Анжеликаны Әминә тип төҙәтәләр. Афарин, шәп эшләйҙәр.***



*АТЫҢ КЕМ?*

# БАЛАЛАРЫБЫҘҒА...

## милли исемдәр ҡушайыҡ

**Бала тыуа. Кескәй йән эйәһе ғаиләгә бөтмәҫ шатлыҡ-ҡыуаныстар алып килә. Өйҙә йәм, ырыҫ, ҡот арта. Йәш сабый үҙе менән бергә ғаиләгә яңы хәстәрҙәр ҙә килтерә. Уларҙың иң тәүгеһе - исем һайлау: эйе, был бик ҙур, изге һәм яуаплы бурыс, сөнки исем ата-әсәнең үҙ сабыйына биргән иң беренсе, ғүмер буйы йөрөтә торған ҡиммәтле бүләге. Ата-әсә балаһының бәхетле, тәүфиҡлы, һөймәлекле, эшһөйәр булыуын теләй. Ошо теләк сабыйға ҡушҡан исемдәрҙә сағылырға тейеш. Исем иң элек кешегә мөрәжәғәт итеү, өндәшеү өсөн кәрәк.**

Башҡорттар борон-борондан балаға ғәрәп, фарсы сығанаҡлы исемдәр ҡушҡан. Һәр исем матур яңғырашлы һәм мәғәнәле булған. Тыуған Ҡәҙер ауылымда күршебеҙҙә Ахун бабай менән Мәрзиә әбейҙең ғаиләһендә 10 бала үҫте. Уларҙың исемдәре мәғәнәле булды: Рәҡифә (теләк, хыял), Вәриҡа (йәшел япраҡ), Зәки (саф, зирәк), Хужа (баш кеше), Фатима (Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең ҡыҙы), Гәлиәскәр (оло, ҙур), Самат (мәңгелек), Әхтәмйән (йомарт), Әнисә (яҡын дуҫ), Рәйсә (башлыҡ).

Беҙ ғаиләлә өс бала үҫтек. Беҙгә Мөслимә (мосолман ҡыҙы), Әбүбәкер (саф, тоғро, намыҫлы), Зөлхизә (ай исеме) тип ҡушҡандар.

Арҡауылда Хужа бабай улландарына Рәшит (тура юлдан барыусы), Сәғит (бәхетле), Сабит (һүҙендә тороусы), Мәжит (данлы, маҡтаулы), Ғәбит (хеҙмәт һөйөүсе) тигән исемдәр ҡушҡан. Был исемдәрҙә милләтебеҙ, телебеҙ, йәшәү рәүешебеҙ, тарихыбыҙ сағыла. Исемдәре есемдәренә тап килеп тора. Хатта исемгә ҡарап милләтте лә билдәләп була. Юғарылағы исемдәр шәхестең башҡортлоғона ишара яһай. Исеме мәғәнәле булһа, бала оялып, уңайһыҙланып йөрөмәй, ә үҙен ғорур тота. Төрлө йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр милли булған кеүек, исем дә - милли күренеш.

Балаға исем ҡушыу йәһәтенән беҙ рустарҙан фәһем алырға тейешбеҙ. Улар балаһына сит-яттарҙың исемен ҡушмай. Атабабалары ҡуша килгән исемдәргә тоғролар. Мәҫәлән, Михаил, Сергей, Евгений, Юрий, Полина, Ксения, Татьяна, Любовь.

Мосолман ғаиләһендә ир бала тыуһа, Аллаһы Тәғәләнең күркәм, уны ололай торған 99 исемен ҡушырға мөмкин, мәҫәлән, Рәхим, Ғәзим, Ғәҙел, Шәкүр, Жәлил, Кәрим, Вәкил, Вәрис, Хәмит һ.б. Ошондай исемдәрҙе һайлаһалар, ата-әсәләр бик сауаплы булыр ине.

Беҙ, уҡытыусылар, бала исеменә битараф түгелбеҙ. Дәрестә балаға һәр саҡ исеме менән өндәшәбеҙ. Милли исемдәребеҙ балаға иркәләп, яратып өндәшеү өсөн дә ҡулай. Бөгөн шуныһы ҡыуандыра: ата-әсәләр балаға милли яңғырашлы исемдәр ҡуша башланы. Мәҫәлән, Арҡауыл мәктәбенең башланғыс класс уҡыусыларының исемдәре: Моразым, Хантимер, Сынтимер, Арыҫлан, Батыр, Надир, Нияз, Данияр, Камила, Нәфисә, Дилә, Наҙгөл, Илһөйәр, Зөлфиә, Әлфиә, Лилиә. Рәхмәт ата-әсәләренә, милләткә хыянат итмәй, күркәм исемдәр ҡушҡандар. Милләтенә балалар тыуҙырып, матур исемдәр ҡушыу - һөйөнөслө хәл. Шул уҡ ваҡытта Диана, Эвелина, Вилена, Линария, Карина, Алина, Альмир, Анита, Аделина, Эмма, Версал, Ванцет, Славик, Валерик, Юрик, Эмилдәрҙең ишәйеп китеүе эсте бошора, миллилекте юғалта.

Бала тыуғас та йәш әсәгә ололар исем һайлауҙа кәңәш бирергә тейеш. Йәш әсә сабыйына, яңыса исем ҡушам, тип хаталанып ҡуймаһын ине. Урыҫлашырға ярамай, һәр милләт үҙ исеме менән матур, күркәм.

Замана үҙгәрә, асылыбыҙға ҡайтабыҙ. Шәжәрәбеҙҙе юллайбыҙ, йолаларыбыҙҙы тергеҙәбеҙ. Йәш ғаиләләргә исемдәрҙе халыҡ ижадынан, әҙәби әҫәрҙәрҙән һайларға мөмкин. Алтынай, Шәүрә, Нәркәс, Зөһрә, Таһир, Юлай, Зөләйха, Салауат, Сәлимә, Аҡйондоҙ, Мәрйәм... Ниндәй әһәнле, матур яңғырашлы исемдәр! Баланы иркәләү өсөн дә яғымлы.

Мосолман балаһына исемде мулла аҙанлап ҡуша. Балаға милли исем ҡушырға кәңәш бирергә хоҡуҡлы улар. Мәғрифәтле муллалар сит-ят исемдәрҙе аҙанламай, хаҡ хөкөм итә.

ЗАГС бүлегендә тыуыу тураһында таныҡлыҡ бирәләр. Уларҙа "Башҡорт исемдәре" китабы мотлаҡ булырға тейеш. Таныҡлыҡ яҙыусы тултырыусы үҙенең кәңәшен бирергә лә хоҡуҡлы. Мәҫәлән, Рухтин ауыл Советы (Дыуан районы) Ҡәҙер ауылының башҡорт балаларына тик үҙ исемдәрен яҙып ҡына метрика бирҙе. Анжеликаны Әминә тип төҙәтәләр. Афарин, шәп эшләйҙәр.

Бала үҫә, шәхес булып формалаша. Уҡырға, эшкә сығып китә. Анжелика исемле башҡорттан һорашаҡтар: "Ҡайһы яҡтанһың, атайың менән әсәйең кемдәр?" Ошондай һорауҙарҙы күп ишеткән бар. "Халыҡ был тәңгәлдә бик яңылыша, һаташа", тиер ине зыялылар. Кеше ологаға, ҡартая ла бит әле. Фердинант, Робинзон, Рональд, Фрунзе исемле башҡорт бабайҙарҙың исемен ишетеү ҡолаҡҡа ятмай, аяныс хәл. Милләтебеҙгә лайыҡлы балалар үҫтерәйек, йәмәғәт. Бала үҙенә исемде үҙе ҡуша алмай, балаларыбыҙҙы матур милли исемдәр ҡушып һөйөндөрөгөҙ!

**Мөслимә МӨҒТӘБӘРОВА,**
**педагогик хеҙмәт ветераны.**
**Салауат районы Арҡауыл ауылы.**

*ИЖАДХАНА*

**Тәү күреүҙән нимәһе менәндер үҙенә ылыҡтырған, ниндәйҙер күренмәҫ көсө менән башҡаларҙан айырылып торған бик һирәктәрҙең береһе ул мәҡәләм геройы. Ихласлығы, ирәбелеге шулай итәме уны, әллә башҡа берәй сере бармы, һәр хәлдә, бар кеше менән дә берҙәй ябай һәм һәр кемде тиң күреп аралашыуы, эскерһеҙлеге һәм ярҙамсыллығы өсөн ярата лар, хөрмәт итәләр уны бергә эшләгән иптәштәре, меңәрләгән тамашасылары. Ә инде үҙе сәнғәт донъяһына әйҙәгән талиптар һәм мәктәп уҡыусылары өсөн ул ысын мәғәнәһендә кумир, һәр яҡлап та өлгө булырҙай остаз! Кем хаҡында шулай матур һүҙҙәр һөйләй икән, тип аптырамағыҙ тағы: Сибай дәүләт филармонияһында (бөгөнгө Сибай концерт-театр берекмәһе) сағыу сығыштары менән танылыу алған бейеүсе Азат Нәбиуллин ул. Ошо сәнғәт ойошмаһының йөҙөк ҡашы булған "Сибай" халыҡ бейеүҙәре ансамбле асылған көндән эшләй инде бында, ҡалабыҙҙа ғына түгел, республикала, хатта унан ситтә лә күптәр өсөн яҡшы таныш шәхес.**



# ҮҘ ҺӨНӘРЕҢӘ БИРЕЛГӘНЛЕК -

## хаҡ яҙғаның шул була

...Баш ҡалабыҙ Өфөлә - Башҡорт дәүләт медицина институтында белем эстәп йөрөгән булаҫаҡ йәш табиптар ғаиләһендә донъяға тәүге ауазын һала Азат. Малайға ике йәш тулғанда ҡулдарына диплом алған Нәбиуллиндар ғаиләһен Сибай ҡалаһына эшкә ебәрәләр. Шулай итеп, Азат ошонда балалар баҡсаһына бара, тәү башлап мәктәп ишеген аша атлап уҙа, ҡыҫҡаһы, Сибай - уның өсөн яҡын һәм тыуған ҡалаға әйләнә. "Ояһында ни күрһә, осҡанда ла шул була", тигәндәй, ҡаланың 9-сы мәктәбендә тулы булмаған урта белемгә эйә булған үҫмер урындағы медицина колледжына юлланмаҡсы була. Ниәте - атаәсәһе юлын дауам итеү. Тик был өлкәлә бер ни ҡәҙәр тәжрибә туплаған, ул замандарҙа үҙ хеҙмәтенең баһаһын әллә ни тоймаған (ә табиплыҡ - иң изге һөнәр, тип лаф ора инек!) әсәһе улының уйҙарына ҡырҡа ҡаршы төшә һәм уны уйынан кире күндерә. Азатҡа туған мәктәбендә уҡыуын дауам итеүҙән башҡа сара ҡалмай. Ә өлгөргәнлек аттестатын ҡулына алғас, ул документтарын Башҡорт дәүләт университетының Сибай филиалына илтеп тапшыра һәм артабан уны уңышлы тамамлай. Бер үк ваҡытта йәш егет 1993 йылда асылған ҡала филармонияһында үҙенең хеҙмәт юлын башлай.

Булаҫаҡ педагогтың сәнғәт юлын һайлауын, йөрәк ҡушыуы буйынса, тип әйтһәм, яңылышмамдыр, ахыры. Сөнки Азат әле балалар баҡсаһында тәрбиәләнгән кескәй генә малай сағынан сәхнәгә тартылып, бейеү сәнғәтенә ғашиҡ булып үҫә. Атаәсәһенең уны музыка мәктәбенә - хореография класына биреүе лә буштан ғына булмағандыр инде. Бөгөн Азат үҙенең беренсе уҡытыусылары Мәстүрә Миҙхәт ҡыҙы Бүләкова менән Вячеслав Викторович Клюевты йылы һүҙҙәр менән телгә ала. Малайҙың кескәй йөрәгендә халыҡ бейеүҙәренә һөйөү осҡондарын нәҡ улар ҡабыҙған да инде! Артабан Рима Фирғәт ҡыҙы Өмөтбаева етәкселегендәге "Гөлдәр" балалар өлгөлө бейеү ансамблендә шөғөлләнеүе лә булаҫаҡ бейеүсегә ҙур этәргес көс була. Нәзәкәтлелеге, һығылмалығы һәм милли колориты менән арбаған башҡорт бейеүҙәре малайҙы сағыу һәм ҡабатланмаҫ сәхнә кейемдәре менән дә үҙенә әсир итә. Ә инде ансамблдең республика буйлап ҡына түгел, йыш ҡына Мәскәү, Санкт-Петербург ише эре Рәсәй ҡалаларына ла гастролдәргә сығыуы бала күңелендә онотолмаҫ хәтирәләр ҡалдыра, аҡ хыялдар иленә әйҙәй...

- Бейеү сәнғәте - ул минең тормошом, ә ике тиҫтәнән ашыу тир түккән ансамбль - иң ҡәҙерле һәм шундай яҡын үҙ ғаиләмә тиң, - ти беҙҙең "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы" тигән маҡтаулы һәм юғары исемгә лайыҡ булған арҙаҡлы бейеүсе Азат Арыҫлан улы Нәбиуллин. - Минең бар яҙмышым, хаҡ яҙғаным "Сибай" халыҡ бейеүҙәре ансамбле менән тығыҙ бәйләнгән һәм барлыҡ ҡаҙаныштарым да - тормош юлым да, бәхетем дә уның менән бергә үрелеп бара. Ошонда да мин үҙемдең ғүмерлек йөрәмде, йән һөйгәнемде осраттым һәм, Аллаға шөкөр, бына егерме йылға яҡын инде матур һыу йәшәп ятабыҙ. Кәләшем Рәзилә лә бейеүсе, ул Өфө хореография училищеһын тамамлаған. Пенза ҡалаһында беренсе хеҙмәт сирҡанысы алғас, ата-әсәһе уны яңы асылған Сибай филармонияһына ҡайтарып ала, күрәһең, минең бәхетемәләр...

Ошо ябай ғына һүҙҙәрҙә лә мәҡәләм геройының үҙ һөнәренә ни ҡәҙәр бирелгәнлеген, ғаиләһенә, үҙенең икенсе яртыһына һөйөү һәм ихтирам саҡкыларын сырамытырға мөмкин! Әйткәндәй, Азат Арыҫлан улы өс бала атаһы булған хәстәрлекле ғаилә башлығы ла. Үҙенең йәшәү рәүеше менән ҡатынына ышанысллы терәк, балаларына өлгө булырҙай атай, тик улар тип йән ата, ғаиләм, тип өҙөлә. Алдына ҡуйған маҡсаты ла балаларын аяҡҡа баҫтырыу, ҙур тормошҡа сығарыу һәм кеше итеү. Өлкән ҡыҙҙары Алинаға бөгөн 18 йәш, ул Йәсәүи исемендәге Халыҡ-ара ҡаҙаҡ-төрөк университетында белем ала, киләсәктә ҡартатаһы менән ҡартәсәһе кеүек намыҫлы һәм ышанысллы табип булырға йыйына. Радмилла атаһы уҡыған 9-сы лицейҙа уҡып йөрөй, ә кинйәләре Аҫҡар әлегә әсәһе менән "өй көтә". Азаттан балаларының кемеһелер уның юлынан китеүен теләр инеме, тип һорағас, һис икеләнмәй генә, әммә үҙенсә ябай һәм аныҡ яуап бирҙе ул: "Юҡтыр, ахыры... Артист һөнәре ситтән ҡарағанда ғына еңел, ә ысынбарлыҡта, кем әйтмешләй, бар ғүмереңтәғәрмәстәр өҫтөндә үтә, үҙ тормошоң шаршау артына йәшерелә... Шулай ҙа, балаларымдың кемеһелер телӛй икән - үҙ ирек тәрендә, йәне теләгән, йылан ите ашаған, тиҙәрме әле?" Азат менән килешмәү мөмкин түгел: сөнки оҙайлы гастролдәр мәлендә ситтән ярҙамһыҙ ни эшләрҙәр ине үҙҙәре? Ярай әле, әсәйҙәре терәк-таяныс. Ҡайҙа-рҙа ғына йөрөһәләр ҙә балалары өсөн күнелдәре тыныс...

Тамашасыларға "Еҙнәкәй", "Һунарсы", "Елбәгәй" һ.б. яңғыҙ бейеүҙәре менән билдәле булған Азат Нәбиуллин күпселеген күмәк бейеүҙәрҙә ҡатнаша. Әммә ансамблдә уның үҙ урыны, үҙ манераһы бар һәм һиҙгер тамашасы быға иғтибар итмәй ҡалмай. Һәр бейеүҙең үҙенсәлеген, эстәлеген, нескәлектәрен тойоп, бар күңелен һалып ихлас башҡарыуы менән алдыра Азат. Ә, үҙе әйтмешләй, яратмаған, күңеленә ятмаған бейеүҙәр уның өсөн бөтөнләй юҡ!

"Гөлдәр" балалар өлгөлө ансамблендә репетитор, музыка мәктәбендә хореография уҡытыусыһы, Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтында "Ете ырыу" халыҡ бейеүҙәре ансамбле етәксеһе булып та эшләп йөрөгән бейеүсе үҙенә лайыҡлы алмаш та әҙерләй. Уның йәшәү асылы ла бит - үҙең белгәнде башҡаларға ла өйрәт! Сәнғәт өлкәһенән айырылғас, үҙен тулыһынса педагогик эшмәкәрлеккә бағышламаҡсы Азат. Ә әлегә яңып-ярһып сәхнәләрҙә бейей, кешеләргә илһам һәм дәрт өләшә, ҡул аҫтындағыларҙы яңы үрҙәргә әйҙәй.

**Мотал РӘМОВ,**
**РФ һәм БР журналистар союзы ағзаһы.**
**Сибай ҡалаһы.**

ЗАУЫҠ

# АРАБЫҘҘАН КИТКӘН ИЖАДТАШТАР АУАЗЫ

## (Сонеттар)

*Әнисә ТАҺИРОВА*



*Земную жизнь пройдя до половины,*
*Я очутился в сумрачном лесу...*
*Данте Алигьери.*

### Төштәге осрашыуҙар

Киске шәфәҡтәрем ҡабынғанда,
Ҡара урман уртаһында ҡалдым.
Нәфсе шаша, Намыҫ тибәрелә,
Уғрыларҙан ғазап сигә халҡым.

Төндәрем дә хәҙер тыныс түгел,
Шундай мәлдә ғәжәп бер төш күрәм:
Пәйҙә булды ете ир-уҙаман,
Барыһы ла ап-аҡ кейем кейгән.

Әйтте шул саҡ миңә иң өлкәне:
- Рухташтарың килер үткәнеңдән,
Килер улар һиңә берәм-берәм.

Барыһының билдәләнгән мәле.
- Ниндәй маҡсат менән улар килә?
- Ә уныһын Бөйөк Аллаһ белә.

### Беренсе осрашыу. Рәми ағай*

Иң беренсе килде Рәми ағай,
Элеккесә яғымлы һәм ябай.
Бары ҡара сәсе ап-аҡ булған,
Ҡарашына тәрән һағыш тулған.

Әйтте: "Онотолмай үткәндәрем,
Ғаиләмдең йылы ҡосағы.
Насар йәшәйһегеҙ. Бар эшегеҙ
Бер-берегеҙгә ҡаршы яу асыу.

Тик татыулыҡ йәшәйешкә терәк,
Тик берҙәмлек илде ҡотҡарыр,
Ҡыу үләнгә һәр саҡ ут ҡабыр.

Әсәйеңде онотмайһың, рәхмәт!
Маңлайымдан үбеп әйтте: - Китәм,
Инде һинең килеүеңде көтәм".

*Күренекле башҡорт шағиры Рәми Ғарипов

### Икенсе осрашыу. Фәүзиә апай*

Фәүзиә апай килде таң алдынан,
Тәрән уй ҡаплаған моңһоу йөҙөн.
"Бик йыш арҡан иштем, - тине, - ҡомдан,
Әйтелмәйсә ҡалды күпме һүҙем.

Артыҡ ышаныусан, йыуаш булдым,
Бутаным шул ҡай саҡ унды, һулды.
Үпкәләрең булһа, мине кисер,
Яҡшылыҡты ғына иҫкә төшәр.

Рәхмәтлемен яҡты көндәр өсөн,
Бергә үткән яҡты юлдар өсөн,
Балҡышлы ул мәлдәр онотолмай.

Ғәйбәттәрҙе изге эштәр йыуа,
Яманлыҡты яҡшылыҡтар ҡыуа,
Яҡты шатлыҡтарға туҙан ҡунмай".

* Күренекле башҡорт шағирәһе Фәүзиә Рәхимғолова

### Өсөнсө осрашыу. Зәйнәб апай*

Зәйнәб апай керҙе төшөмә:
Эш өҫтәле артында ул һаман.
Әйтте тура ҡарап күҙемә:
"Мин бында ла эшһеҙ түгелмен, яҙам!

Артыҡ наҙламаны фани донъя,
Ләкин иҫкә төшә, һағындыра,
Булғанда ла уландарым янда,
Йөҙмәһәм дә унда майҙа, балда.

Хеҙмәтемде һанға һуҡмаһа ла
Вазифалы тәккәбберҙәр, тундар,
Китмәне кәр, ташламаны мондар.

Халҡымдан мин һәр саҡ хөрмәт күрҙем,
Халҡым аҡылын мин нурға төрҙөм,
Халҡым менән бәсле булды юлдар".

* Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева

### Дүртенсе осрашыу. Вафа*

Тормошта һин үтә ихлас инең,
Ихластарға донъя тар түгел.
Тик ниңәләр үтә ихластарҙы
Өнәп бөтмәй көнсөл, тар күңел.

Ихласлыҡтың тиңһеҙ тәрәнлеге
Диңгеҙ һымаҡ балҡып ята шул.
Үҙе мәхрүм булғас тәрәнлектән,
Хәсәт йөндәр уҡтар ата шул.

Ихласлығың һаман моңға урай,
Күңелдәрҙә аҡ хистәргә сорнай.
Уйҙарҙа ул балҡышлы нур-йәйғор.

Ауыр тойғоларҙан арындыра,
Ап-аҡ тирмә булып һыйындыра
Йәндә өшөткәндә ҡарлы ямғыр.

* Шағир, ғалим Вафа Әхмәҙиев

### Бишенсе осрашыу. Рәмзилә*

Гел иҫемдә һуңғы ул осрашыу,
Эштәр бөткәс, ҡайтыр алдынан
Кәсәләргә һаумал ҡымыҙ ҡойоп,
Саҡырҙылар беҙҙе табынға.

- Ниңә шулай артыҡ бойоҡ инең?
(Йыш уйланым шулай мин аҙаҡ).
Ә бит һәр саҡ шат, көләкәс инең,
Хатта булдың бер аҙ шаталаҡ.

Һаубуллашҡан саҡта, онотолоп,
Бер аҙ ҡарап торҙоң күҙемә,
Унан әйттең: "Кабат килгәнеңдә
Тура килсе, апай, үҙемә".

Үттең фанилыҡтың тар юлын,
Мәле еткәс, төбәп барырмын.

* Шағирә Рәмзилә Хисаметдинова

### Алтынсы осрашыу. Зөлфәр Хисмәтуллин*

Берлинғаса еткән батыр яугир
Тоғролоҡло булдың эшеңдә.
Һиндә булған кешелеклек, шәфҡәт
Бик күптәрҙең кермәй төшөнә.

Был тормошта батып барғанда ла,
Ҡотҡарыусы мине һин булдың.
Ғәҙелһеҙлек иҙгән саҡтарҙа ла,
Ҡот ҡойоусы миңә һин булдың.

"Янып барған" путевкалар менән
Ғүмеремде минең оҙайттың
Һалҡын боҙҙар ҡоршап алған саҡта,
Йәнде йылытырлыҡ ҡуҙ аттың.

Тоғро улы булдың халҡыңдың,
Йәнең гел йәннәттә балҡыһын!

*Ғүмеренең һуңғы йылдарында Башҡортостан Яҙыусылар союзында Литфонд директоры вазифаһын башҡарҙы

### Етенсе осрашыу. Юлия Друнина*

Әйтерһең дә, донъя үҙгәрмәгән,
Беҙ Ялтала. Диңгеҙ буйында.
Тулҡындарҙы ҡыуып тулҡын уйнай,
Емелдәшеп ҡояш нурында.

- Юля, юҡҡа ул аҙымға барҙың
Ноябрҙең шыҡһыҙ кисендә.
Һин бит фронт юлдарын үткән һалдат,
Күпме көс бар ине үҙеңдә.

- Фронт һалдаты булып еңә алдым
Хәтәр көсөн дошман яуының.
Фронтта миңә еңелерәк ине,
Бында мин көрәшеп арыным.

Һин дә ябай һалдат, дуҫҡайым,
Тик белмәйһең дошман боҫҡанын.

* Күренекле рус шағирәһе. 1991 йылдың 21 ноябрендә үҙ ирке менән яҡты донъянан китә.

### Ете ир-уҙаман ҡаршыһында

(Фәрештәме улар, бәйғәмбәрме?)
Изге бурысымды үтәнем.
Дөрөҫ аңланыммы ишараны?
Улар баһаһын мин көтәмен.

**Май 2014 йыл.**

БЕР ҺҮРӘТКӘ ҠАРАП...

# ТӨШТӘР...

## ысынбарлыҡҡа бәйле



**"Бер һүрәткә ҡарап" тигән конкурсҡа тәҡдим ителгән "Төш" картинаһына Әлфиә Зәбдинова (№18, 2014) бик ентекләп анализ эшләгән. Уға өҫтәп әйтер һүҙ ҙә юҡ кеүек. Тик уның Хәтип Фазыловтың "Төш" картинаһы сюрреализм йүнәлешендә яҙылған тиеүе генә мине уйға һалды. Рәссамдың үҙенә лә биргем килә ошо һорауҙы: һеҙ үҙегеҙҙе реалист тип иҫәпләйһегеҙме, әллә сюрреалистмы?**

Төштәрҙе, улар ысынбарлыҡты сағылдырғанға күрә, бер нисек тә сюрреализм тип атап булмайҙыр. Беренсе класта күргән төшөм әле булһа ла иҫемдә. Балаларҙың иң тәүҙә ҡыҙыл төҫтәге ҡәләме бөтә, сөнки матур булғанға, ул ҡәләмде күберәк ҡулланаһың. Ҡыҙыл ҡәләмем бөткәс, өр-яңы ҡыҙыл ҡәләм таптым, тип төш күрҙем. Эй шатландым, шулай ҙа был бит төш, уянһам, ҡәләмем юҡ булыр, тип, ҡәләмде усыма ныҒыраҡ йомдом. Тап шул ваҡыт мине Факиһа әхирәтем уятты. Ауыртҡансы йомған усымды асһам, ҡәләм юҡ. Яҫтыҡ аҫтында ла юҡ. "Эх, төшөмдә өр-яңы ҡыҙыл ҡәләм тапҡайным..." - тигәйнем, балалар күмәкләшеп көлөргә тотондолар. Төштән бер нәмәне лә алып сығып булмай икәнлеген тағы бер ҡат аңланым шунда. Эйе, төш менән ысынбарлыҡ тығыҙ бәйле. Үҙгәртеп ҡороуҙар, баҙар иҡтисады башланған йылдарҙа уларҙы аңламай, күнегә алмай йөрөгәнемдә бер үк төш күреп яфаландым. Аҙашып, ҡараңғы бер туҡталышта ҡайһы яҡҡа китергә белмәйенсә йонсойом, имеш.

Ә рәссамдар тормошто нисек тоя, шулай ижад итә. "Төш" картинаһының да реализм йәки сюрреализм йүнәлешендә яҙылыуы хаҡында бәхәсләшмәҫ өсөн белгестәрҙең фекерен дә тыңлау ҡыҙыҡлы булыр ине. Былтыр гәзиттә Таңһылыу Баһауетдинованың (№48, 2013 й.) "Монармы? Параллель донъямы?" тигән мәҡәләһе төрлө бәхәстәр тыуҙырҙы. Уға шағирыбыҙ Рәшит Шәкүр "Бөрйән мөғжизәһе" тигән шиғыр ҙа бағышланы. Аҙаҡ БДУ-ның Сибай институтының өлкән уҡытыусыһы Зилидә Шәрипова был күренеште ябай ғына итеп, ғилемгә таянып аңлатып яҙғайны, тынысландыҡ.

Кеше аңлай алмаҫтай әҫәрҙәрҙе Мостай Кәрим "шаҡҡатыризм" тип атай ине. Сюрреалистарҙың хыялы инде ул кешене шаҡ ҡатырыу. Ә "Төш" картинаһы тик һоҡланыу хисе генә уята. Унда саф баланың хыялы сағылдырылған. Ғөмүмән, рәхмәт "Киске Өфө"гә "Бер һүрәткә ҡарап..." тигән рубрика асып, гәзит уҡыусылар иғтибарын рәссамдар ижадына йәлеп итеүенә. Сөнки был ижад барыбер ҙә ябай халыҡ иғтибарынан ситтәрәк ҡала бит.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

*✓ Һыуһау тойғоһо беҙ 1-2 процент шыйыҡлыҡты юғалтҡас ҡына барлыҡҡа килә. Әммә был ваҡытҡа организмда кире эҙемтәләр башланған була. Бындай хәл килеп тыумаһын өсөн көнөнә 2 литр һыу эсергә кәрәк.*

*ИНТЕРНЕТТАН*



# КӘЙЕФЕҢ БУЛМАҺА... һыу эс

■ British Medical Journal журналы асыҡлауынса, фармацевтик компаниялар матди килем алыу өсөн "уйлап тапҡан" ауырыуҙарҙың һаны 200-ҙән ашып киткән. Был дарыуҙарҙың күбеһе организмын йәш итеп һаҡлап ҡалырға теләүсе хәлле кешеләр өсөн тәғәйенләнгән. Иң күп "ауырыуҙар" Америкала уйлап табыла. Мәҫәлән, әгәр ҙә мәктәптә бала үҙен әүҙем тота, күп йүгерә һәм уҡырға теләмәй икән, мәктәп психологы уға хроник психик ауырыу менән яфалана тигән диагноз ҡуя һәм табип уға мотлаҡ транквилизаторҙар һәм стимуллаштырыусы дарыуҙар тәғәйенләй. Дөйөм алғанда, Америкала йәшәүсе һәм "әүҙем тормош" алып барыусы һәр икенсе кеше антидепрессант курсы үтә икән. Ә Рәсәйҙә был ысул менән башлыса косметик компаниялар аҡса эшләй.

■ Коннектикут университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, организмға һыу етешмәй башлаһа, шунда уҡ кәйеф насарая, көсһөҙлөк барлыҡҡа килә, фекерләү ҡеүәһе түбәнәйә. Тикшереүҙәрҙең етәксеһе профессор Лоренс Е. Армстронг фекеренсә, ял иткәндә лә, компьютер алдында ултырғанда ла гел генә һыу эсергә ғәҙәтләнеү яҡшы. "Һыуһау тойғоһо беҙ 1-2 процент шыйыҡлыҡты юғалтҡас ҡына барлыҡҡа килә. Әммә был ваҡытҡа организмда һыуһыҙлыҡ һөҙөмтәһендә кире эҙемтәләр башланған була", - ти профессор. Бындай хәл килеп тыумаһын өсөн көнөнә 2 литр һыу эсергә кәрәк.

■ Һабында һәм башҡа гигиена саралары составындағы химик антибактериаль өҫтәмәләр ғүмер оҙайлығын ҡыҫҡарта. Ҡомаҡтарҙа үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, имеҙеүсе инә ҡомаҡ антибактериаль өҫтәмәләрҙең береһенә - трихлокарбан тәьҫиренә дусар ителһә, уның балаларының ғүмере ҡыҫҡа була. Инә ҡомаҡтарҙы ике төркөмгә бүлеп, бер төркөмдөң аҙығына трихлокарбан өҫтәгәндәр. Уларҙың ҡанындағы был матдә 0,6 процент булған, 15 минут душ ингәндән һуң кешенең ҡанында был матдәнең күләме лә ошо һанға тиң. Химик өҫтәмә менән туҡланған ҡомаҡтарҙың ғүмер оҙайлығы кәмерәк булғанлығы асыҡланған. Химикат ата ҡомаҡтарҙың енси ағзалары үҫешенә лә насар йоғонто яһай.

■ Томат һәм ҡыҙыл бороста "бәхет гормоны" - серотонин күп. Кетчуптың шулай уҡ яман шештәргә ҡаршы тороу үҙенсәлеге лә бар, был аҙыҡты яратыусылар йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренә лә бирешеп бармай. Составында ликопен тигән көслө антиоксидант булыуы ла томатты файҙалы ризыҡтар исемлегенә индерергә мөмкинлек бирә. Ликопен яман шешкә тәьҫир итеү көсөнә эйә, ул үҫемлек майы менән яҡшыраҡ үҙләштерелә. Тап ликопен томатҡа сағыу төҫ бирә лә инде. Фруктоза, глюкоза, шулай уҡ минераль тоҙҙар - магний, йод, цинк, натрий, тимер, марганец, А, В2, В6, К, РР, Е витаминдары нервы системаһы эшмәкәрлегенә лә яҡшы йоғонто яһай. Томаттың ҡабығы ашҡаҙан-эсәк юлдары эшен әүҙемләштерә, орлоҡтары ҡанды шыйығайтыусы матдәгә бай, һөҙөмтәлә, тромбоз барлыҡҡа килеү хәүефе түбәнәйә. Томат ни тиклем яҡшыраҡ бешкән булһа, унда файҙалы матдәләр ҙә күберәк була. Шулай уҡ ҡыҙыл томат һарыһына ҡарағанда күпкә файҙалыраҡ.

*ХӘТЕРКИТАП*

**Баймаҡ районы Темәс ауылында йәшәүсе Мәҡсүтовтар ғаиләһен яҡташтары эшһөйәр, алсаҡ, ярҙамсыл, кеселекле булыуҙары өсөн ныҡ ихтирам итә. Уларҙың кемеһен генә алма, һәр ғаилә матур итеп донъя көтә, тырыш хеҙмәт өлгөһө күрһәтә. Мәҫәлән, тракторсы Ринат Мәҡсүтовтың нисек итеп бесән сапҡанын күрһәгеҙ ине! Ул сапҡан яландарҙы футбол яланы тиерһең - ул урын тип-тигеҙ ятып ҡала. Ҡорҙаштары Ринат Мәҡсүтовты, йәш сағында бик көслө саңғысы ине, тип тә хәтерләй. Уның ике улы ла мәктәп йылдарында йүгереү-һикереүгә шәп ине. Ҡыҫҡаһы, эшкә талымһыҙ, көслө, йор һүҙле кешеләр улар, Мәҡсүтовтар. Бындай күркәм сифаттар рус-япон, Беренсе донъя һуғыштары яугиры Оморҙаҡ олаталарынан килә икән. Әйткәндәй, уның тураһында улы - Мөжәүир олатай яҙып ҡалдырған яҙмалар бәйән итә. Түбәндәге мәғлүмәттәр Оморҙаҡ олатай иҫән саҡта уның үҙенең һүҙҙәренән яҙып алынған. Бөгөнгө көндә хәтирәләрҙе ҡағыҙға теркәгән Мөжәүир олатай ҙа был донъяла юҡ, шулай ҙа уның яҙғандары бөгөн дә бик сағыу, актуаль яңғырай. Тыумышы менән Байым ауылынан булған Оморҙаҡ Мәҡсүтов тураһындағы был яҙмалар бөгөн Мөжәүир олатайҙың ҡыҙы Венера инәйҙә һаҡлана.**



# НЕМЕЦТАРҘА ӘСИРЛЕКТӘ

## Һуғыш - уйын эш түгел

Атайым Оморҙаҡ Мәҡсүтов мәргән һунарсы ине. Һыҙма мылтығын тәүҙә йыуып, аҙағынан майлап ҡуйыр, бик ҡәҙерләп тотор, ҡайһы саҡта алыҫҡа ағас сәп ҡуйып, шуға атып тейҙереп, беҙгә оҫталығын күрһәтер ине. Һунарсылыҡтың ғына түгел, башҡа шөғөлдәрҙең дә рәтен яҡшы белгән ипле лә, ҡеүәтле лә кеше ине ул: йәш саҡтан бураһын да бураған, мейесен дә сығарған. Тыныс тормошто ғына түгел, бер түгел, ике һуғышты ла күргән атайыбыҙ.

Рус-япон һуғышынан имен-аман әйләнеп ҡайтыуына, 1914 йылда Беренсе бөтә донъя һуғышы башланып китә. Бөтөн ҡорҙаштары кеүек үк, атайым Оморҙаҡты ла һуғышҡа алалар. Һуғыш бер кемде лә аяп тормай. Аҙым һайын тиерлек үлтереш, үлем менән күҙмә-күҙ осрашыу егеттәрҙе ахыр сиккә еткереп, миктәтә. Мәғәнәһеҙ ҡан ҡойоште ҡабул итә алмайынса, был донъянан үҙ ирке менән китеүселәр ҙә ифрат күп була. Мәҫәлән, бер ваҡыт атайҙы ялан кухняһынан аш алып килергә ебәрәләр. Шыуышып, егеттәрҙең барыһына ла етерлек аш алып килһә, баяғы урында иптәштәре юҡ икән. Тирә-яҡҡа ҡарана торғас, алыҫ түгел бер урында төтөн шәйләп ҡала һәм шул яҡҡа ҡарай шыуышып бара. Ни күҙе менән күрһен: әле күптән түгел генә һин дә мин йөрөгән егеттәр, аһ та уһ килешеп, тәгәрәшеп яталар. Тәмәке ҡайнатып эсеп, үҙҙәрен-үҙҙәре ағыулаған икән бахыр малайҙар. Атай килеүгә, күбеһе үлгән була. Бер-нисә һалдат санчасҡа оҙатыла. Шулай харап иткән ҡайһы бер ир-егеттәр үҙҙәрен. Ошолар тураһында ишеткәс, һуғыш тигән нәмәнең ни тиклем сыҙап торғоһоҙ хәл икәнлегенә төшөнәһең...

## Әсирлектә

Бер ҡалала дошмандар утҡа тотҡан бер бина эсенән кешеләрҙең төргәк-төргәк әйберҙәр сығарып, үртәп йөрөүен күреп ҡалалар. Атай шул төргәктәрҙең бер бәләкәйерәген моҡсайына һалып ала. Һала ла, онота. Теге төргәк моҡсайында йөрөй бирә. Бер ваҡыт атайымдар бик ҡаты бәрелеш ваҡытында ҡамауға эләгә, әсирлеккә төшә, артабан Германияға оҙатыла. Бик күп урындарҙа бил бөгөргә тура килә әсирлектәге рус һалдаттарына. Атайым шахтала эшләй. Көндәрҙән бер көндө моҡсайында ятҡан баяғы төргәк күҙенә салына. Асып ебәрһә, төргәктә алтын тәңкәләр ята, ти. Шуға саҡлы алтын тигән нәмәне бер тапҡыр ҙа күргәне булмағас, төргәк эсендә ни ятҡанын аңлай алмай атай. Берәүһен ала ла, урындағы бер кибеттең һатыусыһына күрһәтә. Һатыусы был тәңкәнең алтын тәңкә икәнен әйтә, шунан ул тәңкә өсөн бик күп әйбер, ризыҡ бирә атайға. Магазиндан "байып" ҡайтҡан атайым иптәштәрен һыйлай, хәлде аңлатып бирә. Ошо көндән башлап атайҙы шахта эшенән бушата иптәштәре, улар эштән ҡайтыуға аш бешереп ҡуйыу бурысы ғына йөкмәтелә. Күрәһең, төргәктә алтын күп тә булмағандыр инде, тиҙҙән улары ла бөтә. Һуғыштан һуң бик күп йылдар үткәс һөйләгәйне атайым минә ошо хаҡта, шул төргәктәрҙе күберәк алмағанына үкенеп тә ҡуйғайны.

*ҠАТЫН-ҠЫҘ ҠОЛАҒЫНА*



# СИРАТТАҒЫ ЗАМАНА СИРЕМЕ, әллә көйһөҙлөк ғәләмәтеме?

**Йәшәй-йәшәй ниндәй генә яңы һүҙҙәр ишетмәйбеҙ. Был терминдарҙың ҡайһы берҙәре тормошта үҙ урынын табып, төпләнеп ҡала, ә икенселәре иһә, нисек килеп ингән, шулай юҡҡа ла сыға. Һуңғы йылдарҙа көнбайыштан килеп ингән "шопоголик" тигән һүҙ менән дә күптәр таныштыр. Төрлө фекерҙәр йөрөй уның хаҡында. Сираттағы замана сире, тиеүселәр ҙә, бәхет гормоны - серотонин кимәлен күтәреүсе, тип уйлаусылар ҙа бар.**

Шопоголизм - нимәне булһа ла һайлап та тормайынса һатып алыу теләге. Уны икенсе төрлө шапомания, шопингомания тип тә атайҙар. Шопоголизм XX быуатта, ҙур-ҙур магазиндар асылып, акциялар, ташламалы һатыуҙар башланғас ҡына килеп сыға. Яйлап был "сир" үҙенә күберәк ҡорбандар йәлеп итә башлай. Бында рекламаларҙың, маркетологтарҙың һәм психологтарҙың да хеҙмәте ҙур. Нәҡ ошо белгестәр кешеләрҙә ниндәйҙер әйберҙе һатып алыу менән үҙеңде бәхетле, хаким итеп тойоу иллюзияһын уйлап табырға тырыша, шуның өҫтөндә көсөргәнешле эш алып бара. Шулай уҡ бында билдәле модельерҙарҙың, голливуд йондоҙҙарының нимәгә өҫтөнлөк биреүен көнө-төнө рекламалаған зәңгәр экрандарҙын да роле ҙур.

Шуныһы ҡыҙыҡ, һатып алған әйберҙәр ни өсөн шул тиклем шатлыҡ килтерә һуң? Эйе, килешмәйенсә булмай, кеҫәңә аҡса һалып, магазиндар буйлап йөрөгәндә кәйеф күтәрелә, хәүефле уйҙар юғала, үҙеңде яҡшыраҡ тояһың һымаҡ. Бынан тыш, ҡиммәтле магазиндарҙа нимәлер һатып алыу күптәрҙең үҙбаһаһын күтәрә, улар фекеренсә, йәмғиәттә хөрмәт, абруй яуларға ярҙам итә. Был, бәлки, кейеменә ҡарап ҡаршы алалар, тигән фекерҙең нығыныуынан да киләлер, сөнки нимә генә тиһәк тә, тәү сиратта кешенең өҫ-башына иғтибар итәбеҙ бит.

Кескәй саҡтан уҡ оҡшаған бөтә нәмәгә лә эйә булыу, йә иһә, киреһенсә, үҙеңдә булмаған кеше әйберенә һәр саҡта ла ҡыҙығып, көнләшеп ҡарау ҙа шопоголик булып китеүгә сәбәп булыуы бар. Шулай уҡ тормошта үҙ урыныңды тапмау, карьера эшләй алмау, буш ваҡытыңдың күп булыуы ла ошо уҡ эҙемтәләргә килтереүе мөмкин.

**Ғалимдар тәртибенә, үҙ-үҙен тотошона ҡарап, шопоголиктарҙың шундай төрөн асыҡлаған:**

**Аңлы шопоголик.** Бындайҙар шопоголизмдың бер насарлығын да күрмәй, махсус рәүештә, күңел күтәреү, ыңғай эмоциялар алыу, стресс бөтөрөү өсөн магазиндар буйлап йөрөй.

**Уйламағанда эш итеүсе шопоголик.** Улар үҙҙәрен шопоголик тип һанамай. Магазинға ла алдан төҙөлгән исемлек менән генә йөрөй. Ләкин кәрзиненә "ташламалы хаҡтар" тип яҙылған кәштәнән планлаштырылмаған берәй әйбер ырғытыуҙан тыйыла алмай.

**Маҡсатһыҙ шопоголик.** Улар әллә күпме аҡсаһын маҡсатһыҙ әйберҙәргә тотона, икенсе эш хаҡына тиклем нисек йәшәре тураһындағы уй башына ла инеп сыҡмай.

**Аңһыҙ шопоголик.** Бындайҙар көндәлек тормошта кәрәкле әйберҙәрҙе генә һатып ала, ләкин алғаны кәрәгенән артыҡ күп була. Ғәҙәттә, ундайҙар "Бер хаҡҡа - ике әйбер", "Һатып

## Мунса янһа, янһын...

Әсирлеккә эләккән рус һалдаттарының һау-сәләмәттәрен, эшкә талымһыҙыраҡтарын һайлап алып, немец алпауыттарына эшкә ебәрәләр. Атай ҙа бер байҙың күҙенә салына һәм үҙе кеүек өс әсир егет - ике башҡорт һәм бер украин егете менән бергә Мюнхен ҡалаһына бер биләмәгә барып эләгә. Алпауыт бик етеш йәшәй. Кешелек сифаттары буйынса ла һүҙ тейҙерерлек түгел, әсирҙәрен бер ҙә ҡыйырһытмай - Икенсе донъя һуғышындағы фашистарға хас тәккәбберлек һымаҡ кире сифаттар күҙәтелмәй әле немец халҡында. Әлбиттә, тәүге осорҙа уларҙан күҙ яҙлыҡтырмаҫҡа ҡуша, шулай ҙа әкренләп, хәүеф юҡлығын тойоп, эшселәренә бер аҙ иркенлек бирә.

Алпауыттың тағын бер сифаты - теүәллек һәм диндарлыҡ була. Һәр ваҡыт тәғәйен ваҡытта әсирҙәренә иртәнге, төшкө һәм киске аш ашата ул. Диндарлығына килгәндә, ашағас, доға ҡылмайынса бер кемгә лә өҫтәл артынан тороп китергә рөхсәт итмәй. Байҙың был талапсанлығы бер көн уның үҙенә зыян да килтерә. Былай була: күмәкләп ашап ултырғанда бер ваҡыт байҙың мунсаһы дөрләп яна башлай. Әсирҙәр аштарын ҡалдырып, утты һүндерергә уйлаһа, хужа: "Башта ашығыҙҙы ашап бөтөрөгөҙ, доға ҡылығыҙ, унан һуң торорһоғоҙ", - тип ҡырт киҫә. Талаптарҙы үтәп, йүгереп барһалар, мунса янып бөткән була...

## Һаумы, ирек!

Атай немец телендә бик яҡшы һупаларға өйрәнеп ала. Эшкә шәп, мыҡты кәүҙәле матур егеткә алпауыттың бер ҡыҙының күҙе төшә. Алпауыттың өс ҡыҙының ҡайһыныһы менән ғишыҡ уты тотошҡандыр атайым, уныһы миңә ҡараңғы.

Ҡасыу планы әҙерләй башлайҙар. Бик ентекле әҙерләнәләр. Ҡараңғы төндә өсөнсө ҡатта урынлашҡан йоҡо бүлмәһенән дүрт кеше арҡан менән төшә, ә атай ишектән сығасаҡ, тип ниәт итәләр. Ниһәйәт, өс башҡорт һәм бер украин егете ҡасырға әҙер була. Бөтөн кәрәк-яраҡтарҙы теүәлләгәс, планды тормошҡа ашыралар - алпауыттың өйөнән һиҙҙермәй генә сығып ҡасалар. Алдан һөйләшелгәнсә, бөтәһен дә арҡан менән төшөргәндән һуң, атай ишектән сыға. Ҡасыу планы тураһында хәбәрҙар алпауыт ҡыҙы атайҙы үбеп оҙатып ҡала. Таң һарыһы беленмәҫ элек бер йылғаны аша сығыу бурысы тора хәҙер ҡасҡындар алдында. Һыуҙы йөҙөп, имен-аман сығалар ҙа, бер һаҙлыҡҡа килеп етәләр. Көн яҡтыһында хәрәкәт итеүҙең хәүефен аңлап, һаҙлыҡта йәшеренәләр. Күп тә үтмәй, һаҙлыҡ өҫтөндә бер аэроплан өйөрөлөп йөрөй башлай. Әммә ҡасҡындар ныҡ йәшеренгән була, эҙләүселәрҙең күҙенә салынмай. Самолет киткәс, ҡасҡындар көнсығышҡа ҡарай йүнәлә. Ҡараңғы төшкәс, ут яғып, өҫ-башты киптерергә уйлап, ут ҡабыҙалар. Усаҡ йылыһында ултырған саҡта әсе һыҙғырыу ишетелә һәм былар ултырған урындан саҡ ҡына арыраҡ бер снаряд төшөп ярыла. Атайҙың кәңәшен тотоп, барыһы ла артҡа ҡарай йүгерә. Бер-нисә секунд үтеүгә, усаҡ янына тағы бер снаряд төшә. Снарядтар шартлауы баҫылғас, дүрт һалдат төндәрен көнсығышҡа табан барыуҙы дауам итә. Көн яҡтыһында берәй ышыҡ урында йәшеренеп яталар. Ниһайәт, Дунай йылғаһына етәләр. Дунай - бик ҙур, киң йылға: былай ғына йөҙөп сығырлыҡ түгел - батып үлеүең бар. Үҙ-ара кәңәшләшеп алғас, яр буйлап йөрөп, бүрәнә кеүек нәмә эҙләй башлайҙар. Эҙләй торғас, һалынып бөтмәгән бер бураға юлығалар. Бураның 5-6 бүрәнәһен бергә бәйләп, һал яһайҙар. Һалға ултырып, йөҙөп китәләр. Тик көслө ағым һалды йылға уртаһындағы бер һай урынға килтереп һуға. Һалды сығарырмын тимә - ауыр. Ни эшләргә белмәй торғанда атайҙың башына уй килә. Ул бик оҫта йөҙгән була. Үҫмер сағын иҫкә төшөрөп, арғы ярға таш ташлап ҡарай. Ташы ярға барып етә яҙа. "Таш барып еткән ергә тиклем йөҙә алам мин", тип, биленә бау бәйләп, ул бауҙың осон иптәштәренә тоттороп, йөҙөп китә. Теге ярға барып етеп, ҡоро ергә аяҡ баҫа ла, иптәштәрен берәм-берәм бау менән тартып, ярға һөйрәп сығара башлай. Украин кешеһе иң артта ҡала. Шул саҡта бер башҡорт: "Хохолды ҡалдырайыҡ шунда, беҙгә йөк булып йөрөмәһен, әйҙә", - тип ҡоторта. Ләкин атай уға ҡаршы сыға: "Кем бәхете менән йөрөйбөҙҙөр, әле һаман иҫән-һаубыҙ. Бәлки, уның бәхете йөрөтәлер беҙҙе?" - тип яуап бирә. Баһадир кәүҙәле атайҙың әйткәне һәр саҡ закон тип ҡабул ителә. Украин егетен дә сығарып алып, юлды артабан дауам итәләр.

Күп михнәттәр, ыҙалар күреп, ниһайәт, Австрияны үтеп, Украина еренә аяҡ баҫа дүрт ҡасҡын. Шунан украин егетенең ауылына юлланалар. Бәхеткә күрә, украин егетенең ауылында ата-әсәһе лә, балаһы менән ҡатыны ла иҫән була. Өс көн буйы быларҙы ҡунаҡ итәләр, өс көн буйы илау-һыҡтау тынмай. Башҡорттарҙы мунса индереп, яңы кейемдәргә кейендереп, илашып, мең рәхмәттәр уҡып, оҙатып ҡалалар. Ауыл артта ҡалғас, атай теге ҡара эсле юлдашына: "Әгәр хохолды күрәләтә үлемгә ҡалдырып киткән булһаҡ, был тиклем бәхетте күрмәҫ инек бит", - тип әйтә. Шулай итеп, атайымдар 1919-1920 йылдар тирәһендә генә ауылдарына ҡайтып төшәләр. Ләкин атайҙы өйҙә ҡара ҡайғы көтөп тора - һуғышҡа тиклем алған ҡатыны, ҡыҙ балаһын ҡалдырып, донъя ҡуйған була.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Бөйөк Ватан һуғышынан ҡайтып, Түбә руднигында эшләүсе бер ағайҙың да Мюнхендағы шул уҡ алпауытта әсирлектә булыуын белеп ҡалғас, атайым уға ҡунаҡҡа барҙы. Теге ағай атайымды алпауыт биләмәһендәге һуңғы яңылыҡтар менән таныштырған. Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында алпауыттың берҙән-бер улы һуғышта һәләк булған, ә өс ҡыҙы ул мәлдә иҫән булған әле...**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ әҙерләне.**

алһаң - бүләк" тигәнерәк маркетинг хәйләләргә бирелеп барыусан.

**Ысын шопоголик.** Бындайҙар магазинда нимә оҡшай, бөтәһен дә кәрзиненә һала.

Шопоголиктарҙың ыңғай яғы ла бар. Улар тәү ҡараштан уҡ мамыҡты полиэстерҙан, синтетиканы йөндән айыра, моданың иң һуңғы яңылыҡтарын, ярлыҡтағы аңлашылмаған яҙыуҙарҙың, тамғаларҙың мәғәнәһен белә, ундағы штрих-кодтарҙы уҡый. Улар һәр саҡта ла әйберҙең етештерелгән һәм һаҡлау срогын тикшерә, продукцияның составын, буласаҡ ташламаларҙың ҡасан, ҡайҙа булырын яҡшы белә. Сумкаһында ташламалы хаҡ менән ала торған бер нисә дисконт-картаһы була.

Күптәрҙе магазиндар буйлап, аҡса туҙҙырып йөрөүгә үҙенде төшөп ҡалғандарҙан түгел, хәлле, бер проблемаһыҙ кеше итеп күрһәтеү теләге лә этәрә. Бөгөн, замандың мода индустрияһы нисек булһа ла күберәк һатып алыусы эләктерергә тип янғанда, шопоголиктар улар өсөн майлы киҫәк.

**Шопоголиктар өсөн бренд ҡапҡандар:**

Үҙенең социаль статусын күтәрергә теләүселәр Кристиан Диор, Версачи, Дольче Габбана һ.б. билдәле брендлы әйберҙәр генә алырға тырыша. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ғәҙәттә, иң модалы кейем кейеп, брендлы косметика менән ҡулланыусыларҙың күбеһе кеше фатирында аҡса түләп йәшәй. Бындай фанаттарҙы тағы ла нығыраҡ ылыҡтырыу өсөн маркетологтар, психологтар ҙа йоҡламай һәм кеше иғтибарын йәлеп итерлек, сифаты, моделе юғары баһаланған нимәлер уйлап табыу өҫтөндә көнө-төнө баш вата.

Ат хаҡына ниндәйҙер брендлы әйбер һатып алыуға һуңғы тиндәрендә тыҡҡансы, ябай ғына фабрикала, шөһрәтле исемдәре лә булмаған ғәҙәти генә тегенсенең кейеме нимәһе менән насар һуң? Кеҫәһе ҡалындар ни өсөн бындай әйберҙәргә түбәнһетеп ҡарай? Мәсьәләнең төбөнә нығыраҡ төшһәң, бында әллә ни шаҡ ҡатырырлыҡ нәмә юҡ. Ысын дизайн менән бөтә шартына килтереп тегелгән кейем - ул оҙайлы хеҙмәт, ижади уйланыу. Бындай моделдең эскизын төҙөү ҙә бик мәшәҡәтле, яуаплы эш. Билдәле булыуынса, бындай әйберҙе үҙ эшенең ысын оҫтаһы булған кеше генә тегә ала. Кейем әҙер булғас та, уны билдәле итеү өсөн моделдәргә, рекламаға бик күп аҡса сарыф итергә тура килә уға. Киткән сығымдар, түгелгән хеҙмәт үҙен аҡларға тейеш, әлбиттә. Бында инде ғүмергә лә туҙмаҫлыҡ, буяуы уңмаҫлыҡ, баһаһы һәм сифаты күптәргә билдәле булған әйбер алып, башҡаларҙан айырылып торорға теләүселәрҙең ҡалын кеҫәһе ярҙамға килә. Ошо юлдарҙы яҙғанда бер таныш ирҙең һөйләгәндәре иҫкә төшә:

-Эш хаҡым күпкә ҙур - тигәйне ул.- Ҡатыным да эшләй. Ләкин икәүһенең эш хаҡы минеке ҡәҙәре лә булмаған ғаилә дуҫтарыбыҙҙың һәр ваҡыт аҡсаһы бар, беҙҙеке икенсе айға ла етмәй тотонолоп бөтә. Кәрәк булғанда уларҙан бурысҡа аҡса алып торабыҙ. Минең ҡатында иң ҡыйбатлы косметика, сумка һәм кейемдәр булһа ла, дуҫымдың ҡатынынан бер ере менән дә айырылмай. Был турала әйтһәң, "Был бит ябай магазиндан йәиһә баҙарҙан алынған әйбер түгел, ә фирменный, 5 меңлек!" тип, йоҡаҡ ҡына еңһеҙ кофтаһын сығарып күрһәтә. Кофтаһының бер матурлығын да тапмайым. Ниндәй генә сифатлы булмаһын, кем генә текмәһен, уны бер-ике кейәсәк тә ырғытасаҡ. "Хаҡын белһәләр, эштә шартлаясаҡтар", тип кинәнеп һөйләнеүенең дә бер файҙаһын да күрмәйем. Бер ваҡыт шулай ҡунаҡҡа барҙыҡ. Минең ҡатында быйыл ғына алынған шәшке, ә дуҫтың ҡатынында һыуыр тиреле (сурок) тун. Барыһы ла дуҫымдың ҡатынына: "Ҡасан бындай матур шәшке тун алырға өлгөрҙөң?"- тигән һорау менән ябырылды. Ҡайтҡас, минең ҡатындың туҙыныуын күрһәгеҙ. "Шәшкене һыуырҙан айыра алмаған наҙандар", тип әрләшә. Мин шуға аптырайым, тундарҙың сифатын айырып булмағас, нимә өсөн уның иң ҡыйбатлыһын алырға һуң?..

Аҡсалының ҡулы, аҡсаһыҙҙың күҙе уйнай, тигән кеүек, һәр кем кеҫәһенә ҡарап эш итә. Кемдер иң ҡыйбатлы кейем менән үҙен күрһәткеһе, башҡаларҙың иғтибарын йәлеп иткеһе килә, икенсе берәү иһә әллә ни юғарыға ынтылмай, булғанына шөкөр итеп йәшәй. Ҡалай ғына булмаһын, юрғанына ҡарап эш итеүҙән дә ҡулай, отошло нәмә юҡтыр - күңелең дә тыныс, кеҫәңдә аҡсаң да етерлек.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

### Инициативалылыҡ

Лидерҙар үҙ артынан эйәреүселәр менән тығыҙ бәйләнеш өсөн яуаплылыҡ тоя. Әммә был лидер инициатива күрһәтергә тейешле берҙән-бер өлкә түгел. Улар һәр саҡ яңы мөмкинлектәр эҙләргә һәм нимәлер эшләргә әҙер булырға тейеш.Теләктәре һәм ихтыярҙары буйынса ниндәйҙер мөһим ваҡиғалар тормошҡа ашһын өсөн лидерҙар ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш? Иң мөһим дүртәүҙе ҡарап үтәйек.

**● Лидерҙар нимә теләгәндәрен белә**

Пианист Оскар Левант бер ваҡыт шулай тигән: "Ниндәйҙер ҡарар ҡабул итеүем була, ҡыйыуһыҙлана башлайым". Үкенескә күрә, бик күптәргә хас был күренеш. Әммә бер үк ваҡытта йоғонтоло ла, ҡыйыуһыҙ ҙа булыу мөмкин түгел. Наполеон Хилл әйтмешләй, "барлыҡ ҡаҙаныштарҙың башы - көслө теләк". Әгәр һеҙ йоғонтоло лидер булырға ниәтләһәгеҙ, нимә теләгәнегеҙҙе аныҡ белергә тейешһегеҙ. Был - уңайлы мөмкинлекте ваҡытында күреп, ул барлыҡҡа килеү менән уны ҡулдан ысҡындырмауҙың берҙән-бер ысулы.

**● Лидерҙар үҙҙәрен дәртләндерә**

Шундай боронғо аҡыл бар: "Әгәр теләһәң - булдыраһың". Инициативалы кешеләр үҙҙәрендә дәрт уяныуын көтөп ултырмай. Улар өйрәнелгән уңайлы зонанан сығыу өсөн үҙенде мәжбүр итергә кәрәклеген яҡшы белә һәм бындай аҙымды көндәлек ғәҙәтенә индерә. Шуға күрә Теодор Рузвельт кимәлендәге кеше түбәндәгесә әйтергә хаҡлы: "Минең тарихымда, үҙемдең инаныуым буйынса, эшләргә кәрәк булған эште ысынлап та эшләүемдән башҡа бер ниндәй сағыу нәмә юҡ... Миндә нимәнелер эшләү хаҡында ныҡлы фекер барлыҡҡа килһә, мин ҡыбырлай башлайым".

**● Лидерҙар ҙур хәүефкә әҙер**

Хатта лидерҙар нимә теләгәндәрен белеп, үҙҙәрен шуны эшләргә мәжбүр иткәндә лә, уларҙы алда тағы ла бер ҡаршылыҡ көтә. Ул - хәүефкә барырға әҙер булмау. Ваҡиғаларҙан алда булырға теләүсе әүҙем лидерҙар һәр саҡ хәүеф менән уйнай. Әммә ни өсөн яҡшы лидерҙар хәүефте еңерлек ихтыяр көсөнә эйә булыуҙың бер сәбәбе - инициатива булмаған өсөн дә ҙур хаҡ түләргә кәрәклекте аңлау. Джон Кеннеди шулай тип раҫлаған: "Һәр программаны тормошҡа ашырыу сығымдар талап итә һәм хәүефле. Әммә улар үҙенде уңайлы тойоп, бер нәмә лә эшләмәгәнгә ҡарағанда күпкә кәмерәк".

**● Лидерҙар күберәк хаталана**

Инициативалы кешеләр өсөн шәп яңылыҡ: төрлө файҙалы нәмәләр уларҙың ихтыяры менән эшләнә. Яңылыҡтың насар яғы шунда: лидерҙар күберәк хаталана. Был хаҡта Томас Дж. Уотсон бына нимә ти: "Уңышлы булыу өсөн уңышһыҙлыҡтарыңдың йышлығын икеләтә арттырырға кәрәк". Яңы эш башлаған лидерҙар бик йыш уңышһыҙлыҡҡа тарыуына ҡарамаҫтан, уларға был хаҡта артыҡ борсолорға кәрәкмәй. Ҡеүәт ни тиклем юғары, шул тиклем хаталар ҙа күберәк. Сенатор Роберт Кеннеди был фекер буйынса шундай һығымта яһаған: "Бары тик ҙур уңышһыҙлыҡ кисерергә көс тапҡан кешеләр генә ҙур уңыш ҡаҙана". Әгәр һеҙ лидер сифатында ниндәйҙер әһәмиәтле нәмәгә өлгәшергә теләһәгеҙ, инициатива күрһәтергә, аныҡ эш башҡарырға һәм үҙаллы алғы һыҙыҡҡа сығырға тейешһегеҙ.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**



## 23 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.20 "Время обедать!"
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "На чемпионате мира по футболу-2014".
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Братья и звезды".
19.30 "Давай поженимся!" (16+).
20.30 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.50 Чемпионат мира по футболу-2014. Сборная Нидерландов - сборная Чили. Прямой эфир из Бразилии.
24.00 "Политика" (16+).
01.00 "Галина Старовойтова. Последние 24 часа" (16+).
02.00 Чемпионат мира по футболу-2014. Сборная Камеруна - сборная Бразилии. Прямой эфир из Бразилии.
04.00 "В наше время".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
9.00 "Кузькина мать. Итоги" (16+).
09.55 "О самом главном".
10.30 "Дневник чемпионата мира".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.45 "Вести-Башкортостан".
18.05 "Вести. дежурная часть".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
21.20 "Вести".
21.00 "Реальный папа". Комедия (12+).
23.55 Футбол. Чемпионат мира. Австралия - Испания. Трансляция из Бразилии.
01.50 "Сайд-степ".
03.55 Футбол. Чемпионат мира. Хорватия - Мексика. Трансляция из Бразилии.

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Илдар Ғүмәров (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Хазина". "Шәжәрә" (Борис Атанов) (6+)
15.00 "Мөхәббәтле донъя". Фәдис Ғәниев, Лилиә Биктимерова (6+)
19.00 "Эдера". Нәфис фильм. 1 серия (12+)
21.00 "Кис ултырып". Рэдик Ефремов (12+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 11.15 Новости недели (16+).**
**10.30 "Семәр".**
**10.45 "Городок АЮЯ".**
**11.00, 17.45, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**12.00, 01.00 "Графиня Де Монсоро" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости.**
**13.45, 05.30 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Тәмле". Лучшее (12+).**
**15.15 "Преград.net" (6+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Байтус".**
**16.00 "Бауырһаҡ".**
**16.15, 20.15 "Учим башкирский язык".**
**16.30, 21.30 Новости .**
**16.45 "КЛИО" (6+).**
**17.30 Новости культуры.**
**18.00 "Хазина".**
**18.45 "Волшебный курай" (6+).**
**19.15, 04.30 "Черчилль" (12+).**
**20.00, 23.45 "Весело живем" (12+).**
**20.30 "Сәңгелдәк".**
**20.45, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**22.00 "Следопыт" (6+).**
**23.00 "Телецентр" (12+).**
**23.30 "Специальный репортаж" (16+).**
**24.00 "Еду я в деревню". Лучшее.**
**02.00 Ф.Буляков "Камикадзе" (12+).**
**03.45 "Жизнь замечательных людей" (12+).**
**06.15 "Орнамент".**

## 24 ИЮНЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Единственный мой грех". Сериал (16+).
14.15 "Время обедать!"
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "На чемпионате мира по футболу-2014".
17.00 "Наедине со всеми". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Лучшее лето нашей жизни" (12+).
23.15 "Познер" (16+).
00.15 Чемпионат мира по футболу-2014. Сборная Коста-Рики - сборная Англии. Трансляция из Бразилии.
02.20 "На чемпионате мира по футболу-2014".
03.15 "В наше время" (12+).
04.00 Чемпионат мира по футболу-2014. Сборная Греции - сборная Кот-д'Ивуара. Трансляция из Бразилии. (В перерыве Новости).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
10.30 "Дневник чемпионата мира".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.45 "Вести-Башкортостан".
18.05 "Вести. Дежурная часть".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести
20.55 "За победу - расстрел? Правда о матче смерти" (16+).
21.45 Футбол. Чемпионат мира. Италия - Уругвай. Прямая трансляция из Бразилии.
23.55 "Вести".
00.40 "Специальный корреспондент" (16+).
01.45 Футбол. Чемпионат мира. Япония - Колумбия. Прямая трансляция из Бразилии.
04.00 "Кузькина мать. Итоги" (12+).

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Гүзәл Динекеева (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Әлфиә Әхмәтйәнова. Концерт (6+)
19.00 "Эдера". Нәфис фильм. 2 серия (12+)
21.00 "Йәшлек менән һөйөү ике ҡанат". Зөлхизә Илбәкова (12+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы.**
**10.30 "Зеркальце".**
**10.45 "Царь горы".**
**11.00, 17.45, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 06.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 20.00 "Весело живем" (12+).**
**12.00, 01.00 "Графиня Де Монсоро" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45, 05.30 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Тәмле". Лучшее (12+).**
**15.15 "Книга сказок".**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Борсаҡ".**
**16.00 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.15, 20.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Дорога к храму".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**18.00 "Үткән ғүмер" (6+).**
**18.45 "Волшебный курай".**
**19.15, 04.30 "Черчилль". Сериал (12+).**
**20.30 "Сәңгелдәк".**
**20.45 "Новоселье с "Радугой" (12+).**
**21.00 "Телецентр. Главный день".**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Баик".**
**24.00 "Еду я в деревню".**
**02.00 "Врачеватель поневоле" (12+).**
**04.00 "Жизнь замечательных людей" (12+).**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 25 ИЮНЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Единственный мой грех" (16+).
14.00 "Время обедать!"
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "На чемпионате мира по футболу-2014".
17.00 "Наедине со всеми". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Лучшее лето нашей жизни". Мелодрама (12+).
22.00 Чемпионат мира по футболу-2014. Сборная Боснии и Герцеговины - сборная Ирана". Трансляция из Бразилии.
02.00 Чемпионат мира по футболу-2014. Сборная Эквадора - сборная Франции. Прямой эфир из Бразилии. (В перерыве - Ночные новости).
04.00 "В наше время".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Кузькина мать. Итоги". "Атомная осень 57-го". Док. фильм (12+).
09.55 "О самом главном".
10.30 "Дневник чемпионата мира".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.45 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Вести. Дежурная часть".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.55 "Властелин мира. Никола Тесла" (12+).
21.45 Футбол. Чемпионат мира. Нигерия - Аргентина. Прямая трансляция из Бразилии.
23.55 "Вести".
00.40 "Скета". Мелодрама (16+).
03.55 Футбол. Чемпионат мира. Гондурас - Швейцария. Трансляция из Бразилии.

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Рәзифә Динмөхәмәтова (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Уйна, ҡурай". Концерт (6+)
19.00 "Эдера". Нәфис фильм. 3 серия (12+)
20.00 "Көндәлек" (6+)
21.00 "Кис ултырып". Ғәзим Ильясов (12+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы.**
**10.30 "Шатлык йыры".**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 17.15, 06.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 20.00 "Весело живем" (12+).**
**12.00, 01.00 "Графиня Де Монсоро" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости.**
**13.45 "Башҡорт йыры-2014".**
**14.15, 05.30 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Тәмле" (12+).**
**15.15 "Капитономика" (6+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Семәр".**
**16.00 "Городок АЮЯ".**
**16.15, 20.15 "Учим башкирский язык" (12+).**
**16.45 "Здоровое решение".**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Алтын тирмә".**
**18.45 "Волшебный курай".**
**19.15, 04.30 "Черчилль". Сериал (12+).**
**20.30 "Сәңгелдәк".**
**20.45, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Телецентр".**
**22.00 "Историческая среда".**
**23.00 "Башҡорт йыры-2014".**
**23.30 "Автограф. Марат Ишмухаметов" (6+).**
**24.00 "Еду я в деревню".**
**02.00 Ф.Бурнаш "Молодые сердца". Спектакль (12+).**
**03.45 "Жизнь замечательных людей" (12+).**

## 26 ИЮНЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Единственный мой грех". Мелодраматический сериал (16+).
14.015 "Время обедать!"
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "На чемпионате мира по футболу-2014".
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.20 "Время".
21.30 "Прощание". Мелодрама (16+).
24.00 Чемпионат мира по футболу-2014. Сборная Португалии - сборная Ганы. Трансляция из Бразилии.
01.45 Чемпионат мира по футболу-2014. Сборная России - сборная Алжира. Прямой эфир из Бразилии. (В перерыве - Ночные новости).
04.00 "В наше время" (12+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "От всей души".
09.55 "О самом главном".
10.30 "Дневник чемпионата мира".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.45 "Вести-Башкортостан".
18.05 "Вести. Дежурная часть".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Проклятие Тамерлана" (12+).
21.45 Футбол. Чемпионат мира. США - Германия. Прямая трансляция из Бразилии.
23.55 "Геннадий Зюганов. История в блокнотах".
01.05 "Мечты из палисадника". Мелодрама
02.55 "Кузькина мать. Итоги". "На вечной мерзлоте" (12+).
03.55 Футбол. Чемпионат мира. Корея - Бельгия. Прямая трансляция из Бразилии.

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Редик Ефремов (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Миңзифа Исҡужина дуҫтарын йыя". Концерт (6+)
19.00 "Эдера". Нәфис фильм. 4 серия (12+)
21.00 "Кис ултырып". Гөлдәр Ишҡыуатова (12+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы.**
**10.30 "Дети-герои".**
**10.45 "Цирк в 13 метров".**
**11.00, 17.45, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 17.15, 06.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 20.00 "Весело живем" (12+).**
**12.00, 01.00 "Графиня де Монсоро". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости.**
**13.45 "Башҡорт йыры-2014".**
**14.15, 05.30 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Тәмле". Лучшее (12+).**
**15.15 "Ғәләмәт донья".**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Шәп арба".**
**16.00 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.15, 20.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Живое село".**
**17.30 Новости культуры.**
**18.00 "Көндәлек" (6+).**
**18.45 "Волшебный курай" (6+).**
**19.15, 04.30 "Черчилль". Сериал (12+).**
**20.30 "Сәңгелдәк".**
**20.45, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Лото 6 из 40 + Джокер".**
**21.15 "Наука 102" (6+).**
**22.00 "Аль-Фатиха".**
**23.00 "Телецентр" (12+).**
**23.30 "Автограф" (6+).**
**24.00 "Еду я в деревню. Лучшее".**
**02.00 "Любовь под вязами" (12+).**

## 27 ИЮНЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка"
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Единственный мой грех". Сериал (16+).
14.15 "Время обедать!"
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "На чемпионате мира по футболу-2014".
17.00 "Жди меня" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.20 "Время".
21.30 "Точь-в-точь".
00.30 "Мужчина с гарантией". Романтическая комедия (16+).
02.10 "В наше время" (12+).
03.00 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00 "Утро России".
06.10, 06.35, 07.10, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
10.30 "Дневник чемпионата мира".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+),
17.00 "Вести".
17.45 "Вести-ПФО".
18.05 "Вести. Дежурная часть".
18.15 "Прямой эфир".
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Поединок". Программа Владимира Соловьева (12+).
23.15 "Удиви меня". Худ. фильм (12+).
01.15 Торжественная церемония вручения премии ТЭФИ.
03.25 "Горячая десятка" (12+).
04.30 "Кузькина мать. Итоги". "БАМ-молодец!".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Миңлеғәфүр Зәйнетдинов (6+)
11.35 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Йома" (12+)
19.00 "Эдера". Нәфис фильм. 5 серия (12+)
20.00 Резеда Әминева. Концерт. 2014й. (6+)
21.00 "Кис ултырып". "Юлдаш йыры-2012" (12+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!"**
**10.00 Мультфильмы.**
**10.30 "Городок АЮЯ".**
**10.45 "Ғәләмәт донья".**
**11.00, 17.45, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 06.15 "Орнамент".**
**11.30, 21.30 Новости.**
**1.45, 20.00 "Весело живем" (12+).**
**12.00, 01.00 "Графиня де Монсоро". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости.**
**13.45 "Юлдаш йыры" представляет..."**
**14.15, 05.30 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Тәмле". Лучшее (12+).**
**15.15 "Зеркальце".**
**15.30 "Каникулы НЕстрогого режима".**
**15.45 "Байтус".**
**16.00 "Сулпылар".**
**16.15, 20.15 "Учим башкирский язык".**
**16.30 "Новости экономики".**
**16.45 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**17.00 "История признания" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**18.00 "Йома".**
**18.45 "Волшебный курай" (6+).**
**19.15, 04.30 "Черчилль". Сериал (12+).**
**20.30 "Сәңгелдәк".**
**20.45, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Телецентр".**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Попкорм" (16+).**
**23.30 "Автограф" (6+).**
**24.00 "Еду я в деревню". Лучшее.**
**02.00 Г.Каюмов. "Наследство" (12+).**
**03.45 "Жизнь замечательных людей".**

## 28 ИЮНЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
04.00, 06.10 "Леопард". Худ. фильм (12+).
06.00 Новости.
07.00 "мы из джаза". Худ. фильм (12+).
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Дорога к Первой мировой". 100 лет со дня "Сараевского убийства".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт" (16+).
13.10 "Роман с камнем". Худ. фильм (16+).
15.05 "Клара Лучко. Поздняя любовь" (12+).
15.55 "Кубанские казаки". Музыкальный фильм.
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами).
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.20 "Две звезды".
21.00 "Время".
21.25 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.10 "Вся жизнь в перчатках. Продолжение следует".
24.00 "Глаза змеи". Худ. фильм (16+).
02.00 Чемпионат мира по футболу-2014. 1/8 финала. Прямой эфир из Бразилии.
04.00 "В наше время" (12+).

### РОССИЯ 1
05.55 "Дело № 306". Худ. фильм.
07.30 "Сельское утро".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Язь. Перезагрузка" (12+).
09.00 "Планета собак".
09.30 "Земля героев".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Вести. Дежурная часть".
11.55 "Честный детектив" (16+).
12.25 "Море по колено". Сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Когда цветет сирень". Худ. фильм (16+).
16.25 "Смеяться разрешается".
17.45 "Субботний вечер".
19.45 "Я подарю тебе любовь". Мелодрама (12+).
21.30, 23.55 "Вести в субботу".
21.45 Футбол. Чемпионат мира. 1/8 финала. Прямая трансляция из Бразилии.
00.50 "В городе Сочи темные носи". Худ. фильм.
03.20 Торжественное закрытие 36-го Московского международного кинофестиваля.
04.45 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Автограф". Сафуан Әлибаев (6+)
11.50 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Йөрәктәргә дауа моңло йырҙар". Әлим Ҡәйүмов (6+)
18.00 "Күңелле йәшәйбеҙ". Спектакль (12+)
21.00 "Кис ултырып". Фидан һәм Азамат Ғафаровтар (12+)

### БСТ
**07.00, 12.30, 22.30 Новости.**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.30, 13.45, 06.00 "Весело живем" (12+).**
**09.00 "Сәләм+" (12+).**
**09.15 Мультфильмы.**
**09.45 "Здоровое решение" (12+).**
**10.15 "КЛИО" (6+).**
**11.00 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха".**
**12.00 "Следопыт" (6+).**
**12.45, 05.30 "Үткән ғүмер. 1970-е годы" (6+).**
**13.15, 06.30 "Замандаштар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" по заявкам телезрителей.**
**16.00 "Серебряный сезон". Ретроспектива лучших матчей ХК "Салават Юлаев" 2013-2014.**
**17.45 "Хазина" (6+).**
**18.15 "Башкорттар".**
**18.45 Художественный фильм "Чартер" (12+).**
**20.15 Репортаж с республиканского конкурса "Здравствуй, здравствуй, сказка!"**
**20.30 "Сәңгелдәк".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Көндәлек. Выпускной" (6+).**
**21.30 Новости (на русск. яз.).**
**22.00 "Живое село".**
**23.00 "Башҡорт йыры-2014" (6+).**
**23.30 "Дарман".**
**00.15 "На краю стою". Худ. фильм (16+).**
**01.45 "Жизнь замечательных людей" (12+).**
**02.30 Ф.Богданов. "Падающая звезда". Спектакль (12+).**
**04.45 "Мелодии души" (12+).**

## 29 ИЮНЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
04.50, 06.10 "Луковые новости". Худ. фильм (16+).
06.00 Новости.
06.30 "Аты-баты, шли солдаты..." Худ. фильм (12+).
08.10 "Армейский магазин" (16+).
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" с Дм.Крыловым (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Жемчужина Нила". Худ. фильм (16+).
14.20 "Принцесса на бобах". Худ. фильм (12+).
16.30, 18.15 "Универсальный артист".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.00 "Повтори!". Пародийное шоу.
23.50 "Рок-н-ролл в объективе. Фотографии Боба Груэна" (16+).
02.00 Чемпионат мира по футболу-2014. 1/8 финала. Прямой эфир из Бразилии.
04.00 "В наше время" (12+).

### РОССИЯ 1
06.00 "Тайна записной книжки". Детектив.
07.45 "Моя планета" представляет: "Кузнецкий Алатау". Док. фильм.
08.15 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.45 "Утренняя почта".
09.25 "Свадебный генерал" (12+).
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Дневник чемпионата мира".
11.40, 14.30 "Жена офицера". Мелодраматический сериал. 8 серий (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
19.30 "Вести недели".
21.45 Футбол. Чемпионат мира. 1/8 финала. Прямая трансляция из Бразилии.
23.55 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
01.45 "Искушение". Драма (16+).
03.35 "Планета собак".
04.10 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Автограф". Тимерғәле Ҡолмөхәмәтов (6+)
11.50 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит" (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Еңел пар менән". Фильм (12+)
18.00 "Сак-сак". Фильм (6+)
20.00 "Йондоҙло сәғәт". Иҙел Нурғәлин (6+)
21.00 "Кис ултырып". "Йәштәр ҡалаһы". Сәғиҙулла Байегет (12+)

### БСТ
**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.30 "Йома".**
**09.00, 18.45 "Автограф" (6+).**
**09.30 Мультфильмы**
**10.00 "Физ-ра".**
**10.30 "Юные виртуозы Уфы".**
**10.45 "Городок АЮЯ".**
**11.00 "Бауырһаҡ".**
**11.15 "Шәп арба".**
**11.30 "Сулпылар".**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30, 21.30 Новости недели.**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башкорттар".**
**14.00 Юбилейный бенефис Назифы Кадыровой (6+).**
**15.30 "Замандаштар" (6+).**
**16.00 Ретроспектива лучших матчей ХК "Салават Юлаев" 2013-2014.**
**17.45 "Наука 102" (6+).**
**18.00 "Дорога к храму".**
**18.30 "Специальный репортаж" (16+).**
**19.15 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**19.30 "История признания" (12+).**
**19.45 "Новоселье с "Радугой" (12+).**
**20.00 "Любимое дело" (12+).**
**20.30 "Время спорта" (16+).**
**21.00 "Лото 6 из 40+ Джокер".**
**21.15 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**22.15 "Баик".**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Симфоническая ночь" open air.**
**02.30 Н.Гоголь. "Женитьба" (12+).**
**05.00 "Жизнь замечательных людей" (12+).**
**06.00 "Попкорм" (16+).**
**06.30 "Здоровое решение" (12+).**

✔ Компьютерҙың яуабы менән үҙе лә әллә ни ҡәнәғәт булмаған Харт был тәжрибәне тағы әллә нисәмә тапҡыр ҡабатлай. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, машина бер үк яҙыуҙы сығара: "Мөхәммәт бәйғәмбәр!"



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ДАНЛЫ ЯУГИРҘАРЫБЫҘ




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

**24-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Сәлимов. Сыбарғанат. Алма. Баянист. Юнысов. Ярмуллин. Кипр. Саксофон. Манометр. Юлдашева. Латипов. Ҡунафин. Науа. Тәбәрәк. Ләжәнкә. Тат. Аҡыя. Тәрилкә. Елкә. Тауыҡ. Гербарий. Киев. Лава. Устав. Терке. Аҡса. Карта. Ағас. Юлдашбаев. Юннат. Әпше.

**Вертикаль буйынса:** Ысул. Дәүләтбәков. Тоннаж. Ент. Несси. Әминев. Овал. Самбо. Ҡәбәхәтлек. Авеню. Алюмин. Сталинград. Азарт. Аманат. Сүкеш. Инабат. Ҡамҡа. Бейә. Ярма. Груша. Театр. Ҡотоева. Вече. Ҡыяр. Бысҡы. Лампа. Янбаева. Форинт. Апачи. Нерон. Көрт. Йога.

*МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ*

## ИҢ БӨЙӨК КЕШЕ КЕМ?

**Америка ғалимы Майкл Харт "Тарихтағы 100 кеше" тигән китап сығара. Тарихтағы иң танылған йөҙ кешене асыҡлау үҙе үк әһәмиәтле һәм иғтибарға лайыҡлы ваҡиға.**

Майкл Харттың тикшеренеү алымы шуға ҡайтып ҡала: кешенең һәләтлектәре, алдына ҡуйылған маҡсаттары, башҡарған эштәре, кешелек тарихына инеп ҡалған ҡаҙаныштары тураһындағы мәғлүмәттәр компьютерға һалына. Компьютер математик анализ ярҙамында алһыҙ-ялһыҙ эшләй. Һәм бына һуңғы аҙым: Харт тулҡынланып компьютер төймәһенә баҫа һәм экранда яҙыу күренә - "Мөхәммәт бәйғәмбәр". Был һығымта Харттың коллегаларына оҡшамай. Улар тәжрибәне ҡабатларға ныҡыша. Компьютерҙың яуабы менән үҙе лә әллә ни ҡәнәғәт булмаған Харт был тәжрибәне тағы әллә нисәмә тапҡыр ҡабатлай. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, машина бер үк яҙыуҙы сығара: "Мөхәммәт бәйғәмбәр!"

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1435 һижри йыл.*

| Июнь (Шәғбан - Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, ахшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 23 (25) дүшәмбе | 3:41 | 4:11 | 5:41 | 14:30 | 21:25 | 22:55 | 0:25 |
| 24 (26) шишәмбе | 3:41 | 4:11 | 5:41 | 14:30 | 21:25 | 22:55 | 0:25 |
| 25 (27) шаршамбы | 3:42 | 4:12 | 5:42 | 14:30 | 21:25 | 22:55 | 0:25 |
| 26 (28) кесе йома | 3:42 | 4:12 | 5:42 | 14:30 | 21:25 | 22:55 | 0:25 |
| 27 (29) йома | 3:43 | 4:13 | 5:43 | 14:30 | 21:25 | 22:55 | 0:25 |
| 28 (1) шәмбе | 3:43 | 4:13 | 5:43 | 14:30 | 21:24 | 22:54 | 0:24 |
| 29 (2) йәкшәмбе | 3:44 | 4:14 | 5:44 | 14:30 | 21:24 | 22:54 | 0:24 |

*"Дини тәҡүим"дән алынды.*

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

## ЯҢЫ ҺӘЙКӘЛ ПРОЕКТЫ

**Киләһе йыл донъя йәмәғәтселеге Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығын ҡаршыларға әҙерләнә. Бигерәк тә был бөйөк байрам Рәсәй халҡы өсөн ҡәҙерле. Шуға ла һәр кем уны лайыҡлы ҡаршыларға ниәтләй. Был йәһәттән Өфө дәүләт нефть-техник университеты архитектура-төҙөлөш факультеты беренсе курс студенттарының һәм Орджоникидзе районы Ветерандар советының үҙ идеялары бар.**

Буласаҡ архитекторҙар алдында еңел булмаған бурыс тора: улар Рәсәй халҡының Еңеүен тыл хеҙмәтсәндәренә ҡуйыласаҡ һәйкәл аша сағылдырырға тейеш. Талиптар был бурысҡа етди ҡарай, сөнки һайлап алынасаҡ проект артабан республика ҡаҙанышына әүереләсәк.

Барлығы 18 эш тәҡдим ителә һәм уларҙың һәр ҡайһыһы иғтибарға һәм тормошҡа ашырылыуға лайыҡ. Әммә иң мөһиме - проекттар аныҡ һәм улар артыҡ сығымдар талап итмәй. Шуға күрә Орджоникидзе районының Ветерандар советы ошо проекттар буйынса баш ҡаланың һәр районында һәйкәлдәр эшләү идеяһын күтәреп сыға һәм идея хуплау таба.

## СӘЛӘМӘТЛЕК МӨҺИМЕРӘК

**Уҡытыусыларҙың, тәрбиәселәрҙең һәм мәғариф өлкәһендә эшләүсе башҡа хеҙмәткәрҙәрҙең медицина тикшерелеүе һөнәри яраҡлылыҡты билдәләү өсөн генә түгел, ә һөнәри сирҙәрҙе ваҡытында асыҡлап, уларҙы профилактикалау өсөн дә кәрәк.**

Законға ярашлы, медосмотр үтеү өсөн сығымдар бүлеү эш биреүсегә йөкмәтелә. Әммә ҡайһы бер мәғариф учреждениеларының бюджеттары был бурысты тулыһынса үтәмәй. Ҡала хакимиәтендә уҙған кәңәшмә тап ошо мәсьәләне асыҡлауға арналды ла инде. Әгәр педагогик хеҙмәткәрҙәргә медицина тикшереүе үткәреүгә сығымдар бүлеүҙең берҙәм тәртибе булдырылһа, шулай уҡ финанс сығымдары нормативы эшләнһә, был барлыҡҡа килгән проблеманы ниндәйҙер кимәлдә кәметер ине, моғайын. Әммә мәсьәләне улар ҙа тулыһынса хәл итмәйәсәк, шуға күрә баш ҡаланың мәғариф идаралығы "Мәғарифты үҫтереү" программаһына үҙгәрештәр индереү һәм өҫтәмә аҡсалата сығымдар бүлеү мөмкинлеген ҡарау тәҡдиме менән сығыш яһай. Был идеяны ҡала хакимиәтенең Һаулыҡ һаҡлау идаралығы ла хуплай.

## РИЗЫҠ ҠИММӘТЛӘНГӘН

**Республикала туҡланыу аҙыҡ-түлек йыйылмаһының минималь хаҡы майҙа 2974,95 һум тәшкил итте.**

Башҡортостанстат мәғлүмәттәренә ярашлы, йыл башынан алып был йыйылма 13,4 процентҡа ҡиммәтләнгән. Республикала был ваҡыт эсендә инфляция 4,1 процент тәшкил итте. 2013 йылдың ғинуар-майына ҡарата барыһынан бигерәк аҙыҡ-түлек 107 процентҡа ҡыйбатланған. Хеҙмәттәрҙең хаҡы 3,6 процентҡа, аҙыҡ-түлек булмаған тауарҙар 1,4 процентҡа артҡан.

*ИҒЛАН*

2 йәшлек сабыйға ғаиләбеҙ менән бер йыл самаһы ваҡытҡа (ярты йылдан һуң отпуск бирелеүе мөмкин) Мәскәүгә күсеп китергә риза булған **бала ҡараусы** эҙләйем. Юл хаҡы һәм туҡланыу сығымдары - эш биреүсенән. Бала яратҡан, изгелекле, бурысына яуаплы ҡараған һәм башҡортса яҡшы белгән (хаҡлы ялдағы, йәше бик оло булмаған) ҡатын-ҡыҙ килһә, бик яҡшы булыр ине. Педагогик белемле (башланғыс кластар уҡытыусыһы) булыуы хәйерлерәк. Өфө һәм баш ҡалаға яҡын райондарҙа йәшәгәндәргә өҫтөнлөк бирелә.

**Эш хаҡы - айына 30 мең һум.**

**Телефон: 8 903 310 37 58.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

# САЛАУАТ ЙЫЙЫНЫ...

## 5 июлдә була



**Милли батырыбыҙ, сәсән, шағир-импровизатор, 1773-1775 йылдарҙағы Крәстиәндәр һуғышы полководецы Салауат Юлаевтың тыуыуына 260 йыл тулыуға арналған "Салауат йыйыны" республика фольклор байрамы 5 июлгә күсерелде. Ул йылдағыса Салауат районы Малаяҙ ауылы эргәһендә үтәсәк.**

Бар тормошо һәм эшмәкәрлеге батырлыҡ, илһөйәрлек өлгөһө булған Салауат Юлаевтың исеме һәм образы аша йәш быуында үҙ халҡына, унын тарихи үткәненә һөйөү, милли ғорурлыҡ, ололарға ихтирам тойғоларын тәрбиәләү маҡсатында үткәрелгән байрам сиктәрендә Президент грантына лайыҡ булған "Йүрүҙән" этнофестивале буласаҡ. Фестиваль программаһында "Батыр тоҡомо", "Йөҙөк ҡашы - Зөләйха", этник төркөмдәр араһында "...Егерме лә ике йәшендә" конкурстары, халҡыбыҙҙың традицион бәйгеләре, шул иҫәптән С. Юлаев исемендәге призға көрәш ойоштороло.

"Батыр тоҡомо" этноконкурсы 16-25 йәшлек егеттәр араһында үтә. Улар түбәндәге конкурстарҙа көс һынашасаҡ: 1) Презентация (үҙ төбәгенең этнографик кейемен, ҡоралдарҙың макетын күрһәтергә; шәжәрәһен, ырыу батырҙарын, тамғаһын, ҡошон, ағасын, оранын белергә тейеш). 2) Ҡобайыр, халыҡ йыры, ҡурайҙа йәки башҡа милли музыка ҡоралдарында уйнау - теләк буйынса. 3) С. Юлаевтың шиғырҙарын һөйләү буйынса поэтик ярыш. 4) Халыҡ бейеүе.

"Йөҙөк ҡашы - Зөләйха" этноконкурсында 16-22 йәшлек ҡыҙҙар ҡатнаша. Шарттар егеттәр араһында үткән конкурстыҡы кеүек.

"...Егерме лә ике йәшендә" конкурсы репертуарында С. Юлаевтың эшмәкәрлеге, ижады темаһын асыусы халыҡ йыры, көйө булған этнотөркөмдәр араһында уҙа. Икенсе әҫәр - төркөмдөң һайлауы буйынса.

"Көмөш өҙәңге" эшҡыуарлыҡ инициативалары һәм кәсепселек конкурсында кәсепселек эшмәкәрлеген алып барған предприятиелар, шәхси эшҡыуарҙар, айырым оҫталар, рәссамдар, уҡыу йорттары, түңәрәктәр һәм ижади коллективтар ҡатнаша.

"Исемем - Салауат" парадында республика районлары һәм ҡалаларынан батыр исемен лайыҡлы йөрөткән Салауат атлы ир-егеттәр ҡатнаша.

"Салауат" бейеү флешмоб-ритайыны 4 июль көнө кис ойоштороло. Унда ҡала һәм районларҙан килгән бейеү төркөмдәре ҡатнаша. Ул башҡорт халыҡ һәм заманса хореография элементтарынан торған халыҡ уйындары, бейеүҙәрҙән торасаҡ. Милли биҙәнеү әйберҙәре, яулыҡтар мотлаҡ.

Байрамда "Рәсәйҙең рәссамдар союзы" Бөтөн Рәсәй ижади йәмәғәт ойошмаһының төбәк бүлексәһе асыҡ һауала рәссамдар өсөн конкурс уҙғара.

**Республика халыҡ ижады үҙәге.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ҠЫРЫМ ЯҠТАРЫНА...

## мәҙәни күпер

**Республикабыҙ өсөн Ҡырымдың Белогорский районы үҙ төбәгенә әүерелде. Күптән түгел алыҫ араларҙы яҡын итеп был районға артистарыбыҙ ҙа барып ҡайтты. Үҙенсәлекле сәфәр тураһында уны ойоштороусы, Башҡортостандың халыҡ артисы Сәғиҙулла БАЙЕГЕТ һөйләй:**



-Башҡортостандың халыҡ артисы Урал Мортазин, "Рәсәй1" каналы журналистары менән бергә бик үҙенсәлекле сәфәр ҡылып ҡайттыҡ. Ҡырым бөгөнгө көндә һәр беребеҙҙең теленән төшмәгән атамаға әүерелде һәм беҙҙең һәр беребеҙ унын халҡы, уларҙың артабанғы яҙмышы өсөн борсолоу кисерәбеҙ. Белогорскийға барып төшөү менән шуны аңланыҡ: халыҡ Рәсәй менән бергә йәшәргә бик тә риза. Әлбиттә, туристик зонала йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, социаль хәлдәре ауырыраҡ. 50-60 саҡрым алыҫлыҡта ғына диңгеҙ урынлашҡан, унын барлығы һиҙелә, һауа бөтөнләй икенсе. Тәбиғәттәре лә бик матур, яҡшы һаҡланған. Беҙ күптән баҙар иҡтисадына аяҡ баҫһаҡ, улар һаман да элекке ҡоролошта йәшәп ятҡан кеүек. Ҡаланың эргәһендә генә "Аҡ ҡая" тигән урын бар, ул күптәргә совет фильмдары аша таныш. Ғөмүмән, туристар өсөн ҡыҙыҡлы урындар етерлек, диңгеҙ ситендә заманса отелдәр, рестострандар ҙа күп, туризм йүнәлеше ниндәйҙер кимәлдә үҫтерелгән. Ҡайҙа ҡарама - йөҙөм плантациялары урынлашҡан.

Мәҙәниәт эшмәкәрҙәре булараҡ, беҙ районда мәҙәниәттең торошона күберәк иғтибар иттек. Күптән профессиональ артистар күргәнебеҙ юҡ, үҙешмәкәр коллективтарҙың концерттарынан башҡа саралар үтмәй, ти урындағы халыҡ. Мәҙәниәт башланғыс кимәлдә булғас, таланттары ла үҙҙәрендә тотҡарланмай, ҙурыраҡ ҡалаларға тартыла. Урындағы мәҙәниәт йорто ташландыҡ хәлдә, күптән ремонт күрмәгән. Беҙҙең концертыбыҙ музыка мәктәбе сәхнәһендә үтте. Башҡорт ҡурайы, башҡорт йыры, башҡорт бейеүен яҡшы ҡабул иттеләр. Башҡорт балынан тыш, башҡорт мәҙәниәте менән бөтөнләй таныш түгелдәр икәнлеген аңланыҡ. Ҡурайҙы тотоп ҡарап, ентекләп тикшерҙеләр, үҙҙәрен дә уйнарға өйрәтеүҙәрен һоранылар. Ҡырым татарҙарының теле төрөк теленә яҡыныраҡ, бик ихлас халыҡ, беҙҙәге тамашасы кеүек тартынып тормайҙар, үҙҙәрен иркен тоталар.

Егерме йыл сәхнәләрҙә сығыш яһау дәүерендә ижадымда төрлө мәлдәр булды, әммә һуңғы ярты йылдағы ваҡиғалар күп нәмәгә ҡарашымды үҙгәртте. Тыумыштан азатлыҡ һөйөүсән рухым, намыҫыма ҡаршы бара белмәүем һөҙөмтәһендә, бәлки, үҙем генә түгел, тамашасым да нимәнелер юғалталыр. Шулай ҙа был ваҡиғаларҙы ыңғай үҙгәрештәр өсөн башланғыс, тип ҡабул итәм һәм был сәфәребеҙ шуның бер күрһәткесе булып тора. Башҡортостан менән Белогорский араһында мәҙәни күперҙе башлап һалыусылар итеп тарих та хәтерләр әле беҙҙе.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТӘҮҘӘ ҮҘЕҢ ЯРҘАМ ИТ,

## шунан кешенән ярҙам көт

Башым китмәһен, тип ултырған башлыҡтан илгә изгелек көтмә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Аллаһ - яҙыусы, ә беҙ бер үк ваҡытта төп геройҙар ҙа, уҡыусылар ҙа.

**(Айзек Зингер).**

Артыҡ байлыҡ яҡшыға түгел. Әгәр ҙә һинең сәғәтең берәү генә икән, һин ваҡыттың күпме булыуын һәр ваҡыт белә алаһың. Әгәр сәғәтең икәү икән, һин һис ҡасан дөрөҫ кенә ваҡытты белә алмайһың.

**(Ли Сегалл).**

Бөгөнгө борсолоуҙарыңа ул ҡәҙәре әһәмиәт бирмә, иртәгә яңылары булыр.

**(Арнольд Шенбергер).**

Әхлаҡ беҙҙе нисек бәхетле булырға өйрәтмәй, ә бәхеткә нисек лайыҡлы булырға өйрәтә.

**(Иммануил Кант).**

Атты һыу сығанағы янына килтереп була, ләкин уны һыу эсергә мәжбүр итеп булмай.

**(Инглиз мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Билдәле булыуынса, Македонский бар донъяны яулап алғандан һуң, бүлмәһенә бикләнеп, ярһып илаған. Уның ярандары был хәлгә бик аптыраған. Нимә булды икән? Улар бит хакимдарын бер ваҡытта ла бындай күңел төшөнкөлөгөндә, етмәһә, илаған килеш күргәне юҡ. Ниндәй генә ауыр хәлдәрҙә ҡалманылар, күп тапҡырҙар үлем менән күҙмә-күҙ осраштылар. Шул саҡта ла улар хакимдарының йөҙөндә ҡурҡыу, икеләнеү сатҡылары күрмәне. Ул һәр саҡ башҡаларға батырлыҡ, фиҙаҡәрлек, ҡыйыулыҡ өлгөһө булды. Ә хәҙер, бар донъяны яулап алғас, шундай оло маҡсатына өлгәшкәс, ниңә бошона, ни булды һуң уға?**

**Македонский бүлмәһенә бикләнеп, унда арыу ғына тотҡарланғас, борсолоп, ярандары уның ишеген ҡаҡҡан һәм:**

**-Ни булды, хакимыбыҙ, ни өсөн илайһың? - тип һорарға батырсылыҡ иткән.**

**-Илайым, сөнки бары тик әле, оло еңеү яулағас ҡына, үҙемдең еңелеүемде аңланым, - тип яуап биргән Македонский. - Тап ошо урында, ошо диуарҙар эсендә, "Донъяны яуларға!" тигән ахмаҡлыҡ башыма килгәйне, әле лә мин ошо уҡ урында баҫып торам. Әммә был хәҡиҡәт әле генә асылды, сөнки мин элек юлда инем, алда оло маҡсат әйҙәй ине. Хәҙер инде минең барыр юлым юҡ, сөнки барыһы ла яуланған. Күңелемдә оло бушлыҡ ҡына тоям. Мин ысынлап та еңелдем..."**

1158221891100б

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 20 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5153
Заказ 1932